ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

7-13 ғинуар (һыуығай) 2017

№ 1 (731)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Патриоттар булайыҡ! 2-3



Ҡышҡы мәжлестәр ҙә… тарихҡа күсте 6



Ир-егетте әтәс итәйек: ҡураға ла, өйгә лә, илгә лә хужа булһындар! 8-9



Һаңғырауға сәләм бирһәң… 12-13



Календарь 14

**Һинең турала ниндәйҙер ҡырын һүҙ әйтеүселәргә иғтибар итмә, ысынында улар һиңә түгел, ә үҙҙәренә зыян килтерә. Кемдер һине әрләй икән, тимәк, һин был тормошта нимәгәлер өлгәшкәнһең. Шуны бел: артыңдан насар хәбәр һөйләгән кеше үҙенең Хоҙай рәхмәтенә илтер ҡайһы бер изге эштәренән яҙҙы һәм һинең ҡайһы бер гонаһтарыңды юйҙы, тигән һүҙ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Яңы йылыңдың нисек килере уны нисек ҡаршылауыңа бәйле, тигәнгә ышанаһығыҙмы?

***Людвиг ШАБАНОВ, хеҙмәт ветераны, Башҡортостандың атҡаҙанған химигы:*** Ышанам, халыҡта шундай ырым да бар бит. Яңы йыл ҡаршылау тантанаһын ғаилә байрамы, тип иҫәпләйем. Шуға ла күпселек осраҡта өйҙә, ҡатыным, улым менән бергәләшеп ҡаршыларға тырышабыҙ уны: үҙ өйөндә - үҙ көйөң, тигәндәй, иркенләп һөйләшеп-фекерләшеп алырға форсат тыуа, үҙең теләгән телетапшырыуҙы ҡарарға мөмкин. Эс, тип көрәгә күтәргән, мәжбүрләгән кеше, иҫерек ығы-зығы юҡ - йәнгә рәхәт! Бөтәһе лә үҙеңсә - кеше күңелен күрергә, бының өсөн төп күтәрергә, дежур телмәр тоторға ла кәрәкмәй. Ихлас ҡына итеп үҙебеҙҙең баҡсабыҙҙа үҫтергән йәшелсә-емештән табын әҙерләй еңгәгеҙ, мин ҡулдан килгәнсә ярҙам иткән булам шунда. Һиллек, рәхәт - айырыуса бер күңел тыныслығы кисерәм мин Яңы йыл кисендә. Һәм, шөкөр, әйткәндәй булмаһын, йылдарыбыҙ ҙа ана шулай бер көйгә, күнегелгән режимда матур ғына үтә тора. Өлкәнәйгәс, кешегә тағы ни кәрәк? Тик бына оло йортобоҙ - илебеҙ, планетабыҙ ҙа имен, тыныс булһын ине, тип теләйем. Бигерәк буталды бит халыҡ-ара хәл. Яңы йыл кисен айыҡ аҡыл менән, изге доғалар уҡып ҡаршылайыҡ, йылдарҙың имен килеүен теләйек, илйортҡа - бәрәкәт, ҡот ҡунһын, үҙебеҙ сәләмәт булайыҡ, амин!

***Таһир ӘХМӘТШИН, мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Бынан егерме йыллап элекке бер Яңы йылым ғүмерлек һабаҡ бирҙе минә. Йәш, дәртле саҡ, дыуамаллыҡ та етерлек. Ауыл клубында мөдир булып эшләйем. Ата-әсәләрҙең һорауы буйынса Яңы йыл кисендә Ҡыш бабай булып кейенеп, өй беренсә ауылдаштарымды ҡотларға сығып киттем. Ҡарһылыу юҡ, ҡыҙҙарҙы ризалаштырып булманы: ауылдың арғы осондағы өйҙә йәштәр аулаҡ ойошторған, бөтәһе лә шунда ашыға. Ул саҡ ауылыбыҙҙа байрамдар эскеһеҙ үтмәй ине. Өй һайын тиерлек самогон аппараты. Шулай булғас, күҙ алдына килтерәһегеҙҙер: өй һайын Ҡыш бабайға - һый-хөрмәт. Инде балалар ҙа йоҡлап бөткән, ә байрам туҡтарға уйламай. Киреһенсә, ҡыҙа ғына бара. Ауылдың яртыһын ҡотлап сыҡҡансы, мин аяғымда ла баҫып тора алмай инем инде... Ә бүләктәрҙе таратып бөтөргә кәрәк, аҡсаһы түләнгән бит! Һуңғыһымы, түгелме - сираттағы өйҙән сыҡҡанымды хәтерләмәйем. Аулаҡтан ҡайтып барған йәштәр урамда иҫһеҙ ятҡанымды күреп, машинаға тейәп, район дауаханаһына илтеп һалғандар. Аяҡта быйма ине - бирешмәгән, ә бына бит-ҡулым туңып, шул йылды оҙаҡ ҡына дауаханала ятып сығырға тура килде. Ярай әле, бармаҡтарымды ҡырҡмай һаҡлап ҡалдылар, табиптарға рәхмәтлемен. Мин бит баянсы - ни эшләр инем шунан? Барыбер оҙаҡ ҡына уйнай алмай аҙапландым. Ана шул йылдан һуң эсеүҙе күрә алмайым, бөтөнләй ташланым. Яңы йылды ғаиләм менән эскеһеҙ ҡаршылағаны бирле һаулығым да нығынды, эшем дә ыңғай, тәгәрләп кенә бара - ижад ҡомары баҫты: йырҙар яҙам, уларҙың бер нисәүһен филармония йырсылары яратып башҡара, радионан да йыш тапшыралар. Ырымсыл кеше түгелмен, шулай ҙа Яңы йылды матур итеп ҡаршылаһаң, йылың да уңышлы булыр, тигәнгә ихлас ышанам.

(Дауамы 2-се биттә).

ЯҢЫ ЙЫЛ МЕНӘН!

*Яңы йылда таңдан Ер шарының*
*Соңҡаһына баҫҡан көйөнсә,*
*Ҡысҡыраһым килә бар тарафҡа:*
*Һөйөнсө! Һө-йөн-сө! Һө-йөн-сө!*
*Һөйөнсөмә сөм күк сыңлап китһен,*
*Һипкән саҡта гәлсәр ҡарҙарын,*
*Шаңдап шул һүҙ, Ерҙе урап сығып,*
*Онотторһа икән аһ-зарын.*
*"Һөйөнсө!" тип шул һүҙ сыңғыратып,*
*Зиндандарҙың асһын ишеген,*
*Сынйырҙары селпәрәмә килһен*
*Тәүбәһенә ҡайтҡан кешенең.*
*Алып китһен юлдар төйәгенә*
*Илкәйенән биҙгән бәндәне.*
*"Һөйөнсө!" тип битлек кейгәндә лә*
*Үҙ өйөндә ҡалһын йән-тәне!*
*"Һөйөнсө!" тип юрап киләсәкте,*
*Һәр өрлөккә бишек аҫылһын;*
*Туған телендә тик һәр сабыйҙың*
*"Әсәй!" тиеп теле асылһын.*
*"Һөйөнсө!" тип балҡыр бөгөн ҡояш -*
*Йыһанымдың алтын сәғәте;*
*Ошо таңдан күсһен һәр көнөнә*
*Һөйөнсөләп тыуыу ғәҙәте.*
*Шатлыҡ килһә ташып, күңелемдә*
*"Һөйөнсө!" тип сыңлар мең ҡылым;*
*Бирешмәмен һарыр һағыштарға,*
*"Һөйөнсө!" тип тыуһа һәр йылым!*

**Сафуан ӘЛИБАЙ.**




12+

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Яңы йылыңдың нисек килере уны нисек ҡаршылауыңа бәйле, тигәнгә ышанаһығыҙмы?

(Башы 1-се биттә).

*Айгөл МИҺРАНОВА, БДМУ студенты:* Яңы йылды нисек ҡаршылаһаң, йылың шулай үтер, тигәнгә, бер яҡтан, ышанып та ҡуям. Бында күберәк минең икеләнеүсән холҡом үҙ яғына auҙарырға итәләр. Икенсе яҡтан, һуңғы ваҡыт ана шул холҡома үҙем үк ҡаршылаша башланым. Ә шулай ҙа эске тауыш һәр ваҡыт ырымды боҙмаҫҡа, күнегелгән тәртипкә буйһонорға бойора. Бынан ике йыл элек, мәҫәлән, Яңы йылды бик күңелле итеп, Питерҙағы дуҫтарым янында ҡаршыланым. Ул, ғөмүмән, мажараға бай төн булды. Тәүҙә ҡумаҡлап караокеға йыйындыҡ. Барһаҡ, урындар булмау сәбәпле, унда инә алманыҡ. Унан аптырап торманыҡ, төнгө клубҡа киттек. Унда ла халыҡ күп, тик тышта торалар: урындар юҡ. Сираттағыларҙы берәмләп кенә индерәләр. Ни ҡылһаҡ, ҡылдыҡ - этешеп-төртөшөп, беҙ ҙә инеп киттек. Бер аҙ бейегәс, сәғәткә ҡараһаҡ, Яңы йыл куранттары һуғыуға ни бары ун минут ҡалған! Ҡыҙмаса булып алған бейеүселәр янында ҡалғы килмәне. Кире тышҡа сығып, Яңы йылды фейерверктарҙан һоҡланғыс салют аттырып ҡаршыланыҡ. Аҙаҡ күңелле уйындар, бейеү һәм мажаралар таңға тиклем дауам итте. Шунан, йылым нисек үтте, тип уйлайһығыҙ? Бер нисек тә... Ҡәҙимге "һоро" көндәр: лекция, имтихан, зачеттар... Уның ҡарауы, был юлы шундай тәжрибә үткәреп ҡарарға йыйынам: Яңы йыл кисәһенә дуҫтарым янына бармайынса, өйҙә - әсәйем менән бесәйем янында тыныс ҡына ултырырға булдым. Йылым нисек булыр икән?

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ПАТРИОТТАР БУЛАЙЫҠ!



**Һуңғы ваҡытта патриотлыҡ тураһында һөйләшеүҙәр үтә актуаль булып китте. Хәйер, һәр заманда ла көн ҡаҙағында торған тема инде был. Тик ваҡыты-ваҡыты менән ул онотола төшә, уны башҡа ҡиммәттәр алыштыра ла... кәмә ҡомға терәлә башлаһа, тағы патриотлыҡты иҫкә төшөрөргә кәрәк була. Нисек кенә булмаһын, ниндәй генә ҡоролошта йәшәмәйек, йәшәйешебеҙ патриотлыҡҡа нигеҙләнгән бит.**

Патриотлыҡ латин теленән яһалған һүҙ, патр - латинсанан атайсал тигәнде, атай тыуып үҫкән ергә тоғролоҡ, тигәнде аңлата булыр. Башҡортса беҙ уны илһөйәрлек тип йөрөтәбеҙ. Һуңғы йылдарҙа барыбер ҙә был төшөнсә музей ҡомартҡыһына әйләнә биреберәк ҡуйғайны. Быға заманалар, ҡиммәттәр үҙгәреү ҙә булышлыҡ иткәндер. Ниндәйҙер бер мәлдә бит өгөт-нәсихәтте, йолаларҙы, шул уҡ патриотлыҡ тәрбиәләй торған бар сараларҙы инҡар иттек. Етмәһә, пионер, комсомол ойошмалары юҡҡа сыҡты, әммә уларға бер ниндәй алмаш уйлап табылманы. Был иһә балалар, йәштәр араһындағы патриотлыҡ тәрбиәһенә бик ныҡ зыян килтерҙе. Әле лә бына ниндәйҙер бер һорау алыуҙар ваҡытында 93 процент респондент патриотик тәрбиә юҡлығы тураһында билдәләгән. Шулай инде, әгәр ҙә беҙ әйләнгән һайын Көнбайыш өлгөләренә башты борһаҡ, Үҙәк телевидениенан туктауһыҙ сит илгә сығып киткән шәхестәр тураһында һүҙ алып барылһа, балаларыбыҙҙы мәктәптәрҙә туған телен түгел, сит тел өйрәнергә, сит ил вуздарына уҡырға инергә өгөтләүҙе дауам итһәк, ниндәй патриотлыҡ тураһында һүҙ булыуы мөмкин? Бөгөн тотош илебеҙ сит ил шауҡымында бит! Бер саҡ кемдәр: "Беҙ бит мәктәптәребеҙҙә эмигранттар тәрбиәләйбеҙ..." - тип әйткәйне. Ҡыҙғаныска ҡаршы, был дөрөҫлөккә бик яҡын һүҙҙәр.

Патриотлыҡты кем тәрбиәләргә тейеш һуң? Әлбиттә, бар тәрбиәнең башы - ғаиләлә, тибеҙ. Ғаилә иң тәүҙә бала күңеленә уның кемлеген, кем балаһы булыуын, ниндәй һыуҙы һыулауын, ниндәй ерҙә, илдә йәшәүен, булған ҡиммәттәрҙе нисек ҡәҙерләргә кәрәклеген һеңдерергә тейеш. Әммә был ғына үтә аҙ. Тәрбиәле бала мәктәпкә бара, ә унда бөтөнләй башҡа ҡағиҙә, башҡа ҡиммәттәр өҫтөнлөк итә һәм ғаиләләге тәрбиә шунда уҡ юҡҡа сыға. Тимәк, барыбер ҙә мәктәп бит йәһәттән иң ҙур ролде уйнай. Балаһы тәрбиәләйһең-тәрбиәләйһең, уға өгөт-нәсихәт уҡыйһың, әммә ул мәктәптән ҡайта ла һинең бар әйткәндәреңде юҡҡа сығара. "Ә уҡытыусы шулай тине", тип әйтеп ҡуя барыбер. Мәктәптә уҡыған осорҙа барыбер ҙә бала өсөн уҡытыусының әйткәне төп ҡанун. Тимәк, илһөйәрлек тәрбиәләүсе сараларға мәктәптә төп иғтибар бирелергә тейеш.

Саралар, тигәндән. Патриотлыҡ ашаған аҙығың, кейгән кейемең менән дә һеңә һинең ҡанға. 80-се йылдар аҙағында, 90-сы йылдар башында патриотлыҡ тойғоларының һүрәнләнә биреүе сәбәбен мин хатта ашаған аҙығыбыҙҙа, кейгән ке-

БЫЛ АЙҘА...

# ҠАР КҮП ЯУҺЫН,

## ә күңелдәр ҡайнар булһын



**Яңы йылдың тәүге көнө - 1 ғинуарҙың Бөтөн донъя тыныслыҡ көнө менән тап килеүе бер ҙә осраҡлы түгелдер. Был айырыуса халыҡ-ара хәлдең һис ҡасан булмағанса ҡатмарлашҡан, планетабыҙҙың ҡуҙғытылған умарталай "гөж" килгән бөгөнгө осоронда мөһим. Күсте болартып, әленән-әле таяҡ тығып болғатырға быуаттар буйына оҫтарған, заманында "һуғыш суҡмары" ҡушаматына эйә булған АҠШ-тың донъя хакимы статусын юғалтыуҙан ҡурҡып, уғата шашыныуына шаһитбыҙ һуңғы мәлдәрҙә. Бәхеткә, күп кенә ябай америкалыларҙың да ысынбарлыҡҡа күҙе асылды хәҙер: туктауһыҙ һуғыш көҫәү, ҡоралды һәм бысраҡ мәғлүмәти һөжүм саралары, ике йөҙлө сәйәсәттән бүгеп, яңырыуға, позитив үҙгәрештәргә өмөт баглай ябай Америка. Йәшәрбеҙ - күрербеҙ, тик шуныһы раҫ: самаһыҙ ҡыланыуҙарҙың ҡасан да сиге була.**

**1-8 ғинуар** - өлкәндәр өсөн дә Яңы йыл каникулдары булһа, балалар өсөн ул артабан дауам итә. Шуға ла был көндәрҙә ата-әсәләргә балалары менән иркенләп аралашырға, ваҡыттарын мөмкин тиклем файҙалыраҡ үткәрергә форсат тыуа. Ғаилә менән һырғалаҡ шыуыу, катокка барыу, ҡала, ауыл майҙандарындағы ҡупшы шыршы янында уйнауҙан тыш, мюзейын, кинотеатрҙарҙа тамаша ҡылыусылар ҙа күп булыр, сөнки тап ошо көндәрҙә Балалар киноһы көнө **(8)** билдәләнә. Кемдәр шулай ял итә - бик дөрөҫ эшләй. Бер тигәс тә, балаларға күпме ҡыуаныс; икенсенән, күңелле ял өсөн ата-әсәләргә лә рәхмәттәр яуыр. Ата-әсәһенә рәхмәтле булыу балала ана шундай бәләкәй генә ҡыуаныстарҙан, ғаиләләге ыңғай мөхиттән башлана ла. Ә инде өйөндә рәхмәтте белмәгәндәр башҡаларҙы ла һанламай буй еткерер. Әйткәндәй, **11 ғинуарҙы** Бөтөн донъя "Рәхмәт" көнө итеп юҡҡа булдырмағандарҙыр, тик уны көн дә әйтергә онотмайыҡ бер-беребеҙгә. Уның өсөн иһә изге ғәмәлдәрҙе күберәк ҡылайыҡ.

Яңы йыл байрамын һәм каникулдарҙы яҡшы кәйефтә, иҫән-һау үткәреү өсөн айыҡлыҡты, сәләмәт йәшәү рәүешен һайлайыҡ. Ҡышҡы тәбиғәттә әүҙем ял - иң отошлоһо. Бының өсөн республикабыҙҙа мөмкинлектәр бик күп. Мәҫәлән, иң ылыҡтырғыс ял - Көньяҡ Урал һәм Шүлгәнташ ҡурсаулыҡтары буйлап атлы саналарҙа, һыбай, ҡарғиҙәрҙәрҙә һәм саңғыларҙа 2 көндән алып унан оҙағыраҡҡа төрлө турист маршруттары булдырылған. Тәбиғәт ҡосағындағы турбазаларҙа ғаиләләрҙе, күмәкләп ял итеүселәрҙе ҡупшы, унайлы агас өйҙәр, ауыл мунсаһы көтә. Павловка турбазалары, Абҙаҡ тау саңғыһы курор-

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе Дмитрий Медведев 2017-2019 йылдарҙа төбәк һәм урындағы бюджеттарҙың балансы булыуын тәьмин итеү буйынса саралар тураһында кәңәшмә уҙғарҙы, унда Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов та ҡатнашты. Дмитрий Медведев билдәләүенсә, һалым потенциалын арттырыу буйынса юғары һөҙөмтәләр күрһәтеүсе төбәктәргә киләһе йылдан 5 миллиард һумдан алып 20 миллиард һумға тиклем иктисади үҫеш иҫәбенә гранттар арттырыласаҡ. Бынан тыш, килемгә һалым артымының федераль өлөшөн төбәктәр ҡарамағында ҡалдырырға ҡарар ителеүе тураһында ла хәбәр ителде.

✓Республика Хөкүмәте Премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов "Башавтотранс" дәүләт унитар предприятиеһының генераль директоры Тимур Аклаевҡа газ-мотор ягыулығында эшләүсе 100 яңы автобустың символик асҡысын тапшырҙы. Транспорт республикаһының 100 йыллығын байрам итеүгә әҙерләнеү сиктәрендә һатып алынған. Премьер-министр әйтеүе буйынса, яңы техника Башҡортостандың ҡала һәм районда-рында, тәү сиратта, баш ҡалаһында экологик хәлдә яҡшыртасаҡ.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин балалар ялын ойоштороу тураһындағы законға ҡул ҡуйҙы, ул балаларҙың ғүмере һәм һаулығы хәүефһеҙлегенә талаптарҙы ҡатыландыра. Документ менән һөнәри стандарттар, шулай уҡ балалар менән махсус рәүештә әҙерләнмәгән кешеләрҙән эшләүен булдырмаҫ өсөн квалификациялы талаптар әҙерләү һәм раҫлау ҡаралған. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Рәсәйҙә балалар ялына айырыуса иғтибар 18 июндә Карелиялағы фажиғәнән һуң арта. Унда 14 бала һәләк була.

✓Рәсәйҙә составында спирт булған һәм аҙыҡ-түлек категорияһына ҡарамаған продукцияны ваҡлап һатыуҙы сикләү тураһындағы ҡарар үҙ көсөнә инде. Илдең баш санитар табибы легаль алкоголле һәм спиртлы продукцияның әйләнешен контролдә тотоу буйынса вәкәләттәрҙе тормошҡа ашырыу сиктәрендә һәм Хөкүмәт Рәйесе Дмитрий Медведевтың тапшырылған эшен үтәү юҫығында ошо ҡарарҙы ҡабул итә. Документҡа ярашлы, юридик шәхестәргә һәм шәхси эшҡыуарҙарға составында этил спирты 25 проценттан артыҡ булған эсергә ярамаған спиртлы продукцияны ваҡлап һатыуҙы туктатып торорға кәрәк.

йемебеҙҙә лә күрәм. Магазин тулы, баҙар тулы сит ил аҙыҡтары булды. Ябырылдыҡ шуларға. Шунан үҙебеҙҙекенә ҡайта башланыҡ. Бер миҫал. Америкала йәшәгән япондарҙың башҡалар ауырыған сирҙәр менән ауырымай икәнен белгән ғалимдар быныҡ сәбәбе менән ҡыҙыҡһына ҡуйған. Тикшерә башлағас, шул асыҡланған: япондар үҙҙәрен эш урынында ғына американдарса тота, ә үҙ йорттарына ҡайтып, ишек тупһаһы аша атлап инеү менән үҙ кимоноһын кейеп ала, үҙ аҙығын бешерә, туған телендә аралаша, үҙ йолалары эсендә ҡайнай. Ҡыҫҡаһы, үҙ өйөндә ул японлы булып йәшәй. Меңдәр араһында үҙ асылында, үҙең булып йәшәү - шул уҡ патриотлыҡ инде ул!

Һанай китһәң, патриотлыҡ өлгөләре бик күп. Илһөйәр кеше әллә ниндәй юғары һүҙҙәр ҙә һөйләп йөрөмәҫкә мөмкин, бәләкәй генә ғәмәлдәр ҙә билдәләй ала һинең был сифатты. Мәҫәлән, "Әгәр ҙә һин тыуған районыңдың патриоты икәнһең, Баймаҡ территорияһынан сығып китмәҫ элек машинаңа бензин ҡой", - тип әйтте Баймаҡ хакимиәте башлығы Илшат Ситдиҡов", - тип һөйләгәйне бер саҡ Әхмәр Үтәбай. Эйе, быныһы ла илһөйәрлек өлгөһөләр. Ә бына Рәсәй Президенты Владимир Путин бер нисә йыл элек Рәсәй машинаһы менән йөрөргә саҡырып, үҙе лә "Калина-Лада"ла йөрөп әйләнде, шунан ватандаштар күпләп ошо машинаны һатып ала башланы. Ошондайыраҡ өлгөләр күберәк булһын ине лә бит...

Өлгөләр тигәндәй, үткән аҙнала ил Президенты Владимир Путин Рәсәй һәм донъя журналистары менән осрашҡайны. Сарала ҡатнашыусы Башҡортостан журналисының бөтөнләй икенсе темаға арналған һорауы, әммә уның телмәрендә "Өфө", "суверенитет" тигән һүҙҙәр янғырауы Владимир Владимировичты илһөйәрлек темаһына төшөп китергә мәжбүр итте лә ҡуйҙы. Президенттың патриотлыҡты тап Башҡортостан, башҡорттар тарихына бәйләүе, әлбиттә, беҙҙең күңелдәргә май булып яғылды: "Башҡорттар һәр ваҡыт Рәсәй мәнфәғәте өсөн көрәшкән, - тине ул. - 1812 йылғы Ватан һуғышында Башҡортостан 16 йәшен тултырған бөтөн ир-егеттәрен атҡа атландырып, ҡулдарына ҡорал тотторoп, яуға оҙатҡан. Бөйөк Ватан һуғышы осоронда ла шулай булған - Башҡортостан халҡы ҙур фиҙаҡәрлек күрһәткән. Быныҡ менән ғорурланырға кәрәк..."

Эйе, беҙ үҙ тарихыбыҙ, үҙ еребеҙ, үҙ халҡыбыҙ менән ғорурланабыҙ. Ләкин беҙҙең йәнәшәлә йәшәгән бүтәндәрҙең дә ғорурлыҡ объекты булырға тейеш түгелме икән ошондай факттар? Бына элек башҡорт халҡы, уның мәҙәниәте тураһында бик күп башҡа милләт вәкилдәре - шул уҡ Лепехин, Рычков, Руденко, Толстойҙар нисек һоҡланып яҙған. Баһалаған. Әммә хәҙер беҙҙең хаҡта, ошо ерҙең хужалары тураһында беләме йәнәшәбеҙҙә йәшәгәндәр? Мәҫәлән, Башҡортостанды һәр саҡ дуҫлыҡ, татыулыҡ өлгөһө тип телгә алалар. Ә бит беҙҙең еребеҙҙәге тыныслыҡ, һиллек, татыулыҡ ул барыбер ҙә башҡорт халҡының менталитетына, толерантлығына бәйле. Шуға ла башҡорт халҡы булдырған дуҫлыҡ мөхитен, милләттең түҙемлек, асыҡ күңеллелек, ҡунаҡсыллыҡ, ихласлыҡ кеүек сифаттарын баһаларға өйрәнәһе бар әле күптәргә. Бына был да Башҡортостандың патриоты булыуҙың бер нигеҙе тип уйлайым.

Әйткәндәй, Владимир Путиндың әлеге әйткәндәрен БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачевтың: "Президенттың Башҡортостан халҡының юғары кимәлдәге патриотлығы тураһында әйткән һүҙҙәре журналистар менән осрашыуҙағы иң сағыу бер ваҡиға булды. Дәүләт етәксеһе башҡорт яугирҙарының Ватанды һаҡлауҙағы роленә юғары баһа бирҙе..." - тип, Башҡортостандың Рус соборы рәйесе Виктор Пчелинцевтың: "Президенттың башҡорт халҡы адресына әйтелгән һүҙҙәре беҙҙең өсөн бик ҡәҙерле. Бөгөн Башҡортостан, күп милләтле республика булараҡ, бөтә Рәсәй өсөн милләт-ара мөнәсәбәттәр өлгөһөнөң нигеҙе булып тора..." - тип баһалауы ла уларҙың ысын Башҡортостан патриоттары һәм башҡорт халҡының тоғро дуҫтары булыуын раҫлаусы һүҙҙәр бит.

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

тына, Өфө, Ишембай, Мәләүез, Стәрлетамаҡ һ.б. ҡалаларҙағы Ҡыш бабай тирмәһе янына ла ҡунаҡҡа барырға була. Ҡыҫҡаһы, күптәр Ҡурсаулыҡтар һәм милли парктар көнөн **(11)** ана шул тәбиғәт ҡомартҡылары ҡосағында үткәрергә атлығыр.

**13 ғинуарҙың** Рәсәй матбуғаты көнө икәнен дә хәтерегеҙгә төшөрәйек, сөнки был журналистарға ғына түгел, уҡыусыларыбыҙға ла ҡағыла. Уларҙың бит иң уҡымышлылары, зыялылары, ил-йорт хәбәре, матбуғат һүҙенә битараф булмаған әүҙемдәре 2017 йылда тағы ла "Киске Өфө"бөҙҙә ҡулдарына алыр, бергәләп ҡыуанырбыҙ, бергәләп йыуанырбыҙ, тик бына гәзиткә яҙылырға оноҡтандарға ғына моңһоу булыр. Хәйер, хәлде төҙәтергә бер ҡасан да һуң түгел, **17 ғинуарға** тиклем яҙылһағыҙ, 1 февралдән тағы ла бергә булырбыҙ.

Ҡышҡы каникулдары алдынан Рәсәй студенттары ла үҙ көндәрен **(25)** билдәләр. Ай ахыры - **29 ғинуар** - Халыҡ-ара саңғы спорты федерацияһы башланғыс менән Бөтөн донъя ҡар көнө иғлан ителгән. Кемгә - нимә, әммә ҡар тигәнең етерлек Рәсәйҙә, тик бына беҙҙең спортсыларҙы- әлеге сезонда саңғысыларыбыҙҙы, биатлонсыларыбыҙҙы - халыҡ-ара ярыштарға үткәрмәҫкә, ситләштерергә маташыуҙар, булған-булмаған ғонаһтарҙа ғәйепләүҙәр, ала ягыуҙар ҡасан туҡталыр? "Ҡыҙыл ҡар" яуғасмы?..

**Һыуығайҙа тыуғандар:**

**1 -** Этнограф, иҡтисадсы, сәйәсмән, 1917-1918 йылдарҙа Башҡорт милли хәрәкәте ҡатнашсыһы, иҡтисад фәндәре докторы **Ғәлимйән Таған**дың тыуыуына - 125 йыл (1892-1948).

**8 -** Башҡортостан һәм Рәсәй музыка сәнғәтенең мәшһүр эшмәкәре, композитор, Өфө дәүләт сәнғәт институтына нигеҙ һалыусы һәм 1968-1988 йылдарҙа уның ректоры, профессор, СССР, РСФСР һәм БАССР-ҙың халыҡ артисы **Заһир Исмәғилевтың** тыуыуына - 100 йыл (1917-2003).

**11 -** Ғалим-тюрколог, шағир һәм публицист, журналист, филология фәндәре докторы, профессор, БР Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Рәшит Шәкүргә** - 80 йәш (1937).

**15 -** Шағир, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Хәсән Назарға** - 75 йәш (1942).

**29 -** Шағир, драматург, журналист **Салауат Әбүзәргә** - 50 йәш (1967).

**31 -** Шағир-импровизатор, БАССР-ҙың халыҡ сәсәне **Фәррәх Дәүләтшиндың** тыуыуына - 130 йыл (1887-1956).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ӘЙҘӘГЕҘ, ҮҘЕБЕҘ...

***Радик ВӘХИТОВ, Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы лауреаты, яҙыусы:*** Егерме йыл эсендә халыҡ эшһеҙ йәшәргә күнегеп китте. Башта эш юҡ, тип илауланылар ҙа, аҙаҡ, урындар булһа ла, эшкә төшөргә ашыҡмай башланылар. Ниндәй егәрле халыҡ инек, битарафлыҡ, ялҡаулыҡ атланды елкәләргә. Хәҙер беҙҙең күп эштәрҙе үзбәк, тажик, ҡытайҙар башҡара, бер ташты икенсеһенә йәбештереп кенә һалырға эшкингәндәре лә аҡса эшләй. Ә борондан ағас, тимер эше менән данлы оҫта ҡуллы башҡорт ир-егеттәре Себерҙәргә китеп, оҙон аҡса артынан ҡыуып йөрөй. Ҡаф тау аръяғынан килгәндәр беҙҙә эшен дә, аҡсаһын да тапҡанда, үҙебеҙҙекеләрҙең шулай ситтә ҡаңғырып йөрөүе бигерәк үкенесле.

Һаман да баҙар иҡтисадына күнегеп, һатыу итергә өйрәнеп бөтә алмайбыҙ. Был өлкәлә лә бит аҡса эшләр мөмкинлектәр тулып ята. Бына, мәҫәлән, күрше Татарстан юлдары буйлап үткәндә ҡайһы урында ғына туҡтаһаң да бөйөрөк, башҡа ризыҡтар һатыусы ҡатын-ҡыҙҙар аҡса эшләп тора, юлсыға кәрәкле ниндәй генә төр әйбер тәҡдим итмәй улар. Башҡортостанға килеп инһәң - тынлыҡ, һатыу итеү түгел, юл һорашыр кеше күренмәй. Ә бит ике федераль трасса үткән республика юлдары буйлап машиналар менән бергә аҡса йылға булып аға. Элек Кропачево станцияһында урындағы ҡатын-ҡыҙҙар поездарҙағы пассажирҙарға бәлешен дә, ҡоймаҡ-маҙарын да, картуф-итен дә тәҡдим итә ине. Хәҙер улар ҙа юҡҡа сыҡты. Ауыл ерендә картуф сәсеп үҫтереүселәр, мал аҫырауҫылар аҙайыуҙанмылыр был?

Ә бит етәкселәр ҙә илде аяҡҡа баҫтырыуҙың төп көсө ауыл хужалығында икәнен, әллә ҡайҙан килгән инвесторҙың файҙаһы самалы булыуын аңлай башланы. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, шул арала ауыл кешеһе генә үҙең өсөн мал, баҡса үҫтереп, артҡанын һатып, үҙ йүнендә үҙең күреп кенә күтәрелергә мөмкин икәнен бер аҙ онотоп өлгөрҙө. Бына шуны иҫтәренә төшөрөргә кәрәк хәҙер. Һуңғы йылдарҙа күптәр натураль аҙыҡ-түлеккә, ауыл ерендә шәхси хужалыҡтарҙа үҫтерелгән йәшелсә-емешкә, иткә өҫтөнлөк бирә. Был да ауыл кешеһенә ниндәйҙер стимул бирергә тейеш. Әлбиттә, дәүләттән дә бик ҙур ярҙам талап итеlә: үҫтергән йәшелсә-картуфын, итен ҡулланыусыға еткерер өсөн бөтөн уңайлыҡтар тыуҙырылырға тейеш шәхси хужалыҡта бил бөгөүселәргә.

Иғтибар иткәнегеҙ барҙыр: ҡала кешеләре лә хәҙер үҙҙәренең ҡала ситендәге баҡсаларына әүҙем йөрөй, үҫтерә, хатта һатыуға ла сығара. Быны үҙ миҫалымдан сығып әйтәм: ҡаланан килгән күрше-күлән тауыҡ ите, һөт һәм бал алырға теләп, йыш мөрәжәғәт итә. Шуға күрә, ауыл ерендә донъя көткән милләттәштәрҙе, эштең бер ояты ла юҡ, үҙ йүнебеҙҙе үҙебеҙ йүнләп йәшәйек, тип әйҙәләйем. Хөкүмәттең эш урыны биреүен, ситтән килгән бер бай әҙәмдең фабрика асыуын көтөп ятмайыҡ.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔"Берҙәм Рәсәй" фирҡәһенең төбәк бүлексәһе секретары итеп йәнә Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы Рәйесе Константин Толкачев һайланды. Ҡарар партияның Башҡортостан төбәк бүлексәһенең отчет-һайлау конференцияһында ҡабул ителде.

✔Советтар Союзы Геройы, сығышы менән Башҡортостан кешеһе Ҡотдус Латиповты ҙур хөрмәт менән Мәскәүҙә Троекуров зыяратында ерләнеләр. Яҡташтары легендар летчик-штурмлаусы, авиация полковнигы ҡәберенә бәләкәй ватанынан килтерелгән бер ус тупраҡ һалды. Бөйөк Ватан һуғышы ветераны 23 декабрҙә 94-се йәшендә вафат булды.

✔Башҡортостан биш иң үҫешкән спорт төбәге исемлегенә инде. Белгестәр спорт инфраструктураһы объекттарын, республикала уҙғарылған чемпионаттар иҫәбен, халыҡтың спорт менән әүҙем шөғөлләнеүен баһалаған. Был рейтингты "Совет спорты" баҫмаһы әҙерләгән.

✔Израилдә "Урал батыр" китабы донъя күрҙе. Китапта боронғо башҡорт халыҡ эпосының иврит теленә сәсмә тәржемәһе нәшер ителгән. Баҫманы яҡташыбыҙ Рауил Садиҡов әҙерләгән, тәржемәнең дә, һүрәттәрҙең дә авторы ул үҙе. "Урал батыр" эпосын мин дүрт йыл дауамында башҡорт теленән тәржемә иттем. Китап Израилдең китап кибеттәрендә лә, интернет селтәре аша ла һатыла, - тип һөйләй Рауил Садиҡов. - Израилдә башҡорттарҙы белмәйҙәр тиерлек. Был китапты уҡып, улар халҡыбыҙ тураһында мәғлүмәтләрәк булырҙар, тип ышанам".

✔Башҡортостанда 2016-2020 йылдарға республиканың ауыл хужалығы комплексын үҫтереү стратегик планы раҫланды. Документ стратегик план параметрҙарына ярашлы муниципаль район хакимиәттәренә ауыл хужалығын үҫтереү программаларына төҙәтмәләр индерергә кәңәш итә.

✔Федераль дәүләт статистикаһы мәғлүмәттәре буйынса, Волга буйы федераль округының 14 төбәге араһында Башҡортостандың эш хаҡы буйынса бурысы иң әҙе. Республикала ваҡытында түләнмәгән эш хаҡы буйынса бурыс 1 декабргә 1,5 миллион һум тәшкил иткән. 1 ноябрь менән сағыштырмаса ул ике тапҡырға, йәғни 1,6 миллион һумға кәмегән.

**"Башинформ"дан.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БЕҘҘЕ НИҘӘР КӨТӘ?

**Яңы йыл тыуыу менән Рәсәй территорияһында тағы ла бер нисә закон үҙ көсөнә инәсәк. Ҡануниәтте белмәү граждандарҙы яуаплылыҡтан азат итмәүен иҫтә тотоп, улар менән гәзит уҡыусыларҙы ла таныштырырға булдыҡ.**

**Иң тәүге үҙгәреш бензинға, тәмәкегә һәм алкоголгә акциздар ставкаһының күтәрелеүенә бәйле буласаҡ.** 2017 - 2019 йылдарҙа шарап, шампан шарабы (ватан етештереүсеһенекенән тыш), һыра, сидр, бал балы, көслө алкоголь, теләһә ниндәй тәмәке (электрон сигареттар һәм йылытылған тәмәкене лә индереп), 5-се класлы бензин, дизель яғыулығы һәм уртаса дистилляттарға акциздар йәйләп күтәреләсәк. Хөкүмәт күҙаллауынса, киләһе йылдан бер ҡап тәмәке - 10, 2019 йылда иһә 27 процентҡа тиклем ҡиммәтләнергә тейеш.

### "Google-ға һалым"

Был хаҡта, моғайын, күптәр хәбәрҙарҙыр инде. Шулай ҙа, тағы бер тапҡыр хәтерегеҙгә төшөрөү хилаф булмаҫ. Яңы закон 2017 йылдан сит ил компанияларынан Рәсәйҙә мультимедия контенттарын: электрон китаптар, һүрәттәр, музыка, аудиоязмалар, уйындар һәм компьютер программалары һатыуҙан килгән килемгә НДС түләтеүҙе күҙаллай. Тап шуға күрә Google үҙенең сервистарының - "Google Диск" һәм Google Play хаҡын 18 процентҡа арттырырға ҡарар итҡән.

### Рәсәй "Эра-Глонасс"ҡа инә

1 ғинуарҙан был система Рәсәйҙәге барлыҡ яңы автомобилдәр өсөн дә мотлаҡ буласаҡ. Ул оператив хеҙмәттәргә юл-транспорт ваҡиғаһы тураһында автоматик рәүештә хәбәр бирәсәк. Эксперттар фекеренсә, был сара яңы автомобилдәрҙең хаҡын арттырыуға килтерәсәк. Яңы талап Рәсәй баҙарын популяр булмаған моделдәрҙән азат итәсәк, сөнки уларға ошо системаны индереү үҙен аҡламаясаҡ, тип белдерә был хаҡта киң мәғлүмәт саралары. Атап әйткәндә, BMW компанияһы Рәсәйгә кабриолеттар, шулай уҡ M3 һәм 5GT моделдәрен индереүҙе туктатасағы хаҡында хәбәр иткән. Бынан тыш, 1 ғинуарҙан, әгәр транспорт сараһының хәүефһеҙлек сараһы тураһындағы танытмаһында "Эра-Глонасс" системаһы булыуы тураһында мәғлүмәт булмаһа, граждандарға Рәсәй территорияһына сит ил машиналарын индереү тыйыла. Йәғни илдең Федераль таможня хеҙмәте ПТС бирмәйәсәк. Был ҡанун барлыҡ рәсәйҙәрҙең кесәһенә һуғасаҡ, шулай ҙа осһоҙ Япония автомобилдәренә күнеккән Алыҫ Көнсығыш халҡына ауырға тура киләсәк.

### ОСАГО ҡиммәтләнә

2016 йылда Рәсәй Финанстар министрлығы ОСАГО тураһындағы законға водителдең юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуын иҫәпкә алған 10-сы арттырыу коэффициенты индерҙе. Бөгөнгә шундай коэффициенттар бар:

йылына 5-тән алып 9-ға тиклем ҡағиҙә боҙоу - коэффициент 1,86

йылына 10-дан 14-кә тиклем - коэффициент 2,06

йылына 15-тән 19-ға тиклем - коэффициент 2,26

йылына 20-нән 24-кә тиклем - коэффициент 2,45

йылына 25-тән 29-ға тиклем - коэффициент 2,65

йылына 30-ҙан 34-кә тиклем - коэффициент 2,85

йылына 35-тән күберәк - коэффициент 3,04.

Шул уҡ ваҡытта, ОСАГО полисын интернет аша ла эшләтергә мөмкин, әммә бында ла яуаплылыҡ ҡәтғиләштерелә. Әгәр клиент дөрөҫ булмаған мәғлүмәт бирә һәм страховка хаҡы гәмәлдәгенән кәмерәк килеп сыға икән, страховка компанияһы зыян күреүсе файҙаһына бөтөн түләүҙәрҙе клиент елкәһенә һала ала.

**(Дауамы 5-се биттә).**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ИРЕК ЯЛАЛОВ - ЛИДЕРҘАР РӘТЕНДӘ!



**2016 йыл йомғаҡтары буйынса Ирек Ялалов Мэрҙарҙың милли рейтингында өсөнсө урынға лайыҡ булды. Беренсе урында Төмән мэры Александр Моор, икенсе урында Ҡаҙан ҡалаһы хакимиәте башлығы Илсур Метшин.**

Сити-менеджерҙың күрһәткестәрен яҡшыртыуға Затон күперен файҙаланыуға тапшырыу, торлаҡ төҙөлөшө темптарының артыуы, ресурстарҙы грамоталы бүлеү йоғонто яһаған. Өҫтәүенә, Өфөлә һынау үткән 20 муниципаль тәжрибә Рәсәйҙең башҡа төбәктәренә таратыу өсөн рәсми рәүештә тәҡдим ителгән. 2016 йылда Өфө Рәсәйҙең иң имен өс ҡалаһы араһына инә. Былар барыһы ла Ирек Ишмөхәмәт улы Ялаловтың имиджын күтәреүгә этәргес булған да инде.

# ТАҒЫ ЛА ЕР ТУРАҺЫНДА...



**Башҡортостан парламенты депутаттары күп балалы ғаиләләргә бушлай ер биреү мәсьәләләрен регламентлаусы закон проектын ҡабул итте.**

Был ҡанун әле ҡабул ителмәҫ элек уҡ тәнҡиткә дусар булғайны. Сөнки документҡа ярашлы, әгәр күп балалы ғаиләнең өй һалыу өсөн ере бар икән, ул бушлай бирелә торған ергә дәғүә итә алмай ине. Артабан документ эксперттарҙың тикшереүен үтеп, уға үҙгәрештәр, төҙәтеүҙәр индерелә. Йәғни улар күп балалы ғаиләләрҙең мохтаж булыу-булмау критерийҙарын билдәләй. Әгәр ғаиләнең шәхси йорт төҙөү өсөн 8 сутыйҙан кәм булмаған ер участкаһы бар икән, был уға бушлай ер биреүҙән баш тартыуға нигеҙ булып тора. Әммә был уларҙы сиратҡа ҡуйыуҙан баш тартыу тигәнде аңлатмай. Закон бары тик ере булмаған ғаиләләргә өҫтөнлөк бирелеүҙе генә күҙаллай.

Бирелгән ер участкаһы ғаиләне ҡәнәғәтләндермәй икән, ул унан өс тапҡыр баш тарта ала. Өсөнсө тапҡыр баш тартҡандан һуң, был ғаилә исемлектән төшөрөп ҡалдырыла. Әммә 2017 йылға тиклем сиратҡа тороусыларға мохтажлыҡ критерийын иҫәпкә алмайынса ла ер участкаһы алыу хоҡуғы һаҡлана.

Депутат Заһир Хәкимов, бөгөн ауылдарҙа һәр кемдең өйө ултырған участкаһы бар һәм улар хәҙер ер алыуға хоҡуҡһыҙ ҡала, тип белдерһә лә, парламент рәйесе Константин Толкачев матбуғат конференцияһында ҡанун нигеҙенә бары тик мохтажлыҡ һалынған, әгәр ауыл ерenән бер генә ялыу булһа ла, беҙ уны тикшереп, мотлаҡ ер бирҙертәсәкбеҙ, тине.

# ЕТЕМДӘР МЕНӘН ЭШ



**Баш ҡаланың социаль етемлекте профилактикалау һәм балалыҡ хоҡуҡтарын яҡлау буйынса эксперттары ошо темаға арналған Һәм "Ваҡыт, алға!" тип аталған Бөтә Рәсәй конференцияһында ҡатнашты.**

Улар "Бала өсөн нисек ғаиләне һаҡларға: ғаиләгә йүнәлтелгән ҡараш" темаһына оҫталыҡ дәресе үткәрҙе. Сөнки Башҡортостанда 2010 йылдан алып опека органдары эшенең өҫтөнлөклө йүнәлеше булып ғаилә именлеген һәм социаль етемлекте профилактикалау, баланың ауыр тормош хәлендә ҡалған үҙ ғаиләһен һаҡлап ҡалыу, уға ярҙам күрһәтеү тора. Ҡала мәктәптәрендә, балалар баҡсаларында, поликлиникаларҙа, социаль-психологик үҙәктәрҙә ғаилә менән эшләү һәм ғаиләләге именлек боҙолоу факттарын асыҡлау буйынса 400-ҙән ашыу уполномоченный бар.

Күрелгән саралар һөҙөмтәһендә етем балалар һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм булыусы балалар һаны 35 процентҡа кәмегән, 2013 йылдан интернат учреждениеларынан балаларын кире алған ғаиләләр һаны ике тапҡырға артҡан. Ғөмүмән, Өфө тәжрибәһе башҡа төбәктәрҙә лә ҙур иғтибарға лайыҡ.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# РУХЛЫ ИНЖЕНЕРҘАР БЕҘҘӘ УҠЫЙ



**Барыбыҙ ҙа беләбеҙ, хәҙер хеҙмәт баҙары инженер һөнәрләләргә ҡытлыҡ кисерә. Күмертау ҡалаһындағы Республика политехник лицей-интернаты 1997 йылда тап ошо ихтыяжды күҙҙә тотоп асыла ла инде.**

Әлеге көндә лицей-интернатта республикаһының төрлө төбәктәренән генә түгел, Рәсәйҙең башҡа ҡалаларынан, Ырымбур өлкәһенән йыйылған балалар физика-математика, физика-химия йүнәлештәре буйынса профилле белем ала. Быға тиклем 8-се синыфҡа уҡырға алһаҡ, һуңғы йылдарҙа балаларҙы 5-се синыфҡа ҡабул итә башланыҡ. Шулай тәрбиә йәһәтенән дә, уҡыу буйынса ла күпкә еңелерәк, балалар тиҙ генә беҙҙәге тәртипкә һәм талаптарға өйрәнеп китә.

Республика политехник лицей-интернатында "Мәктәп - техник вуз - предприятие" мәғариф кинлеген булырыу йәһәтенән бик етди эш алып барыла. Был политехник белем биреүҙең сифатын арттырырға, яҡшы белгестәр әҙерләргә булышлыҡ итә. Беҙ Өфө дәүләт авиация техник университетының Күмертау ҡалаһындағы филиалы һәм Күмертау авиация етештереү предприятиеһы менән тығыҙ бәйләнештә эшләйбеҙ.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге Иорданияға башҡорт балының тәүге партияһын оҙатты. Ағастан яһалған сувенир һауытҡа 500 килограмм бал һалынған. Бынан тыш, Башҡортостандан Иорданияға умартасылыҡ продукцияһы ла ебәрелде.

✓Башҡортостанда республика Сауҙа-сәнәғәт палатаһы базаһында Халыҡ-ара арбитраж коммерция судының бүлексәһе асыла. Күҙалланыуынса, баш ҡалағы бүлексәнең эшмәкәрлеге Волга буйы федераль округын үҙ эсенә ала. Был тышҡы сауҙа килешеүҙәре буйынса килеп тыуған бәхәстәрҙе Мәскәүҙә түгел, Өфөлә хәл итергә мөмкинлек бирә. Халыҡ-ара арбитраж коммерция суды - Рәсәйҙә һәм Көнсығыш Европа илдәрендә халыҡ-ара коммерция бәхәстәрен хәл итеү буйынса төп третей суды, донъялағы дүрт арбитраж үҙәктең береһе.

✓Рәсәй Хөкүмәте 11 инновация кластерын һайлап алды. Улар иҫәбендә Башҡортостандың нефть һәм химия кластеры ла бар. Ул республикалағы 160 предприятиены үҙ эсенә ала. 2017 йылда уға ярҙам итеүгә федераль бюджеттан яҡынса 140 миллион, 2018 йылда иһә 500 миллион һум аҡса йүнәлтеү күҙаллана. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов хәбәр итте, республика Дәүләт Йыйылышына йыллыҡ Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһап.

✓Башҡортостан илдең Рәсәй һәм сит ил туристары араһында популяр булған тәүге 20 төбәге иҫәбенә инде. Илдең 21 төбәге 60-тан ашыу балл йыйҙы. Башҡортостан исемлектә 12-се урында килә (64,4 балл). Иң юғары күрһәткестәр Мәскәү (80), Санкт-Петербург ҡалаларында (79,7) һәм Краснодар крайында (77,3).

✓Рәсәйҙең Сауҙа-сәнәғәт палатаһында "Һатып алыуҙарҙың асыҡлығы буйынса милли рейтинг-2016" проектына йомғаҡ яһау тантанаһы булды. Башҡортостан "Гарантиялы асыҡлыҡ" категорияһында лидер төбәк статусын йәнә раҫланы. Ҡатнашыусыларҙы баһалау өсөн процедураларҙың мәғлүмәти асыҡлығы кимәле, баҙарҙа конкуренцияның ҙур булыуы, уларҙың иҡтисади һөҙөмтәлелеге иҫәпкә алынған.

✓Быйыл ғинуар-сентябрь айҙарында Башҡортостан халҡына 125,4 миллиард һумлыҡ кредит бирелгән. 1 октябргә ҡарата халыҡҡа кредиттар буйынса бурыстың ҡалған өлөшө, былтырғы осор менән сағыштырғанда 0,9 процентҡа артып, 276,2 миллиард һум тәшкил иткән. Ваҡытында түләнмәгән бурыс - 27 миллиард һум.

ФЕНОЛОГ ФАРАЗЛАЙ

# БЫЙЫЛҒЫ ЙЫЛ...

## былтырғыны ҡабатлай, ахыры

**Һуңғы йылдарҙа тәбиғәт шарттарының ҡапыл үҙгәреп тороуына өйрәнеп бөттөк тиергә лә була. Элегерәк "Ҡыш арбаңды, йәй санаңды әҙерлә" тиһәләр, хәҙер иһә сана менән арбаның ҡайһы ваҡытта кәрәк булырын да алдан әйтеп булмай. Ҡыш уртаһында ямғыр ҡойоуына ла, йәйге селләлә боҙ яуып үтеүенә лә күнектек. Тәбиғәт менән бер тулҡында йәшәргә кәрәк икәнен белһәк тә, әллә үҙебеҙ шул тулҡынға көйләнә алмайбыҙ, әллә бар ҡанундарын боҙоп, үҙебеҙгә буйһондорорға маташҡан өсөн үпкәләгән тәбиғәт ирек бирмәй, аңламаҫһың.**



Ата-бабаларыбыҙ элек-электән тәбиғәт менән килешеп йәшәгән, ундағы күренештәр буйынса күҙәтеүҙәр алып барған, һынамыштар йыйып, быуындан-быуынға тапшырған. Нәҡ ошо күҙәтеүҙәр буйынса йәшәйеш шарттарын көйләгәндәр, көтөлмәгән хәлдәргә әҙер торғандар. Ә бөгөн ошондай фараздар, һынамыштар тура киләме, тәбиғәт күренештәренә иғтибар итеүҙең файҙаһы бармы? Ошо хаҡта элек-электән үҙе өсөн фенолог күҙәтеүҙәре алып барған **Әхмәт** ағай **ФАЗЛЕТДИНОВ** менән әңгәмәләштек.

- Элек күҙәтеүҙәр алып барыу, ниндәйҙер фараздар эшләү баҫыу, баҡса эштәренә тотоноп китеү, эште нисегерәк башларға кәрәклеген самалау өсөн дә кәрәк ине. Тәбиғәт ҡанундарына кешенең аяуһыҙ ҡыҫылыуы, заман техникаһының күбәйеүе был алымдарҙың боҙолоуына килтерҙе. Шуға күрә хәҙерге күҙәтеүҙәр ҙә әллә ни тура килмәй.

Минең фаразлауымса, йыл ауыр булмаҫы. Япраҡ ҡойолоп бөтмәйенсә ҡар яуыуы бер йылға алдан фаразлау мөмкинлеге бирә. Ҡарағастың энәләре лә һаманғаса шул көйө ултыра, ә ул ҡайһын япрағы менән бер ваҡытта ҡойолоп бөтөргә тейеш. Ҡарҙың ваҡытынан алда яуыуы насар билдә. Элек бит ағастар тулыһынса яланғасланғас, ер ныҡлап туңғас, үҙ ваҡытын белеп кенә ҡар яуа торғайны. Ноябрь май айына тура килә, ошо айҙан сығып, йәйҙең нисек килеүен самалай торғайныҡ. Ноябрҙең сатлама һыуыҡтары, килделе-киттеле һауа шарттары, урыны менән ямғыр йә ҡар яуыуы майҙа үҙен иҫләтәсәк әле, был ваҡытта ҡырау ҙа күп булыр. Иҫкесә декабрь башы, 14 декабргә, ныҡ һыуыҡ көнгә тура килде. Бынан сығып, май аҙағы, июнь башы, йәғни картуф ултыртҡан осор ҙа йылы булыр тип самалайым, тик был аҙаҡтан һаҡ булырға кәрәк. Көҙөн милөштең емеше бик аҙ булды, урыны менән бөтөнләй булманы ла, бынан сығып, ҡыш йылы булыр тип фаразларға мөмкин. Тәбиғәт бит барыһын да белеп эшләй. Ғәҙәттә, һыуыҡ ҡышта йәнлектәргә, ҡоштарға аҙыҡ табыуы ауыр булмаһын өсөн емеш тә күп кенә була. Йыл ауыр килгәс, һарыҡтар ҙа бәрәс гено бәрәс килтерә.

Ә бына ужым культуралары өсөн был йыл файҙалы булыр, ҡар ҙа сағыштырмаса күп яуҙы, ер үтә ныҡ туңманы. Шулай ҙа, хәҙер ҡар әҙерәк яуа, элегерәк был ваҡытта уның ҡалынлығы 30-40 сантиметрға етә торғайны. 2016 йыл наҡыҫ килде, картуф ҡайһы ерҙә уңды, ҡайҙа - юҡ, емеш-еләк тә әллә ни ҡыуандырманы, быны сәбәбен яҙҙың ҡоро килеүендә, ваҡытында ямғыр яумауында күрәм.

Үҙемдең күҙәтеүҙәремдән сығып, быйылғы йыл былтырғыны ҡабатлай, тип әйтә алам. Хәҙер иҫкесә ғинуар башы, 14 ғинуарҙы көтөргә кәрәк. Уның нисек килеүенә ҡарап, йәйҙе билдәләргә булыр. Һыуыҡ, ҡарлы булһа, йәй ҙә яҡшы килер.

Эльза **МӨХӘМӘҘИЕВА** яҙып алды.

Быйыл лицей-интернат һәм Өфө дәүләт авиация техник университетының Күмертау ҡалаһындағы филиалы уҡытыусылары менән берлектә әҙерләнгән инновацион проектыбыҙ грант отто. Проекты тормошҡа ашырыу өсөн федераль һәм республика бюджетынан бүленгән миллиондан ашыу аҡсаға компьютер, лаборатория техникаһы, интерактив таҡталар, проекторҙар, 3D-принтер, 3D-ручкалар һәм башҡа заманса техника һатып алынды. Юғары уҡыу йорто уҡытыусылары балаларға ҡыҙыҡлы лекциялар уҡыны, мауыҡтырғыс практик һәм лаборатор эштәр үткәрҙе, ҡалалағы төрлө предприятиеларға экскурсияларҙа йөрөттө. Был эш уҡыусыларға инженер һөнәренең нескәлектәренә төшөнөргә, күңеленә яткан йүнәлеште һайларға ярҙам итә.

Һуңғы йылдарҙа күп сығарылыш уҡыусыларының республика вуздарына түгел, ситкә уҡырға китеүе һәм шул сәбәптән белгестәргә ҡытлыҡ кисерелеүе билдәле. Шуға ла беҙ үҙебеҙҙең уҡыусыларға Башҡортостанда белем алыу, үҙебеҙҙең заводтарҙа эшләү, тыуған төбәк мәнфәғәтенә хеҙмәт итеү тураһында туҡтауһыҙ аңлатабыҙ. Лицей-интернат уҡытыусыларының эш һөҙөмтәһе сығарылыш уҡыусыларының күбеһенең юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеүе менән генә баһаланмай. Бала төрлө яҡлап һәләттәрен аса алһын өсөн бөтөн мөмкинлектәр булдырылған, төрлө түңәрәктәр эшләй. Алексей Лукин етәкселегендәге "Батыр" хәрби-патриотик түңәрәгендә шөғөлләнеүсе уҡыусылар башҡортса ла, русса ла йырҙар башҡарып, төрлө конкурстарҙа енеп тора. Рухлы, илһөйәр һәм үҙ эшенең белгесе булған һиҙел кадрҙар тәрбиәләнә беҙҙә. Ә инде проекттарыбыҙ өсөн федераль кимәлдәге грант алыу ошо юҫыҡта тағы ла күберәк эш башҡарырға этәргес кенә булды.

Римма **ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА**,
Республика политехник лицей-интернаты директоры.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БЕҘҘЕ НИҘӘР КӨТӘ?

(Башы 4-се биттә).

### Сит ил паспорты

Яңы өлгөләге (биометриялы һәм 10 йыл мөҙҙәтле) сит ил паспортын эшләтеү ололар өсөн 1500 һумға (хәҙер 5 мең һум), балаларға 500 һумға (яңы пошлина 2000 һум) арта. Иҫке өлгөлө паспорттарҙың хаҡы шул килеш ҡала: ололарға - 2, балаларға 1 мең һум.

### Дәүләт хеҙмәттәренә ташлама

Ниндәйҙер хеҙмәт өсөн ғаризаны Дәүләт хеҙмәттәренең берҙәм порталы аша электрон вариантта биреүселәргә дәүләт пошлинаһы күләме кәмей. Бигерәк тә популяр хеҙмәттәр өсөн хатта 30 процент ташлама була.

### Рәсәйҙәрҙе микрозаймдарҙан ҡотҡарасаҡтар

1 ғинуарҙан бер йылға тиклем алынған микрозаймдар буйынса процент түләү суммаһына һәм башҡа мотлаҡ түләүҙәргә сикләү ҡуйыла. Өҫтәлгән процент кредит суммаһын өс тапҡырҙан да артып китә алмай. Бынан тыш, микрофинанс ойошмаларына штрафтарҙы һәм пеняларҙы түләнмәгән өлөшкә генә ҡулланыу рөхсәт ителә. Әгәр займ алыусы кредит түләүен озаҡҡа һуҙа икән, процентар буйынса сикләүҙәр түләнмәгән өлөштән ике тапҡырға артырға тейеш түгел.

### Пенсия йәше арта

Ҡайһы бер граждандарҙың пенсия йәше арта. Был, тәү сиратта, дәүләт хеҙмәткәрҙәренә ҡағыла. 1 ғинуарҙан пенсия йәше даими рәүештә йылына ярты йылға артып барасаҡ. Был дәүләт хеҙмәтендә эшләүсе ҡатын-ҡыҙҙарға - 63, ир-аттарға 65 йәшкә тиклем эшләү мөмкинлеген бирә.

### Коллекторҙарға ла ҡанун бар!

Яңы йылдан уларҙың ғәмәлдәре сикләнә, сөнки власть үҙе бурысы граждандарҙы яҡлау юлына баҫа. Әммә был бурысыңды түләмәҫкә лә ярай, тигәнде аңлатмай. Бигерәк тә коммуналь хеҙмәттәр буйынса бурыстарың йыйылғанда властар ҙа ярҙам итә алмаясаҡ. Ләкин коллекторҙарға ла башбаштаҡланырға рөхсәт булмаясаҡ. Хәҙер бурысты ҡайтартыу менән социаль реестрға индерелгән махсус агентлыҡтар ғына шөғөлләнәсәк. Бынан тыш, хөкөм ителеүселәр, Рәсәйҙән ситтә йәшәүселәр ҙә бурыслы граждандар менән һөйләшергә тейеш түгел. Шулай уҡ башҡалар ҙа ҡурҡыта, алдаша йәки физик һәм психологик баҫым яһай алмай. Документ бурыслы граждан менән һөйләшеү ваҡытын да сикләй: эш көндәрендә ул иртәнге 8-ҙән киске 10-ға тиклем булһа, ял көндәрендә иртәнге 9-ҙан киске 8-гә тиклем. Шәхси осрашыуҙар иһә аҙнаһына бер тапҡырҙан артырға тейеш түгел.

### Банкротлыҡ

Үҙенде банкрот тип иғлан итеү тураһында ғариза яҙғанда элекке кеүек 6 мең түгел, 300 һум дәүләт пошлинаһы түләү ҙә етә. Әммә был үҙгәреш бары тик граждандарға ғына ҡағыла, ә юридик шәхестәр өсөн сумма үҙгәрешһеҙ ҡала.

### Милек теркәү ябайлаштырыла

Күсемһеҙ милектең Берҙәм дәүләт реестрын ойоштороу бер үк ваҡытта кадастр иҫәбенә тороу һәм хоҡуҡ теркәтеү өсөн ғариза яҙыу мөмкинлеген бирә. Был документтарҙы объект ҡайҙа урынлашыуына ҡарамаҫтан, теләһә ҡайһы офиста тапшырырға була. Әгәр һуңынан документтарығыҙҙы алырға ваҡыт тапмайһығыҙ икән, уны һеҙгә курьер килтерәсәк.

Зәйтүнә **ӘЙЛЕ** әҙерләне.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Клевер

❖ Тоҙ ултырғанда, быуын ревматизмынан клевер ярҙам итә. Ярты литрлы шешәгә клевер сәскәләрен тултырырға, араҡы йәки һыу өҫтәргә һәм 10 тәүлек төнәтергә. Көнөнә 2-3 тапҡыр ауыртҡан урындарға компресс эшләргә.

### Һөйәк һынһа...

❖ Көнөнә 1-2 тапҡыр аҡ шыршы майы һөртергә.

### Шәкәр диабеты

❖ Ҡандағы шәкәр кимәлен нормаға килтереү өсөн иртән 1 йомортҡаны стаканға һытырға, ярты лимон һуты өҫтәргә, болғатырға һәм иртәнге аштан ярты сәғәт алда эсергә. Шәкәр кимәле нормаға килгәнсе ҡабатларға. Ҡайһы бер диабет менән ауырыусыларға дауаланыу өсөн 1-2 көн дә етә. Ҡайһы саҡта аҙна буйы дауам итергә тура килә.

### Ҡан тамырҙары өсөн

❖ Ҡабығы менән 1 лимонды, 1 баш һарымһаҡты ваҡлап турарға, 1 ҡалаҡ бал, 1 литр йылы һыу өҫтәп, банканың ауыҙын салфетка менән ҡапларға. 3 көн төнәткәс, һөҙөргә.Көнөнә 3 тапҡыр, ашағандан һуң 1-2-шәр ҡалаҡ эсергә. Бер нисә ай дауамында ҡабул итһәң, ҡан тамырҙары таҙара, ҡан баҫымы нормаға килә, хәтер яҡшыра.

### Иммунитетты нығытыу

❖ **Бал менән һуған.** 250 грамм ваҡ ҡына итеп туралған һуғанға 200 грамм шәкәр, ярты литр һыу өҫтәп, 2 сәғәт талғын утта ҡайнатырға. Һыуынған массаға 1 ҡалаҡ бал һалырға. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр балғалаҡ ашарға.

❖ **Эхинацея.** 1 ҡалаҡ үләнгә 250 мл ҡайнар һыу ҡойорға, төнгөлөккә төнәтергә ҡалдырырға. Иртән һөҙөргә һәм ашарҙан ярты сәғәт алда эсергә. Дауаланыу курсы - 10 көн.

❖ **Һырғанаҡ.** 200 грамм һырғанаҡҡа 2 ҡалаҡ шәкәр ҡушып, һыуытҡыста һаҡларға. Балалар өсөн файҙалы. Көнөнә 2 тапҡыр, 1-әр балғалаҡ бирергә.

Айбикә **ЯҠУПОВА**.

✓ Ҡышҡы мәжлес шул үҙенең бер мәлендә генә була ине. Эсеп-иҫереп, бола сығарып йөрөгән кеше юҡ. Һәр береһе үлә яҙып намыҫ һаҡлай, ҡунаҡты, йәшенә ҡарамаҫтан, шул ҡәҙәр ҡәҙерләйҙәр һәм ололайҙар.



## ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# БАШҠОРТ КЕЙЕМЕ

**Төрлө ғилми хеҙмәттәрҙә башҡорт костюмы халыҡтың үҫеше, уның төрлө тарихи дәүерҙәрҙә башҡа халыҡтар менән мәҙәни һәм сауҙа бәйләнешен өйрәнеү объекты булараҡ сығыш яһаһа ла, милли кейемдең үҙе, уның төҙөлөшө тураһында телгә аҙ алына. Әммә тап ошонда ҡиммәтле мәғлүмәт һаҡлана ла инде.**

Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ әле, "Ҡара юрға" эпосында Мәсем хандың ҡыҙы Маҡтымһылыу, Әбләйҙең кейеменә ҡарап, уның ҡайһы тарафтан килеүен әйтеп бирә. "Сабыуың түңәрәтеп яһалған, дала кешеһенә оҡшағанһың", - ти ул Ағиҙел үрендә урынлашҡан атаһының йәйләүенә Һаҡмар йылғаһының көньяҡ ярҙарынан килгән егеткә. Тимәк, башҡорт кейеме матур, уңайлы булыуынан тыш, берәй төрлө мәғлүмәт тә еткерә алған.

Күпме йылдар үтмәһен, башҡорт костюмының бөгөнгө көнгә тиклем һаҡланып ҡалған өлгөләре һаман да үҙенең матурлығы менән күҙҙе ҡамаштыра. Унда бөтөн нәмә гармонияла, уның бөтөн өлөштәре берҙәм бөтөнлөктө тәшкил итә.

Философик күҙлектән ҡарағанда, кейемдә тормош гармонияһы булып ике - ҡатын-ҡыҙ һәм ир-егет башланғысының үҙ-ара ярашыуы тора. Тотороҡлолоҡ, үҙ һүҙендә тора белеү, аналитик фекерләү, һалҡын иҫәп, йәғни, ир-егет башланғысы кейемдең нигеҙендә - төҙөлөшөндә күренә. Хис-тойғоларға бай булыу, башҡаларҙың хәленә инә белеү, йәлләү менән айырылып торған ҡатын-ҡыҙ башланғысы кейемдең төҫөндә, биҙәктәрендә, биҙәнеү әйберҙәрендә сағыла.

Бөгөнгө көндә Башҡортостан музейҙарында һаҡланған, XIX быуат аҙағы-XX быуат уртаһында тегелгән милли кейемдәрҙе тикшергәндән һуң, ҡатын-ҡыҙ күлдәктәрен бер нисә төргә бүлеп була. Уның иң боронғолары башлыса өйҙә, ҡул көсө менән һуғылған киңлеге 30 см-ҙан ҙурыраҡ булған туҡымаларҙан тегелгән. Күлдәктең итәге менән өҫкө өлөшө тоташтырып тегелгән урында магазин туҡымаһынан киң генә әүеркә һалынған. Бындай кейемдәр туҡыма һуғыу киң таралған төньяҡ-көнбайыш һәм төньяҡ-көнсығыш райондарҙа тегелгән. Өҫкө яғы өс - арҡа һәм ике алғы өлөштән, итәге бер нисә ҡыйыҡтан торған күлдәкте төньяҡ һәм көнсығыш райондары кейгән. Биле аҫҡа төшөп торған күлдәктәр Урал арьяғы башҡорттары өсөн хас булған. Төньяҡ-көнсығыш райондарҙың күлдәктәре ең формаһы менән айырыла, ул ҡабарып тора. Шулай уҡ еңде төрлөсә ултырталар. Яға башлыса ике төрҙә: ултырма яғалы күлдәк һәм яғаһы төшөрөп ҡуйылған күлдәктәр булған. Төймәләр йә алдан, йә арттан, йә яурынға ҡуйылған.

Башҡорт алъяпҡыстары ла төрлөлөгө менән айырылып тора. Әйткәндәй, башҡорт кейеме составында алъяпҡыстар бөтөн ерҙә лә осрамай, мәҫәлән, көньяҡ-көнсығыш башҡорттарында ул юҡ. Был төбәк халҡының XX быуаттың 20-се йылдарына тиклем төп шөғөлө малсылыҡ булған. Тимәк, улар даими рәүештә күсмә тормош менән йәшәгән. Ә алъяпҡысты йорт эштәре менән булышҡанда таҡҡандар.

Камзулдарға килгәндә, был еңһеҙ кейемдең алғы өлөшө тура төшә, ә артҡы өлөшө арҡаға һылашып ҡына төшә лә, бил тирәһендә киңәйә, бының өсөн махсус рәүештә ҡабырға йөйөн арҡаға сығарыбыраҡ тегәләр. Иң ҡыҙығы, ошондай бесеү принцибы тарихи кейем өлгөләрендә, атап әйткәндә, XVII-XVIII быуаттарҙа Францияла осраған жустокорптарҙа осрай. Француз кафтаны камзул өсөн өлгө була аламы, юҡмы, был мәсьәлә асыҡ ҡала, әммә 1812 йылдағы һуғышта Парижғаса еткән ата-бабаларыбыҙ уларҙы трофей итеп алып ҡайтмағандыр, тимә.

**Айгөл КАМАЛИЕВА.**
**"Башҡорт костюмы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

## МАТУР ХӘТИРӘ

# ҠЫШҠЫ МӘЖЛЕСТӘР ҘӘ...

## тарихҡа күсте



**Интернеттың "Бәйләнештә" сайтындағы "Башҡорт ҡатын-ҡыҙы" төркөмөндә ат санаһында китеп барыусылар һүрәте ҡуйылған ине. Шул һүрәткә бәйле, элекке ҡышҡы ҡунаҡ булышыуҙар хаҡында һүҙ сығыуы булды, халыҡ "түгелеп" китте. Күптәрҙең хәтерендә һаҡлана икән әле атай-әсәйҙәрҙең ҡышҡы мәжлестәрҙә йөрөүе, ҡунаҡ булышыуҙар тәртибе, аш-һыу әҙерләү йолалары.**

Ысынлап та, оло бер ваҡиға була торғайны ла ул ололарҙың ҡышҡы мәжлестәре. Йәйен, яҙын, хатта мул ғына булһа ла көҙөн дә улайтып ҡунаҡ булышмаған икән халыҡ. Тимәк, ҡош-ҡорт, һуғым һуйылыуы көтөлгән. Малдың кәртәгә инеп, мәшәҡәттәр баҫыла төшөүе лә, сана юлы ятыуы ла мөһим булғандыр, күрәһең.

Ҡунаҡ булыша башларҙан бер аҙналай алда өйҙә төрлө мәшәҡәттәр башлана ине. Әсәй эштән ҡайта ла, кис, беҙ йоҡлап киткәнгә тиклем, өй эштәре менән була. Берәй туған тейешле ҡатын-ҡыҙҙы саҡырып килтереп, өй стенаһын аҡлайҙар йәки ҡырып йыуалар, ҡорғандарҙы, түшәк-юрғандарҙы, иҙән әрмәктәрен шулай уҡ йыуып йәки алыштырып сығалар. Яҫтыҡ-юрған, түшәк тыштары тегелә. Метр-метр тауарҙарҙы иҙәнгә һуҙып ебәреп, аҡбур менән һыҙып, үҙҙәренә күлдәккә тиклем тегеп алалар. Шул арала беҙгә лә өлөш сыға. Өйҙә ниндәйҙер яңы һауыт-һабалар, ҡайһы саҡ хатта мебель дә барлыҡҡа килә. Ялан яғында (Баймаҡ районын шулай тиҙәр бөрйәндәр) йәшәгән атайымдың апаһы өлгөләп, ҡорамалап, һырлап түшәк тыштары тегеүгә оҫта була торғайны, шуға алдан уҡ заказ ебәреләләр, күрәһең, унан шул аллы-гөллө тегенделәр килеп етә. Уларҙы бер зат ҡатын-ҡыҙҙар бүлешеп ала.

Мунса ла ситтә ҡалмай. Уны ла ҡырып йыуып, мейестәрен һылап-аҡлап, йәш сайыр еҫе сығып торһон өсөн эләүкәләрен яңыртып уҡ ҡуялар.

Унан башлана бешеренеүҙәр. Ул саҡта салат аҙыҡтары булманы. Ҡамыр ризыҡтары ла, ит-картуф аштары. Бишбармаҡ ҡырҡыуҙа бөтә ғаилә менән ҡатнашабыҙ. Әсәй йәйә, беҙ, ир балаларға тиклем, шаҡмаҡлап ҡырҡып ултырабыҙ. Билмән бөрөү ҙә шундай уҡ ғаилә эше. Атай йәки оло ағайҙар ит үткәрә, вағыраҡтарға нисәлер билмән бөрөү нормаһы һалына. Урындыҡ аҫты ҡағыҙ йәшниктәргә тултырылған әсе икмәк, мейес, шкаф баштары - йыуаса, бауырһаҡ, май икмәге, ҡош теле кеүек тәмлекәстәр менән тула. Был аш-һыуҙы ла барыһы ла оҫта итеп бешерә алмай, күрәһең. Ауылда ошо өлкәлә данланған апайҙар бар ине. Шуларҙы саҡырып алалар һәм уның күрһәтеп-бойороп тороуы аҫтында бергәләшеп башҡарып ҡуялар. Быларҙан тыш, келәттә йәшникләп алынған кәнфит-печенье, хәлүә, биҙрә консерваларҙағы повидло, һары фил төшөрөлгән һинд сәйе була.

Әсәй баҡса ултыртыуҙа шәп була торғайны һәм ҡышҡылыҡҡа күп итеп ағас мискәләрҙә ҡыяр менән кәбеҫтә тоҙлап ҡуя ине. Урман яғында халыҡ баҡсасылыҡҡа барымлы булманы, хәҙер генә оҫтарҙылар. Ул заманда ҡатындар биҙрәләп нимәләрҙер тотоп килеп йәки балаларға бәйләнгән ойоҡ-бейәләйҙәр, күкрәксәләр алып килеп, шуларҙы тоҙло ҡыяр менән кәбеҫтәгә алмаштырып алыр ине.

Феләкләп бал әсетеүҙәрен дә йәшереп булмай. Балды һитәгә, ҡурлыға, ҡомалаҡтыҡына бүләләр. Йәнәһе, кемдер һитәне, кемдер ҡомалаҡты ғына эсә. Һитә балын шимдәргә тип аҫҡандарында өйгә бал (ҡорт балы) еҫе таралып китә. Өләсәйҙең әсегән балды ағас ҡалаҡ менән эсеп ҡарауын "шимдәү" ти торғайнылар. Балдың бер төрөн сөгөлдөр һалып ҡыҙартып та яһанылар. Әсәйем үҙе эсмәгәс, атайыма был эште тапшырыу ярамағас, өләсәй ҡулында булғандыр, күрәһең, шимдәү.

Ҡунаҡтарҙы ҡаршы алыу балаларға ҡушыла. Урамда ҡунаҡтарҙы һағалап йөрөп, өшөп бөтәһең. Ауыл ҡапҡаһы төбөндә көтөп алып, саналарына йәбешеп шыуып йәки ултырып киләһең. Бик булмаһа, шаянырактары сананды таҡтырып ала. Атай-әсәйҙәр, өләсәй-олатайҙар тышҡа уҡ сығып көтөп тора. Ҡунаҡтар үҙҙәре менән аттарын ҡарап-тәрбиәләп тороу өсөн махсус бер кеше алып килә икәне лә хәтерҙә ҡалған. Бик булмаһа, был эш өсөн ҡунаҡты саҡырыусы яҡ бер йәш кешене тәғәйенләп ҡуя. Ул аттарҙы туғарып, һыуытып, һыулатып, бесән һалып, аҙбарға индерә. Ҡунаҡтарҙың хатта эттәре лә ҡәҙерләнә. Эйәреп килгән эттәре булһа, талашмаһындар, тип, үҙҙәренең ғүмерҙә лә бәй күрмәгән этен сынйырға ултыртып ҡуялар. Ҡалайтаһың, ҡунаҡтың эте лә ҡунаҡ.

Балалар бер ваҡытта ла ололар менән бер өҫтәл артына ултыртылмай. Килгән яҡтан балалар булһа, уларға иптәшкә, тип, урындыҡта ултырып ашайһың да, алдан әҙерләнгән өйгә күсеп китәһең. Унда һеҙҙе берәй оло кеше ҡарап тора. Өйҙә йәш бала булһа йәки ҡунаҡтарҙың да шундай шатлығы бар икән, балаға көсөң еткән ҡыҙ бала икәнһең, алдағы өс-дүрт көнгә һин шуларҙы бағыусы ла. Бөгөнгө памперс, шешә, имеҙлек тигән нәмә юҡ. Урындыҡ өҫтөндәге сәңгелдәк тә, мейескә элеп киптерелгән йүргәк, илаһа - һурпа, майлы эсәк һәм һөтлө сәй. Был өйҙә ҡунаҡ булһалар, әсәһе сығып имеҙеп бирә, икенсе өйҙә икәндәр - ҡыланмаған ҡылығың, йырламаған йырың ҡалмай.

Ғәҙәттә, әсәй аш-һыуҙы, атай ҡунаҡтарҙы, өләсәй бөтөн мәжлес һәм мәжлестән тыш донъяны ҡарай. Иртәле-кисле ут яғып, өйҙәрҙе йылыта, ҡабат-ҡабат ит һала, балаларҙы ашатып килә, мал-тыуарҙы тәрбиәләп инә һ.б. Ҡунаҡтар арымай-талмай шаярып-көлөп, йырлашып, унан ҡалһа түбәләрҙе зыңлатҡансы баҫып бейешеп ала. Алмаш-тилмәш гармунда, ҡурайҙа уйнайҙар, араларындағы моңлоларҙы махсус йырлаталар, бейеүселәрен маҡтап-маҡтап бейетәләр. Өләсәй һамаҡлап бәйет әйтә, уны ҙурлайҙар. Унан китә арнауҙар, йырлап һыйлауҙар, һоғондорошоуҙар. Шулайтып, төн ауҙарғансы ултырышып, бер аҙ серем итеп алалар ҙа, ҡабат-ҡабат аш яңыртып ултырып ашап, кискә икенсе йортҡа юллаualар.

Һеҙҙә ҡунаҡ булған мәлдә ауылдағы күптәрҙә ҡунаҡ. Һырғалаҡта ят балалар, мәкелә ят аттар күбәйә. Сит ауыл, сит район балалары менән аулаҡта аралашҡанда ят уйҙырмалар, әкиәттәр, тарихтар ишетеп ҡалаһың. Атай-әсәйҙәр ҡунаҡ булышҡанда беҙ ҙә шул шауҡымда булып, төнө буйы һөйләшеп йәки өй туҙҙырып уйнап ҡалабыҙ.

Аҙна тирәһенә һуҙылған мәжлестәр ахырына етеп, ҡунаҡтар бүләкләнеп оҙатылғас, бер нисә көндән тағы ла бешеренеп-төшөрөнөп, биҙәлгән сбруйҙар, буялған кашауайҙар егелеп, көрәйтелгән аттарҙың ял-ҡойроҡтары ипләнеп, толоп-юрғандарға уранып ултырып, өйҙәге ололар тегеләргә ҡунаҡҡа китә. Ҡалғандар өләсәй йәки башҡа оло кеше ҡулында донъя көтөп ҡала.

Ҡышҡы мәжлес шул үҙенең бер мәлендә генә була ине. Эсеп-иҫереп, бола сығарып йөрөгән кеше юҡ. Һәр береһе үлә яҙып намыҫ һаҡлай, ҡунаҡты, йәшенә ҡарамаҫтан, шул ҡәҙәр ҡәҙерләйҙәр һәм ололайҙар, тел менән дә, ҡылыҡ менән дә рәнйетеп ҡуйыу ояттың ояты. Шулай ҡунаҡ була ине ололар беҙ бәләкәй саҡта.

Бөгөн ундай ҡунаҡ булышыуҙар икенсерәк юҫыҡҡа ҡоролған. Аш-һыу ҙа, аралашыуҙың сәбәптәре лә, маҡсаты ла башҡа. Хатта күп мәжлестәрҙе кафела үткәреп ҡуялар. Шунса сәғәттән шунсағаса, тип, билдәләп. Заман заңына эйәреп, кешеләр күңеле лә тарая, һайыға барғандай. Бала сағымда күргән мәжлестә бер тапҡыр ҙа үҙем йөрөй алманым, беҙ үҫеүгә бөттө улар. Ә ҡыҙыҡ булыр ине, ҡыңғыраулы кашауайҙарҙа ҡар борһоратып, пар аттарҙы ярһытып барып төшөү берәй ергә...

**Әлиә СӘЙҒӘФӘРОВА.**
**Бөрйән районы.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ТАРИХЫБЫҘҘЫ ӨЙРӘНӘЙЕК!

**Һәр бер үткән көнөбөҙ - ул тарих. Шуға күрә лә үткәндәребеҙҙе белмәй тороп, киләсәккә атлауы ҡыйын. Юҡҡамы ни, үткәне булмаған халыҡтың киләсәге лә юҡ, тиҙәр.**

Донъяла йәки илдә барған ижтимағи-сәйәси ваҡиғаларҙың һәр береһенең тарихи нигеҙе бар. Тарих ошо ваҡиғаларҙы аңларға һәм күҙалларға ярҙам итә лә инде. Ни өсөн тигәндә, кешенең Аллаһы Тәғәлә тарафынан булдырылған асылы үҙгәрмәй, тик техника һәм ғилем алға бара. Кешенең асылы үҙгәрмәгәс, тарихи процестар ҙа меңәр йылдар дауамында ҡабатланып тора. Шуға күрә лә, тарих спираль рәүешендә үҫә, тиҙәр. Йәғни, ваҡиғалар бер-береһенә оҡшаш сценарий буйынса әленән-әле ҡабатланып тора.



Мәҫәлән, бер генә миҫал. Батша власы ҡолатылғас, 1917 йылдың ноябрендә Башҡортостан автономияһы иғлан ителә. 1919 йылдың февралендә Ленин менән Сталин "башҡорттарға тулы милли азатлыҡ гарантиялары" вәғәҙәләй. 1919 йылдың 20 мартында Үҙәк совет власы менән Башҡортостан хөкүмәте араһында килешеү төҙөлә. Ләкин совет власы нығынып алғас, Ленин менән Сталин был фекерҙән баш тарта. 1920 йылдың майында ВЦИК-тың декреты менән Башҡортостандың автономия хоҡуҡтары сикләнә.

Шундай уҡ ваҡиғалар беҙҙең осорҙа ла ҡабатланды. СССР-ҙа үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, Башҡортостан дәүләт суверенитеты тураһында иғлан итте. Рәсәй Президенты Б.Н. Ельцин Башҡортостанға килеп, "суверенитетты күпме йота алаһығыҙ, шунса йотоғоҙ", тип вәғәҙә итте. 1994 йылда Рәсәй Федерацияһы менән Башҡортостан Республикаһы араһында вәкәләттәрҙе бүлешеү тураһында килешеү төҙөлдө. Ельцин киткәс, власть вертикален нығытыу һөҙөмтәһендә Башҡортостандың хоҡуҡтары сикләнде.

Тарихты өйрәнеүҙең кәрәклеген, әһәмиәтен бына мин шунда күрәм. Үткәндәрҙе өйрәнеп, бөгөнгө көндәге ваҡиғаларҙы дөрөҫ баһаларға, киләсәкте күҙалларға ярҙам итә ул тарих. Юҡҡамы ни, үткәне булмаған халыҡ сабый кеүек, уның башына нимә һалаһың, шуны ҡабул итә, тиҙәр. Шуға күрә лә, тәү ҡарашҡа бигүк ҡыҙыҡлы булмаған тарих ғилеменең асылында һәр халыҡтың яҙмышы, булмышы ята.

**Азат ЯРМУЛЛИН,**
**БР Китап палатаһы директоры, тарихсы.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



Йәдкәр БӘШИРОВ

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

Ул саҡтағы башҡорт ҡәбиләләренең идаралыҡ төҙөлөшө көнбайыш төркиҙәренеке кеүек булған. Мәҫәлән, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарында шундай идаралыҡ төҙөлөшө: башҡорт ҡәбиләләре юғары сәйәси берләшмәгә - конфедерацияға, йәки ҡатмарлы хакимлыҡҡа ойошҡан, ул, асылда, дәүләтселекте тәшкил иткән. Был берләшмәгә инеүсе ҡәбиләләр менән нәҫеле буйынса йәки һайланған бей идара иткән. Ә инде был берләшмәнең ғәскәре (дружинаһы) бар икән, был факт башҡорт ойошмаһының монгол осорона тиклем үк (IX-XII б.б.) формалашыуын, иртә феодаль синыфы дәүеренә ҡарауын аңлатҡан. Мәҫәлән, Башҡорт хандың шәхси тәнһаҡсылары ғына (ханлыҡтың төп ғәскәрен иҫәпкә алмағанда) 2 мең яугирҙы тәшкил иткән. Урта быуаттарҙа ғәскәрҙең булыуы дәүләтселектең иң төп күрһәткесе һаналған. Ғәскәрҙәге яугирҙарҙың һаны бер нисә тиҫтә меңгә тиклем барып еткән. Турбаслы, Кушнарен, Бахмутин мәҙәниәтенә ҡараған ҡәбиләләр, ҡағанаттың дәүләтселек институтын мираҫ итеп алып, айырым башҡорт ҡәбиләләрен тәшкил иткән.

Дәүләтселектең идаралыҡ органын һайлау үҙаллы башҡарылған, был осраҡта хазарҙар кеүек үк башҡорттар көнбайыш Төрөк ҡағанаты традицияларына йөҙ тотҡан. Ҡеүәтле ҡәбилә берләшмәһе башында хан торған. Сыңғыҙхан дәүерендә башҡорт йәмғиәтендә иң юғары идаралыҡ ҡатламын бейҙәр тәшкил иткән. Бейҙәрҙең ҡулында хандарҙыҡынан кәм булмаған власть булған. Майҡы бей вариҫтары XVI быуаттың урталарына тиклем хандар тип аталған. Ә урҙаларҙа, ханлыҡтарҙа ир-ат ханға хеҙмәт иткән, был берләшкән ҡәбиләләрҙең хәрби ойошмаларын тәшкил иткән.

XVI быуаттың уртаһынан башлап башҡорт бейҙәре һәм тархандары кенәздәр тип атала башлаған, был хәл уларҙы Мәскәү кенәздәре менән бер рәткә ҡуйған. Илдә иң юғары власть хан ҡулында булған, дәүләттең бар ере хан мөлкәте булып иҫәпләнгән, крәҫтиәндәр ерҙе эшкәрткән, файҙаланған өсөн ханға һалым түләгән. Башҡорт ханлығы тарихының күп кенә ваҡиғалары идара итеүсе хандар исемдәре менән бәйле. Ханлыҡтар үҙ нәүбәтендә мырҙалар идара иткән олоҫтарға бүленгән. Мөһим дәүләт мәсьәләләрен хәл итеү өсөн (ханды тәхеттән бушатыу, яңы хан һайлау, һуғыш йә солох иғлан итеү, халыҡ-ара килешеүҙәр төҙөү һ.б. мәсьәләләр) ер биләүселәр, хәрбиҙәр, руханиҙар ҡоролтайға йыйылған. Ҡоролтайҙа башҡа ҡатлам вәкилдәре булмаған, шуға күрә уны халыҡ йыйыны тип атап булмай.

IX - X быуаттарҙа ғәрәп ғалимдары, шул иҫәптән Әл Иҙриси (XII) башҡорт хандарын Нәмжән, Гүрхан, Ҡараҡыя, Ҡасыр, Масыр ҡалаларының хакимдары итеп атай. Улар бигерәк тә иң ныҡ төҙөкләндерелгән Нәмжән ҡалаһының хакимын айырып атай (И.Г. Коновалова "Әл Иҙриси көнсығыш Европа илдәре һәм халыҡтары тураһында "М.-2006). Нәмжән ҡалаһын Башҡорт ҡалаһының емереклектәре урынында ҡалҡып сыҡҡан яңы ҡала тип атарға ла булалыр. Унан биш ҡәлгә (ҡаласыҡ), ун асыҡ ауыл урыны һаҡланған. Уларҙың араһында иң ҙуры - Өфө-II ҡаласығы. Ҡаласыҡ V быуаттан XVI быуатҡа тиклем йәшәгән. Ул V - XVI быуаттарҙа тарихи (ҙур) Башҡортостандың сауҙа-иҡтисади, мәҙәни-сәйәси үҙәге булып торған, баш ҡала функцияһын үтәгән.

**(Дауамы бар).**

ҠУШАМАТ

# БӨРЙӘН ГУБЕРНАТОРЫ

**Һай-һай, беҙҙең халыҡ ҡушамат тағырға әҙер генә тора ла инде. Кешеһенә ҡарап, шул ҡушамат уға шундай ныҡ килешә, хатта ваҡыты менән халыҡ уның мулла ҡушҡан исемен дә онотоп ҡуя. Әле яңыраҡ ҡына ошо хәлгә бәйле бер һөйләшеүҙе аптырап тыңлап торҙом. Булмаһа, бергә тыңлап алайыҡ был һөйләшеүҙе.**

- Әле яңыраҡ Мәҡсүт яғына барғайным. Губернаторҙы күрергә ине. Тап итеп булманы.

- Төш мәлендә Губернатор һине өйөндә көтөп ултырмай инде. Иртәрәк барырға ине.

- Шулай итергә кәрәк булған да бит. Ул таң менән сығып киткән икән.

- Ә ниндәй йомошоң төшкәйне Губернаторға?

- Ул элек Волгала йөрөй торғайны бит. Хәҙер ул машинаһы ултыра, тейҙәр. Шуның бер запчасы кәрәк ине.

- Дә-ә-ә, хәҙер Губернатор яңы машинала йөрөй шул. Ока алып ебәргән бит. Былай Губернатор Окаһын маҡтай. Башҡалар тауҙарҙы менә алмай ултырып ҡала, ә мин зыйлатып менеп китәм, тей.

- Ҡарап тороуға ғына Ока бәләкәй һымаҡ, ә былай көслө машина бит ул.

- Губернатор үҙе лә кәүҙәгә таҙа бит, кәрәк булһа, Окаһын тауға үҙе һөйрәп мендерә ул.

Һөйләшеү ошолай юҫыҡта дауам итә. Ә мин уларҙы аптырап тыңлап торам. Губернатор ҙа Губернатор, ә бына ошо Губернатор тигәндәре кем икән - ошо һорау борсой мине. Унан-бынан һорашып асыҡланым мин ул кешене. Бындай дәрәжәле ҡушаматтың хужаһы Ғаяз Ғәлин икән. Баҡтиһәң, был ҡушамат уға Мәҡсүт ауылында көслө төҙөлөш барған мәлдә ҡушылған. Уның тарихы ла үҙенсәлекле генә. Ошо көслө төҙөлөш барған мәлдә район хәкимиәтенә ҡайһы бер мәсьәләләрҙе тиҙ арала, үҙ мәлендә хәл итергә өлгөрөп булмағандыр инде. Бына бер мәл төҙөлөш материалдары етмәү сәбәпле халыҡ ризаһыҙлыҡ белдерә башлағас, ул ваҡыттағы район башлығы Ирек Фәсхетдин улы Зарипов ҡулын алға һоноп: "Етешмәгән нәмәләрҙе, ана, Губернаторҙан һорағыҙ" - тип әйткән. Барса халыҡ Ирек Фәсхетдин улы күрһәткән кешегә, йәғни Ғаязға, боролоп ҡараған. Ысынлап та, тап ошо мәлдә ул яуаплы вазифа биләгән - ситтән килгән төҙөлөш материалдарын тап ошо Ғаяз ҡабул иткән икән. Район башлығының был тапҡыр яуабына халыҡ гөж итеп ҡалған. Яйлап, был хәл онотолған, төҙөлөш дауам иткән. Бары тик Ғаяз ғына ошо мәлдән Губернатор булып ҡалған.

Миңә ҡалһа, бындай мәртәбәле ҡушамат күптәргә тәтемәй ҙә әле. Теләк шул, Ғаяз Ғәлинға оҙаҡ йылдар Губернатор "вазифаһын" башҡарырға насип итһен.

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ӘЛМИСАҠТАН...



➔ 1752 - И. Твердышев менән И. Мясниковтың Богоявлен заводына нигеҙ һалына.

➔ 1753 йыл - Сенат Ырымбур губернаһы ерҙәрендә фәҡәт шәхси заводтар төҙөүгә рөхсәт биреүсе указ ҡабул итә.

➔ 1753 йыл - Алтын йыуыу буйынса Березовский заводы эш башлай. Рәсәйҙә алтын табыу сәнәғәтенә нигеҙ һалына.

➔ 1753-1871 йылдар - Мосоловтарҙың Ҡана (Кананикольское) заводы эшләгән.

➔ 1754 йылдың 22 марты - Сенат указы буйынса Тоҙ комиссариаты Минзәләнән Һамарға күсерелә. 1764 йылдың 30 апрелендә ябыла.

➔ 1754 йылдың 16 июне - Шайтан-Көҙөй волосы старшинаһы Юлай Аҙналиндың ғаиләһендә улы Салауат батыр донъяға килә.

➔ 1754 йыл - Надир Уразмәтов улы Йосоп менән нефть заводы төҙөү хаҡында дәүләт органдарына мөрәжәғәт итә.

➔ 1754-1834 йылдар - билдәле ғалим һәм фекер эйәһе Ғәбдрәхим Усман йәшәгән.

➔ 1754-1796 йылдар - Г. Красильниковтың Архангел заводы эшләгән.

➔ 1755 йыл - Батырша восстаниеһы.

➔ 1755-1756 йылдар - К. Матвеев менән П.Шуваловтың Үрге һәм Түбәнге Әүжән-Петров заводтары төҙөлә. 1774 йылда пугачевсылар тарафынан үртәлә һәм 10 йылдан һуң ғына аяҡҡа баҫтырыла.

➔ 1756 йылдың сентябре - Пруссия менән һуғышта ҡатнашыу өсөн Лифляндияға башҡорттар менән мишәрҙәрҙән торған ике полк ебәрелә. 1760 йылда улар Берлинды алыуҙа ҡатнаша.

➔ 1757 йыл - Н. Демидовтың Ҡыштым заводы төҙөлә.

➔ 1758 йыл - И. Твердышев менән И. Мясниковтың - Ҡатау-Тамаҡ, А. Строгановтың Һатҡы заводтары төҙөлә.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Өйҙә үҙемдән башҡа ике ҡыҙым - әтәс. Ҡатыным, шаяртып: "Кетәктә йәшәйем", - тип ҡуя. Ул үҙе маймыл һәм йондоҙнамәлә, маймыл әтәсте ярата, тиелгән, миңә шуны белгәс - булған.*



**Быйылғы йыл йондоҙнамә буйынса Әтәс (Тауыҡ йылы ла тиҙәр) йылы тип нарыҡлана. Иҫке йылды оҙатып, яңыһын ҡаршылағанда, һәр кемдең күңеле матур өмөттәр менән генә мөлдөрәмә тулы булғанда, беҙ барибер ҙә был йорт ҡошо алып киләсәк йылдың нисек буласағы менән ҡыҙыҡһынмай булдыра алманыҡ һәм һорауҙарыбыҙҙы Әтәс йылында тыуған билдәле шәхестәргә төбәнек. Ниндәй икән ул әтәстәр? Был йылда тыуғандарҙан нимәләр көтөп була? Ҡунаҡтарыбыҙ - Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы Венер КАМАЛОВ һәм яҙыусы, тележурналист Сәрүәр СУРИНА.**

# ИР-ЕГЕТТЕ

## ҡураға ла, өйгә лә,

**► Башта уҙған йылды йомғаҡлап китәйек. Нисек кенә булһа ла, Маймыл йылы үтеп китте һәм унда ла беҙҙең өсөн ҡәҙерле, мөһим булған мәлдәр, эштәр, кешеләр ҡалды, шулай бит? Үтеп киткән йыл ниндәй ваҡиғалары менән иҫтәлекле булды һеҙгә, йәки уҙған йылды ҡабаттан йәшәргә теләр инегеҙме?**

**Венер Камалов:** Ул кәбисә йылы минең өсөн ауыр миҙгелдәрҙең береһе булды. Әгәр шундай ҙур юғалтыуҙар кисермәһәм, мин уның кәбисә булыуына иғтибар ҙа итмәгән булыр инем. Был йыл үҙенең рәхимһеҙ булыуына шанмаҫ ерҙән ышандырҙы. Бер туған ғына ҡустымдың улын юғалттыҡ. Был ҡайғыбыҙҙы әле бер йыл ғына баҫа алмаҫ. Атаәсәһе өсөн бер ғүмер ҙә... Унан үҙемә дүрт ай буйына дауахана тупһаһын тапарға тура килде. Шулай уҡ бер нисә аҡын, аралашып йөрөгән кешеләремде лә һуңғы юлға оҙаттым. Ҡыҫҡаһы, ҡаза артынан ҡаза килеп тик торҙо, шуңлыҡтан, мин был маймылдың тағы ла нимәләрҙер ҡылмай ғына үтеп китеүен һәм барлыбыҙҙың да иҫән-һау булыуын теләнем. Ижад яғына килгәндә иһә, әллә өҫтөнә ауырлыҡтар ишерелгәндә кеше әүҙемерәк булып китәме икән - сентябрь айында ғына эшкә сығыуыма ҡарамаҫтан, бына өсөнсө премьерама әҙерләнәм. Береһендә хатта Әтәс роле тәтене әле үҙемә.

**Сәрүәр Сурина:** Беҙ элек ул йылдарҙың атамаларын да, кәбисәнең ни икәнен дә белмәнек бит. Әммә ололарҙың теләндә йылды күҙаллаған "Һыйыр йылы һыйлы булыр" йәки "Ҡуй тыныс та туҡ булыр" тигән кеүегерәк әйтемдәр һәр саҡ йөшәне. Маймыл йылын ҡаршы алғанда, был йыл ижад итеүселәргә уңышлы йыл буласаҡ, тип уҡығайным. Был минең өсөн бер көйләнеш кеүек булды. Ысынлап та, илһамланып эшләнем. Шул ижад эшмәтәремдең береһе - Ҡырмыҫҡалы районында үткәрелгән башҡорт милли уйындары байрамы булды. Халҡыбыҙҙың ылаҡ, таш ырғытыу, уҡ атыу, ҡыҙ ҡыуыу кеүек онотолоп барған уйындарын тергеҙеп, бар ғәмгә сығарҙыҡ. Былерҙан тыш, шәхси ижадым да ярайһы ғына үҫеште. Шулай итеп, мин уҙған йылға үпкәләй алмайым.

**► Бөгөн йондоҙнамә тигән төшөнсә аңыбыҙға ярайһы уҡ ныҡынып инеп ултырҙы. Зәңгәр экрандарҙан көн дә шуны һөйләйҙәр, баҫмаларҙа улар үҙәк урынды биләй, интернет тулған. Ышанмаҫ ерҙән ышанып ҡуйһың ҡайһы саҡ...**

**Венер Камалов:** Дөйөм алып әйткәндә, мин йондоҙнамәне буш нәмәләр, тип уйламайым. Борон-борондан йондоҙҙарҙы кешеләр өйрәнгән, улар буйынса карталар төҙөгән, киләсәкте күҙаллаған, хатта үҙебеҙҙең абруйлы "Урал батыр" эпосы ла, ниндәйҙер кимәлдә шул йондоҙлоҡ календары ул. Шунлыҡтан, уларҙа ниндәйҙер сер бар, минеңсә.

**Сәрүәр Сурина:** Етмешенсе йылдарҙа килеп инде беҙгә йондоҙнамә тигән нәмә. Шул саҡта ғына мин, мәҫәлән, Әтәс икәнемде белдем. Друидтар, Ҡытай, Япон, көнсығыш календарҙары алып килде уларҙы. Беҙҙең халыҡта борондан йондоҙҙарға айырым ҡараш булғанлығы билдәле. Юл билдәләү, һауа торошон, миҙгелдәрҙең нисек килеүен самалау һәм башҡа осраҡтарҙа йондоҙҙарға мөрәжәғәт иткәндәр. Уларҙан тыш, тағы ла йондоҙҙар менән бәйле серҙәр ҙә булғандыр, уныһын беҙ әлегә сисә генә алмайбыҙҙыр. Быларҙан тыш, йондоҙҙарҙың рухи үҫенсәлеге лә көслө генә. Кеше бит, мәҫәлән, ҡояш ни тиклем кәрәгерәк булһа ла, сәғәттәр буйы ҡояшҡа текәлеп ултыра алмай. Әйондоҙҙарға ҡарай. Йәки йондоҙ атылғанда, емелдәгәндә теләк телә͡ү, юрау, өмөтләнеү кеүек тыуға яҙылмаған йолалар ҙа бар бит әле...



**► Ихатаға килеп ингәндә урамда ниндәй генә ҡош-ҡорт булғанда ла барибер ҙә иң беренсе әтәс күҙгә салына. Ул был йорттоң ҡото булып йөрөй хатта. Шунлыҡтан, Әтәс йылында тыуғандарҙы ла иғтибар үҙәгендә булыусан, ҡупшы, һауалыраҡ, тиҙәр. Йондоҙнамә лә уларҙы үҙҙәрен ярата белеүсе, тура һүҙле, егәрле, ҡыҙыу ҡанлы кешеләр, ти. Ошондай ҡылыҡһырлама менән килешәһегеҙме? Һеҙ үҙегеҙ ниндәй әтәстәр?**

**Венер Камалов:** Өйҙә үҙемдән башҡа ике ҡыҙым - әтәс. Ҡатыным, шаяртып: "Кетәктә йәшәйем", - тип ҡуя. Ул үҙе маймыл һәм йондоҙнамәлә, маймыл әтәсте ярата, тиелгән, миңә шуны белгәс - булған. Әҙ былай, етди әйткәндә, ниндәйҙер кимәлдә тура ла киләләр кеүек. Мин ғаиләмдә барыһының да күҙ уңымда булыуын, хәстәрем аҫтында йәшәүен хуп күрәм. Туғандарымды ла шуға өйрәткәнмен. Хатта сит ҡалаларҙа, өлкәләрҙә йәшәгәндәренең дә хәлен белешеп торорға тырышам. Улар үҙҙәре лә хәбар мөһим эштәрен дә кәңәшләшеп башҡара. Әтәс кеүек иртә торам һәм барыһын да уятып алам. Тиҙ ҡыҙып китәм, шул уҡ ваҡытта тиҙ ҡайтам да. Ғорурлыҡ тигән нәмә башҡорт ир-егеттәренең барыһында ла етерлектер. Хужалыҡ эштәрен үҙем контролдә тотам. Сағыулыҡ, иғтибар үҙәгендә булыу тигәндәргә минең һөнәр үҙе үк ҡыҫҡырып тора. Бынан бер ҡайҙа ла ҡасып булмай. Кеше менән низағҡа инеп бармайым, әммә үҙ позициямды тотам.

**Сәрүәр Сурина:** Миңә әтәстең "романтик" тигәне тура килә. Романтиклығым ошо йәшемдә лә һис кенә лә кәмемәгән. Тағы ла "мауығыусан натура" тигәне оҡшай. Мин тап шундаймын. Эшләгән эшем, уҡыған китабым йәки башҡа нәмә менән ныҡ мауығып китәм. Был, бер яҡтан, яҡшы булһа, икенсе яҡтан, ауыр ҙа. Әленән-әле бөтөн күңелде аҡтарып сығарып һалырға тура килә.

Әтәс ул тағы ла үҙ өҫтөнә үтә яуаплы эштәр ала һәм, иң ҡыҙығы, шуларҙы эшләй алам, тип уйлай. Унан һуң шул эштәрҙе нисек тә атҡарып сығара барыбер. Был - тап мин! Ғүмүмән, бала сағымдан мажара, тәүәккәллек яратам. Мажараға юлығыу өсөн дә тәүәккәллек кәрәк бит. Йә - бар, йә - юҡ, тигән хәлдәргә ҡалам йыш ҡына. Ошондай мәлдә минең көсөм арта, әллә ҡайҙан тиҙ уйлай, эшләй, өлгөрә, белә, һиҙә торған яҡтарым асыла ла китә. Ҡәҙимге йонсоп йөрөгән рәүештән ҡапыл икенсе бер донъяға килеп сыҡҡандай булып һелкенеп, булмышыңды уятып ебәрәһең дә, шул халәттә йәшәп алаһың.

Әтәсте, маҡтансыҡ, тиҙәр. Әммә мин уны маҡтансыҡ түгел, ә фәлсәфәсе, тиер инем. Ул үҙ уйҙарын ҡыҫҡырып һөйләй. Шуныһы маҡтаныу булып күренә. Шул уҡ ваҡытта әтәс әйткән һүҙенең кәрәклеген белә, һүҙе өсөн яуап бирә ала. Ул бушҡа "ҡыҫҡырмай".

Мин "әтәстәрҙе" яратам, үҙем әтәс булғанға ғына түгел. Улар араһында эстәлекле, мәғәнәле, тәрән кешеләр күп. Улар тормошто яратҡан, ауырлыҡтарҙан ҡурҡмай йәшәргә тырмашып яткан көслө шәхестәр. Мин аралашҡандарынан, мәҫәлән, Гөлсирә Ғиззәтуллина, Йомабикә Ильясова, Әлмира Ҡыуатова, Земфира Ҡәйепҡолова, Әнисә әхирәтем һ.б. Был ҡатын-ҡыҙҙар шаярған ерҙә шаяра, әйткән ерҙә әйтә беләләр. Донъя байлығына түгел, ә рух байлығына ынтылалар. Шулай ҙа әтәстәр ярлы ла йәшәмәй, сөнки улар хәстәрләй белеүсән.

**► Яңы йылдан ниндәйҙер мөғжизә көтөү бар бит шулай ҙа.**

**Мин быны бала саҡ ғәҙәте генә икән тиһәм, баҡтиһәң, олоғайғас та була икән ундай нәмә. Әтәс буларак, Әтәс йылынан башҡаларға ҡарағанда күберәккә, мулыраҡҡа өмөт итмәйһегеҙме?**

**Венер Камалов:** Бындай мөғжизә көтөүҙәр бөтәбеҙҙә лә бар инде ул. Һәр кемдең күңеленең иң төбөндә бындай тойғо йәшәй. Минең уйлауымса, был тойғонан оялырға ла, уны йәшерергә лә ярамай. Балалыҡ хистәре юйылған күңел йәнһеҙ булалыр, иң саф, иң кереһҙ саҡтың бер матур саткыһы бит инде ул. Мәҫәлән, ижади кеше буларак, ниндәйҙер ижади үрҙәргә ынтылаһың да торақың ул. Был юғары уңыштар тигәндә генә аңлатмай. Ә ниндәйҙер көтөлмәгән асыштар, күренештәр, рухи үҫеште барлыҡҡа килтерә торған яңылыҡтар көтәм. Үҙемдең йылым булыуы мөһим дә түгел, ярайһы уҡ тәжрибә туплаған оло кеше, атай кеше буларак, әлбиттә, иң беренсе балаларыма, туғандарыма һәм уларҙы уратып алған йәмғиәткә именлек теләйем. Элегерәк бына ошондай төшөнсәләр ғәҙәти, уйһыҙ ғына әйтелгән теләктәр булһа, хәҙер ошондай һүҙҙәргә иғтибар итә башлайһың һәм ул теләктәрҙе еткергәндә лә ысын күңелдән, уйлап, мәғәнәһен төшөнөп ҡулланаһың икән. Тормош шулайтып бөтә нәмәнең дә ысынбарлығын аңғарта икән ул.

**Сәрүәр Сурина:** Беҙҙең бер ағай бар, уның алдында алдағы пландарын, хыялдарын тураһында әйтеп ысҡындырһаң, ул: "Туҡта, иң мөһим нәмәне онottoң", - тип туктата. Киләсәктән нимәлер көтөр, һорар алдынан иң башта Аллаһы Тәғәләне тәбрикләп, шөкөр ҡылып, уның ризалығын һорап һәм шунан ғына киләсәгең тураһында уйла, тип әйтергә ярата. Ысынлап та. Беҙ күп осраҡта шул хәҡиҡәтте онотабыҙ. Мин дә иманлы булыу эстә, күңелдә һәм был һәр кемдең үҙ эше, тип тә ҡуям. Тик шул уҡ ваҡытта бының мөһим икәнен дә беләм. Ошоларҙан сығып, Әтәс йылынан көтә торғандарым: Аллаһ ни бирер - шул булыр.

Йылға теләгем дә бер аҙ фәлсәфәлерәк булыр, бәлки. Ҡурала, урамда әтәс йөрөмәһә, уның күрке булмай, тинек. Шуның кеүек, ғаиләлә лә әтәстең - ир-егеттең булыуы зарур. Ир заты - ғаиләнең ҡото, уның байлығы. Атайҙар булмаған ғаиләләрҙә ир балаларҙы шул вазифаға әҙерләп үҫтерергә кәрәк. Ир балаға бәләкәйҙән әтәс миссияһы һалынһын ул. Өйҙә, ул үҙен бер аҙ юғарыраҡ, мөһимерәк итеп тойһон. Ул саҡта яуаплылыҡты ла күтәреп өйрәнәсәк.

Ҡартәсәйемдең бер һүҙе хәтеремдә әле. Ул, ирҙәрҙең барыһы ла әтәс, тип ҡабатларға ятты йыш ҡына. Беҙ, йәштәр, көләбеҙ. Ул әйтә: "Ә ул насар түгел, беҙ, ҡатын-ҡыҙҙар, ана шуны, ир-егеттең әтәс булыуын аңламағанға ла күп илайбыҙ", - ти. Йәғни, ир балаларҙың, ирҙәрҙең ихтыяжын хөрмәт итеү тураһында ҡартәсәйем беҙгә уйнап-көлөп түгел, ә бик уйланып, нәсихәт итеп әйтә торғайны. Йәшәй-йәшәй, үҙем өс ир бала үҫтергәс, мин быларҙың ғаиләнигеҙен тота торған ҡанундарҙың береһе икәнен аңланым. Шуға үҙем дә шулай тип ҡабатлайым: ниндәй йылда ғына тыуған булһа ла, ир-егетте әтәс итәйек. Булһындар хужа: ҡураға ла, өйгә лә, илгә лә.

**► Һеҙ икегеҙ ҙә ижад кешеләре, журналистикала, әҙәбиәттә, сәнғәттә, телепроекттарҙа һеҙҙең исем танылғандар араһында. Өйҙә лә шул эш кәйефе, уй-пландары менән йәшәйһегеҙме, әллә был ике донъяны айырыу мөмкинлеге бармы? Ғаилә ағазаларығыҙ һеҙҙең һөнәрҙе, танылған кешеләр булыуығыҙҙы, ижади эшләүегеҙҙе һанлаймы, аңлаймы, тигәндәй?**

**Венер Камалов:** Мин был ике донъяны бер нисек тә бер-береһенән айыра алмайым. Үйнайһы ролдәрем башыма ғына инеп ултырмай, улар эсендә "йәшәп" алырға тура килә. Был мәлдә мин шул роль юҫығында үҙгәрә биреп

***Күрсәк мәле оҙаҡҡа һуҙылып китеп, һуңынан аяҡҡа баҫыу ауырға тура килмәһен йәки бөтөнләй мөмкин булмай ҡуймаһын, тип тә шөбһәләнәм. Был арауыҡта күп нәмәләрҙе юғалтырға ла мөмкин. Мәҫәлән, бына әле генә сәсәндәр мәктәбен юғалтҡанбыҙ, тигән һөйләшеүҙәр булды. Бөгөнгә күп байрамдарҙы мин тышҡы ялтырауыҡ итеп кенә күрәм. Төрлө милләт ҡуша ҡайнашкан шоуҙарға әйләнде хәҙер улар. Һуңғы йылдарҙа хатта милли байрамдарҙы милли байрам итеп кенә үткәрергә лә ҡыймайбыҙ булып сыға бит. Бөтә нәмә сәйәсәтҡә әйләнде. Тиҙҙән милли тигән йолаларыбыҙ ҙа башҡа милләттәрҙеке менән буталып, ҡатнашып бөтәсәк. Милләттәр дуҫлығы, әлбиттә, яҡшы нәмә, тик беҙҙең айырым мәҙәниәтебеҙ, тарихыбыҙ һәм менталитетыбыҙ бар, шуны онотмайыҡ. Уларҙан яҙһаҡ, беҙ донъя аренаһында бер кем дә булмаясаҡбыҙ.***

*✓ Берәүҙәр һылыу, икенселәр батыр булып дан ала. Күрһәгеҙ бит, беҙ аҡтамыр һымаҡ. "Бөтәбеҙ, бөләбеҙ" тигән шөбһәле һүҙҙәрҙе бөтөнләй ситкә ташларға һәм "Йәшәйбеҙ! Артабыҙ! Был ерҙәр беҙҙеке!" тигәндә алға ҡуйырға кәрәк.*



киткәнлегемдә лә һиҙәм хатта. Әгәр уны өйгә ҡайтҡас онотам икән, тимәк, ул образ мине яулай алмаған, тимәк, уны уйнап маташырға ла кәрәкмәй.

Беҙҙең ғаиләлә, мәҫәлән, "һин - артист" тигән пафослы ҡараш та, һүҙ ҙә юҡ. Ҡатыным да, ҡыҙҙарым да, туғандарым да был һөнәрҙең әллә күпме рухи һәм физик көс талап иткән ҡатмарлы хеҙмәт икәнен аңлай. Шуға ла көйөфөмдең, хәл-торошомдоң төрлө үҙгәрештәрен дә тейешенсә ҡабул итә беләләр. Мин дә ижад кешеһемен, тип, ерҙән ысҡынып китмәҫкә икәнлекте лә беләм. Ә бындайҙар, үкенескә ҡаршы, арабыҙҙа етерлек. Нindәй генә һөнәр эйәһе булһам да, мин иң беренсе ғаиләмдә аҫыраусы.

Минең билдәле булыуым шул уҡ ваҡытта ғаиләмә лә яуаплылыҡ өҫтәй. Ҡыҙҙарым мәктәптә лә, ҡайҙа ла, кем балаһы булыуын онотмай, йөҙөмә ҡыҙыллыҡ килтермәҫкә тырыша. Театрға ға барҙым, уйындар уйлап сығарҙым, әкиәттәр һөйләнем. Хатта уларҙы командировкаларға ла эйәрткән саҡтарым күп булды. Ниндәй тарафҡа сыҡһам да яҡын таныштарым, туғандарым булды. Мин эшләйем, балаларым ер-һыу күрә, һыу инә, еләк йыя... Был тәңгәлдә телевидениела бергә эшләгән коллегаларыма рәхмәтлемен, берәүҙән бер ҡырын ҡараш булманы. Киреһенсә, водителдәргә тиклем балаларымды килеп тейәп алып китә, кәрәкле урынға илтеп ҡуя, минең мәшәҡәттәремде еңеләйтергә тырыша ине.

Бөгөн минең ете ейәнем бар. Улар барыһы ла минең Сәрүәр Сурина булыуымды белә, яҙғандарымды ваҡытында балаларым уҡыһа, бөгөн ейәндәрем дә таныша килә. Элек тә, әкиәт яҙһам, иң беренсе балаларыма уҡыным. Арыҫлан тигән улым барометр кеүек ине. Иғтибарын ситкә ебәрә икән, тимәк, бында нимәһеләр етешмәй, тип уйлайым. Әле ме, зарлымы-йырлымы, мөхәббәт ул Аллаһы Тәғәләнең кешегә булған оло бүләге. Ул беҙгә шундай күп мөхәббәт аҫҡыстары бирә, уны һәр кем үҙ фигеләндә ҡуллана ала. Ир менән ҡатын араһында ҡайнар мөхәббәт бар икән, әйҙә, был хис уларға бәхет килтерһен. Кемдер илен хәстәрләүҙе беренсе урынға ҡуйған икән - хөрмәткә лайыҡ. Балаларын һайлаған икән - ҡәҙергә төрөнөр һ.б. Хатта, мәҫәлән, тел өйрәнгәндә лә, ул телде яратмаһаң, өйрәнеүе бик ауыр. Күршеңде яратмаһаң да йәшәүе ҡыйын. Бергә йәшәгән кешеңде һөймәһәң дә, ғүмерҙе заяға уҙғарыу, уны ла, үҙеңде лә сарсатыу була. Шунлыҡтан, мин мөхәббәттән баш тартмайым, уны һайлайым.

**Венер Камалов:** Халыҡта "мөхәббәтһеҙ" тигән һүҙ бар. Ғашиҡ булмаған кешегә түгел, ә донъяға һөйөү менән ҡарай белмәгәнгә әйтәләр быны. Минеңсә, мөхәббәт бөтә йәштә лә кәрәк. Башҡа-шоноп та, бөлә-ҡазаға тарып та ала. Уның сәләмәтлеге бөтөп китә, аҫсаһыҙ ҙа интегергә мөмкин, тегә йәки был юғалтыуҙар кисерә. Халыҡ та шулай, ниндәйҙер кисерештәрҙә йәшәй. Бөгөн беҙ матди ярлылыҡҡа ҡалған хәлебеҙҙән нисек тә сығырға маташабыҙ. Был йәшәйешкә яраҡлашып, етешеп, һөнәрҙәребеҙҙе, кәсептәребеҙҙе тергеҙеп көн күрергә тырышып ятабыҙ. Ярлылыҡтың насарлығын аңлап, әле яңы унан ҡурҡа башланыҡ. Башҡорт әле яңы-яңы ике ҡатлы йорттар төҙөргә, ерҙәрҙе үҙләштерергә, иномарка машинала йөрөргә өйрәнә башланы. Матди яҡты ҡайғыртҡанда, тәжрибә күрһәтеүенсә, рухи яҡ аҡһай төшә. Беҙҙең милләт тә әле, үҙен ҡулға йомарлап, иҡтисади хәлен яйлау юлында. Шуға ла уның рухи донъяһы бер аҙ ҡаҡшап китте. Әммә был ваҡытлыса күренештер, тип уйлайым. Шундай көслө һәм айкап сыҡмаҫлыҡ тарихы

# ӘТӘС ИТӘЙЕК:

## илгә лә хужа булһындар!

спектаклдәрҙән тыш та килеп, репетицияларҙы ҡарап, минең уйнаған ролдәремде тикшереп, анализлап ташлайҙар ҡай саҡ. Икеһе лә артист булырға хыялланa, мин иһә уларҙы икенсерәк юҫыҡҡа бормаҡсымын. Ошо хәлдә һеҙ минең эш менән шәхси тормошто айырып ҡарағыҙ инде.

**Сәрүәр Сурина:** Мин бит инде дүрт бала әсәһе. Тик быны күптәр белмәй генә. Үҙебеҙҙең эштә генераль директорҙың секретары бер мәл минең дүрт балам барлығын белгән дә (туғыҙ йыл бергә эшләгәндән һуң!): "Сәрүәр апай, мин һеҙҙе ҡарт ҡыҙҙыр, тип уйлағайным", - тип көлдөрҙө. Яҙыусылар берлегендә лә күп балалы әсәйҙәрҙе ҡотлағанда мине бер ваҡытта ла телгә алманылар. Бер ҙә үпкәләмәнем, эстән генә йылмая ла ҡуя инем. Әлбиттә, бер иланым. Иҡтисадсы булып оҙаҡ йылдар бергә эшләгән апай: "Бер больничныйға китмәнең, балаларың ауырыманы, ахыры. Эшләйһең дә эшләйһең", - тигәс, тартмамдағы бер ҡосаҡ тапшырылмаған больничныйҙарҙы ҡарап, күңелем тулып китте. Ауырымай буламы инде, ярай, ирем һәйбәт ине, ятаҡта йәшәгәндә күрше-күлән, вахтерҙар барыһы ла бала ҡараšты.

Һорауға тура яуап биргәндә, мин эш менән ғаилә тормошон айырырға тырыштым. Эшемдең ауыр булыуы, һәр ваҡыт командировкаларҙа йөрөү, балаларға тейешле иғтибар бирә алмау миндә ғаиләм алдында гәйеплелек тойғоһо яралдырҙы. Һәр ваҡыт күңелемдә "Эх, бер көн үҙемдә тулыһынса балаларға ғына бағышларға кәрәк ине", тигән уй йөшәне. Шуға, өйҙә эш хаҡында бөтөнләй һүҙ ҡуҙғатмаҫҡа тырыштым. Улар ҙа минең эш һөйләгәнемде яратманы, мин үҙем, әсәй булараҡ кәрәгерәк инем. Ял көндәрендә шуға балаларым менән бергә экскурсияларға, ауыл-

лә яҙғандарымды шул юл менән тикшерәм, бер ниндәй башҡа анализ да кәрәкмәй.

**▸ Әлеге һеҙ һөйләгән ижадты ла, ғаиләне лә, башҡа мөнәсәбәттәрҙе лә һәм донъяны хәрәкәттә тотоусы көс - ул мөхәббәт, тиҙәр. Бөтөн ошо эш-мәшәҡәттәр, ҡайнап торған атмосфера, проблемалар араһында туҡтап ҡалып, ошо хис хаҡында уйланғанығыҙ бармы?**

ларҙы ярата алыу - ул һинең эске донъяң тәртиптә, тигәнде аңлата. Тимәк, һинең күңелең сәләмәт, һин унда башҡаларҙы ла һыйҙыра алаһың. Ижади тормошта был бигерәк тә мөһим. Мин бергә эшләгән кешеләрем менән "һаумы-һаумы" тигән генә кимәлдә аралашмайым бит, улар менән үтә лә яҡын булып, хис-тойғолар алмашыу халәтендә эшләргә тура килә. Әгәр уларҙы ҡабул итә алмаһаң - нисек булыр ине? Ғөмүмән, кеше



*Йылға теләгем дә бер аҙ фәлсәфәлерәк булыр, бәлки. Ҡурала, урамда әтәс йөрөмәһә, уның күрке булмай, тинек. Шуның кеүек, ғаиләлә лә әтәстең - ир-егеттең булыуы зарур. Ир заты - ғаиләнең ҡото, уның башлығы. Атайҙар булмаған ғаиләләрҙә ир балаларҙы шул вазифаға әҙерләп үҫтерергә кәрәк. Ир балаға бөләкәйҙән әтәс миссияны һалынһын ул. Әйҙә, ул үҙен бер аҙ юғарыраҡ, мөһимерәк итеп тойһон. Ул саҡта яуаплылыҡты ла күтәреп өйрәнәсәк. Ҡартәсәйемдең бер һүҙе хәтеремдә әле. Ул, ирҙәрҙең барыһы ла әтәс, тип ҡабатларға ятатты йыш ҡына. Беҙ, йәштәр, көләбеҙ. Ул әйтә: "Ә ул насар түгел, беҙ, ҡатын-ҡыҙҙар, ана шуны, ир-егеттең әтәс булыуын аңламағанға ла күп илайбыҙ", - ти. Йәғни, ир балаларҙың, ирҙәрҙең ихтыяжын хөрмәт итеү тураһында ҡартәсәйем беҙгә уйнап-көлөп түгел, ә бик уйланып, нәсихәт итеп әйтә торғайны.*

**Әллә был тик йәштәргә генә хас, тип иҫәпләйһегеҙме?**

**Сәрүәр Сурина:** Олоғая барған һайын "мөхәббәт" тигән һүҙ, шул төшөнсә ҡәҙерлерәк була бара икән ул. Ә уның башланғысы тап йәшлектә. Донъяны танып белеү өсөн әҙәмгә Аллаһы Тәғәлә тарафынан мөхәббәт тигән көс бирелә. Тормоштағы ниндәй генә хәлдәр ҙә юйыла, тәсһөҙләнә ул ваҡыт үтеү менән, ә мөхәббәтен онотмай кеше. Хатта яратҡанының төҫөн дә иҫләмәҫкә мөмкин, ә тойғоһон, кисерештәрен шул сағыулыҡта һаҡлай.

Минең бөгөнгө ҡарашымдан, мөхәббәтле булғанда ғына һин ошо көндөң матурлығын, эргәңдәгеләрҙең ҡәҙерле булыуын, йәшәргә теләгәнеңде тояһың. Ул донъялағы бар мөнәсәбәттәргә лә, хәл-тороштарға ла тәм, тат өҫтәүсе лә. Бәхетләме-бәхетһеҙ-

эштә лә, ғаиләлә лә мөхәббәтле мөхиттә йәшәргә тейеш.

Ә бая Сәрүәр апай әйткән "ир-егет - әтәс" тигән фекерҙе үҫтереп, мин быны ла мөхәббәттең бер төрөнә индерәм. Нисек кенә ҡараһалар ҙа, "әтәслек" ирлек һөйөүенең бер төрө, ирҙәрҙең физиологияһы ул.

**▸ Һеҙҙең менән һөйләшеп тә, тел-милләт мәсьәләһен ҡуҙғатмаһаҡ, гәйеп булыр кеүек. Бөгөн ул ҡырҡыу һорауҙарҙың береһе, тибеҙ ҙә, ошо урында, әллә был мәсьәләне үҙебеҙ артыҡ ҡырҡыулаштарып ебәрәбеҙме икән, тип тә уйлап ҡуйыла. Бәлки, беҙҙең хәл, күп кенә башҡа төрки телле халыҡтар менән сағыштырғанда, улай уҡ насар ҙа түгелдер, ә?**

**Сәрүәр Сурина:** Халыҡтың торошо ул шул уҡ кешенең торошо бит ул. Һәр кеше ауырып та, бо-

булған халыҡтың бындайға ғына бирешеүе мөмкин түгел.

Шул уҡ ваҡытта беҙҙең үҙаңыбыҙ ҙа уяу. Быуна ошо иҡтисади көрәш алып барғанда ла, арабыҙҙа рухи мөлкәтебеҙҙе һаҡлап алып китеүселәребеҙ бар. Элекке замандарҙа ла халыҡтың барыһы ла рухи яҡты ҡайғыртып йәшәмәгән. Ундай кешеләр һайланма ғына булған. Әле лә бар улар, шиғри телме, йыр телеме, ҡарһүҙҙәр, ҡобайырҙар, бейеү сәнғәтен, музыка ҡоралдарын йәки эпостарҙы өйрәнеп, киләһе быуынға тапшырыусылар. Былар баҫмалар аша ла, гәзит-журналдар, телевидение, интернет аша ла башҡарыла. Кемдер милли аш-һыуҙы, кемдер милли кейемдәрҙе, характерҙы, йолаларҙы һаҡлаусы булып тора. Берәүҙәр һылыу, икенселәр батыр булып дан ала, өсөнсөләр түрәлектә хөрмәт ҡаҙана. Күрһәгеҙ бит, беҙ аҡтамыр һымаҡ. "Бөтәбеҙ, бөләбеҙ" тигән шөбһәле һүҙҙәрҙе бөтөнләй ситкә ташларға һәм "Йәшәйбеҙ! Артабыҙ! Был ерҙәр беҙҙеке!" тигәндә алға ҡуйырға кәрәк. Шул уҡ ваҡытта саң ҡағыусыларға ла рәхмәт, уларҙың был хафаһы үҙ урынында ҡынғырау булып зыңлап тора.

**Венер Камалов:** Әлбиттә, Сәрүәр апай менән мин килешәм, әммә ошо көрсөк мәле оҙаҡҡа һуҙылып китеп, һуңынан аяҡҡа баҫыу ауырға тура килмәһен йәки бөтөнләй мөмкин булмай ҡуймаһын, тип тә шөбһәләнәм. Был арауыҡта күп нәмәләрҙе юғалтырға ла мөмкин. Мәҫәлән, быңа әле генә сәсәндәр мәктәбен юғалтҡанбыҙ, тигән һөйләшеүҙәр булды. Бөгөнгө күп байрамдарҙы мин тышҡы ялтырауыҡ итеп кенә күрәм. Төрлө милләт ҡуша ҡайнашҡан шоуҙарға әйләнде хәҙер улар. Һуңғы йылдарҙа хатта милли байрамдарҙы милли байрам итеп кенә үткәрергә лә ҡыймайбыҙ булып сыға бит. Бөтә нәмә сәйәсәткә әйләнде. Тиҙҙән милли тигән йолаларыбыҙ ҙа башҡа милләттәрҙеке менән буталып, ҡатнашып бөтәсәк. Милләттәр дуҫлығы, әлбиттә, яҡшы нәмә, тик беҙҙең айырым мәҙәниәтебеҙ, тарихыбыҙ һәм менталитетыбыҙ бар, шуны онотмайыҡ. Уларҙан яҙһаҡ, беҙ донъя аренаһында бер кем дә булмаясаҡбыҙ.

Мине шулай уҡ ауылдарҙа мәктәптәрҙең ябылыуы бик борсой. Балалар үҙ ауылында уҡымай икән, улар унда ерекмәй ҙә. Тимәк, киләсәктә, беҙҙең атай-әсәйҙәр быуынынан һуң, унда йәшәүселәр ҙә ҡалмаясаҡ, тигән һүҙ. Ҡалала ла башҡорт мәктәптәре бар, тик улар ауыл мөхитен, телдән тәбиғилеген, тәрәнлеген биреп еткерә алмай. Урбанизацияны маҡтайбыҙ, Себергә, сит илгә барып эшләүҙе, йәшәүҙе хуплайбыҙ. Ярай, бөгөн ситтәге милләттәштәребеҙ кем икәнен белә, ә уларҙың киләһе, унан киләһе быуындары тамырҙарын онотасаҡ. Сит мөхит тиҙ йотоусан бит ул.

Минең үҙемдең ун бер йыллыҡ мәктәбе булған, гөрләп торған тыуған ауылым да һүнгән бөгөн. Элекке зыялы хужалар, берҙәнбер башҡорт ауылы, тип, уны йәшәтергә тырыштылар. Берҙәнбер көн ул бөттө лә ҡуйҙы, дөрөҫөрәге, ҡан бирә торған тамырҙарын ҡырҡып, көслән ҡоротолар. Балалар интернаттарға китте йәки ата-әсәйҙәре, уларҙың киләсәген ҡайғыртып, бөтөнләй күсеп сығып киттеләр. Хәҙер, һанай китһәң, ауылымда бала үҫтерерлек бер ғаилә лә ҡалманы. Хаҡлы ялға сығып, ҡартлыҡ көндәрҙе шунда үткәрергә ҡайтыуға ауылым булһын ине, тип хыялланам да бит...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әтәстәр менән ошондай еңел һәм шул уҡ ваҡытта фәлсәфәүи мәғәнәле һөйләшеүебеҙ аҙағында Сәрүәр апай Сурина: "Киләсәктә лә милләттәштәремә рухи азатлыҡ, йөрәктәренә бер аҙ батырлыҡ, ғорурлыҡ тойғолары өҫтәлһен ине, тип теләйем. Бөтөн яҡшы башланғыстар ҙа рухи азатлыҡты тойоуҙан башлана..." тине. Беҙ ҙә ҡушылабыҙ ошо теләктәргә һәм... Әтәс йылы мөбәрәк булһын, тип теләйбеҙ.**

Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА
әңгәмәләште.

***✓ Шәйәхмәт ҡурайҙы тәмәкенән һарғайған тештәренә терәне лә уйнап та ебәрҙе. Рифат үҙен бейек тау түбәһенән ергә ҡараған кеүек тойҙо. Ер матур, әммә һағышлы һымаҡ һәм офоҡ ягына киңәйгәндән-киңәйә барғандай...***



# БРИГАДА ӨЙРӘҺЕ

Талха ҒИНИӘТУЛЛИН

Хикәйә

Һуғыштың дүртенсе йылында икенсе бригада аймағы, кешеһе һирәгәйеп, тәрән тынлыҡҡа сумды. Тәҙрәләренә тиклем ҡар ҡаплаған иҫке бәләкәй йорттарҙа тормош юҡ, булыуы ла мөмкин түгел һымаҡ. Кемдеңдер ҡыйығынан сыҡҡан хәлһеҙ төтөн генә "Беҙ бар, беҙ тере әле", тип белдергән төҫлө...

Һуғыш баҫыуҙан һабансыны, сәсеүсене йолҡоп, үҙенең снарядтары, бомбалары телгеләгән баҫыуына алып китте. Һәҙәмтәлә йәш һалдаткалар, үсмер йәш ҡыҙҙар колхоз баҫыуҙарының һабансыларына, сәсеүселәренә әйләнде һәм тейешенсә тәрбиәләнмәгән ер, ир-ат хужа юҡлығын һиҙгән кеүек, уңышын ҡырҡа кәметте.

Аслыҡ ауылға йылан ише йәшерен һәм яйлап килде. Әммә аслыҡ иген уңмаған йылдың киләһендә, үткән йылда булған ҡойто запастарҙы ашап бөткәндән һуң уҡ башланғайны. Элекке йылдарҙағы йотлоҡто кисергән ололар һуғыштың аслыҡ та алып килгәнен белгәнлектән, ҡарышмай ғына түҙҙе, үсмерҙәр ашарлыҡ бөтә ризыҡты фронтҡа ебәреп торғанды аңланы, ә тук тормошто саҡ-саҡ ҡына иҫләгән балалар, уларҙың икмәген насар немец тартып алды, тип уйланы. Уларҙың аталары әлеге икмәкте кире ҡайтарып алыр өсөн һуғышҡа китте лә инде. Улар ашарға теләй, иртәнән кискә тиклем тик ашау тураһында ғына уйлай һәм ас илау менән әсәләренең йәндәрен телә. Һуғыш аслыҡ менән бергә ауырыуҙар ҙа алып килә. Һуғышҡа тиклем дә үпкә сире - чахотка тотош ғаиләләрҙе ҡыра торғайны. Унан бер нисек тә дауаланып булмай. Ҡарттар, әүәле, батша заманында, башҡорттар был ауырыуҙың нимә икәнен дә белмәне, тип һөйләй. Берәүҙәр был сирҙе араҡы менән бергә завод эшселәре килтергән, икенселәр - халыҡ буйһонмаған өсөн уны большевиктар йоҡторған, тип ышандырырға тырышты.

Был хәйерһеҙ сир кулак итеп һөрөлгән Низаметдин менән Мөнирәнең ҡыҙы Миңзифаны ла урап үтмәне. Һуғыш башланыр алдынан ғына ҡайҙалыр Себер тарафтарында шахтала эшләгән еренән әйләнеп ҡайтты Низаметдин һәм мунса дәүмәлендәге бәләкәй йортта йәшәй башланы - элекке "кулак йорто"н кире ҡайтарманылар. Әммә оҙаҡламай серегән-телгеләнгән үпкәһен йүткерә-ҡаҡыра үлеп тә ҡуйҙы. Әлеге сир, күрәһең, атаһынан йоғоп өлгөрҙө Миңзифаға. Йоҡто ла, ҡасан да булһа тыуасы сыйыр өсөн ҡанына үтеп кереп боҫто-йәшенде. Йәш, шаян, көләкәс, йырсы ҡыҙ, үҙенең ауырыясағын белмәй-аңламай, үҙе һымаҡ уҡ көр тауышлы һәм грамоталы Миңлебай Рәхмәтуллин тигән егеткә кейәүгә сығырға һәм малай табырға өлгөрҙө. Ҡырҡ икенсе йылда ҡара ҡағыҙ алғас, йөҙө ҡарайҙы, тамам һағышҡа батты һәм бына оло мөлдә ҡайҙалыр боҫоп ятҡан чахотка үҙен һиҙҙерҙе лә инде.

Тәүҙә төрлө үлән ҡайнатып эсте, алоэ, тәҙрә төбөндәге көршәктәрҙә үҫкән йөҙйәшәр гөлөн ашап дауаланырға тырышты. Әммә ярым ас йәшәү, ирен юғалтыу ҡайғыһы сирен ҡатмарлаштырҙы ғына. Ваҡыт үтә килә һағышы баҫыла ла төштө, тормошоноң берҙәнбер мәғәнәһе - улы, алты йәшлек Рифаты икәнен аңлап, бөтә булмышы менән уны тәрбиәләү-ҡарау хәстәренә сумды. Йылға аръяғына сығып, үлән сапты, уны ҡул арбаһында ташыны, колхоз эҫкертенән бер йөк һалам килтерҙе. Утын әҙерләү ҡыйын ине. Идараға килеп, рәйескә, алтмышына яҡынлаған, фронтҡа алынған Рамаҙан урынына ҡалған Юныс ҡартҡа өндәшергә мәжбүр булды: һуғышта һәләк булған фронтовик ғиләһенә, зинһар, ярҙам итегеҙ. "Ярҙам итербеҙ, ярҙам итергә тейешбеҙ, - тип яуапланы Юныс ҡарт. - Тик бына ун саҡрымдағы утынға кемде ебәрәйек икән һуң? Ҡыш етмәгән... Ярҙам итербеҙ, саҡ ҡына сабыр ит..."

Күптән түгел баҡыйлыҡҡа күскән Мәғрифә ҡарсыҡтың ихатаһында иҫке мунсаһы сереп ултыра ине. Шуны һүтеп, Миңзифаға ташынылар. Ике һаплы ҡул бысҡыһы менән Миңзифа кипкән нәҙек бүрәнәләрҙе яңғыҙы бысып, өйөп ҡуйҙы. Йәш картуфты июлдә уҡ ашай башланылар. Хәҙер Миңзифа, үҙе менән ни генә булһа ла, ҡышты йылыла һәм ул тиклем дә асыҡмай үткәрә алырбыҙ, тип тынысланды. Икмәк, әлбиттә, булмаясаҡ, әммә һөт, ҡатыҡ менән картуф үлергә бирмәйәсәк.

Бер көн уларға бригадир - һуғышҡа ярамаған Шәрифулла ҡарт килеп керҙе. Иҫәнләште лә, ҡыйыуһыҙ ғына һораны:

- Һеҙ нисек, асығаһығыҙмы?

- Аллаға шөкөр, алты ҡапсыҡ картуфыбыҙ сыҡты, һыйыр һауҙыра, икмәкте күргән юҡ.

- Нисек тә түҙегеҙ инде. Ана, гәзиттәрҙә, немецты Польшала туҡмайҙар, тип яҙалар. Германияға ла йыраҡ ҡалмай. Бәлки, Миңлебай ҙа ҡайтып килер әле...

- Ҡағыҙҙа "һәләк булды" тип яҙылғас, нисек ҡайтһын?

- Ҡағыҙ - ҡағыҙ инде ул. Янылышыуҙары ла ихтимал. Ана, скрипач Шәйәхмәткә лә ҡағыҙ килгәйне бит, ә ул Өфөлә госпиталдә ятҡан... - тине бригадир. Шунан йәнә ҡыйыуһыҙ ғына әйтте: - Миңзифа, ырҙынға сыға алмаҫһыңмы икән? Әтеү гел бала-саға бит. Ул балаларҙан ни фәтеүә? Хәҙер унда өйрә бешерәләр. Малайыңды ла ал, эсегеҙгә йылы аш инер.

Тәүге ҡырауҙарға тиклем Миңзифа ырҙында эшләне. Ашлыҡты сорттарға айырҙы, уны киптергескә ташыны, киптергестән - амбарҙарға. Сентябрҙә тамағынан ҡан китте һәм тамам хәлһеҙләнеп, түшәккә йығылды. Хәтерендә ҡалдырырға тырышҡандай, улының йөҙөнә текәлеп ятыуҙы ғәҙәт итте, мин үлгәс, балаҡайым яңғыҙы нисек кенә йәшәр икән, тип хафаланды һәм бер көн уға үҙенең ҡайғыһын әйтергә ҡыйыулыҡ итте.

- Әсәй, үлмә! Атайым ҡайтасаҡ!- тип ҡысҡырып уҡ ебәрҙе шунда Рифат.

- Һин, ҡайта, тигәс, эйе, ул мотлаҡ ҡайтасаҡ, - тине Миңзифа. - Һуғыштан һуң матур тормош килер, элеккесә күңелле йырҙар йырлаясаҡбыҙ. Атайың менән икәүләп йырлаған һымаҡ. Бесәнгә барабыҙ - йырлайбыҙ, ҡайтҡанда - йырлайбыҙ. Атайыңдың тауышы матур ине. Ҡунаҡта йырлаһа, ирҙәр илай торғайны. Бер ваҡыт хатта клубта ла йырланы. Өфөнән ниндәйҙер ағайҙар килеп, матур тауышлы кешеләрҙе эҙләп йөрөнө. Атайыңдың Өфөгә китеүе лә ихтимал ине, һуғыш һуҙылмаһа, китер ҙә ине...

Ауырыған көйө улына кейем йүнәтте Миңзифа. Иренең салбарын бәләкәсәйтеп текте, сарыҡтарын рәтләне, пальтоһы менән ботинкалары әлегә ярарлыҡ. Октябрҙә уҡ беренсе ҡар төшөп, һалҡындар килде, һыуытты. Миңзифа мейес башына менергә мәжбүр булды. Ноябрҙә инде ҡаты һыуыҡтар китте, йылға туңды, сана юлы төштө. Ҡышҡы һыуыҡтар етеүгә, утындары бөттө. Кипкән ағас тиҙ генә дөрләп янып бөтә, әммә йылыһы юҡ. Күптәр алыҫ урмандан утын ташыу мөмкинлеге булмағас, йылға аръяғындағы ваҡ ҡыуаҡлыҡтарҙы ҡырҡты ла ҡул санаһында өйөнә ташый башланы.

- Әсәй, мин дә йылға аръяғына кипкән ереккә барайым, - тине Рифат бер көн.

- Бар. Тик аяғыңа сабып ҡуйма балта менән, һаҡ ҡылан, - тине Миңзифа.

Йылға аръяғындағы бөтә нәмә - ерек, ҡайын ағастары, әлморон, ҡарағат, ҡамыраш ҡыуаҡтары Рифатҡа йәйге хәтирәләр буйынса таныш. Саҡ ҡына эскәрәк инһәң - баланлыҡ. Уны бешер-бешмәҫ көйө ҡоҙҙән уҡ йыйып алып бөткәндәр, ҡалғанын ҡоштар сүпләгән. Малай ҡарт муйылдың таныны. Йыуан олонло, тарбаҡ-тарбаҡ ботаҡлы ағас иҫән әле, ҡоромаған, йәйҙең йәйе мул бирә емештәрҙе. Малайҙар кинәнеп ашай ҙа ҡарайған тештәрен күрһәтеп йылмая. Хәҙер ул яланғас, бигүк матур ҙа түгел, япраҡтары ла, ап-аҡ сәскәләре лә юҡ. Ул яҙға тиклем йоҡоға талған. Малай ағасты тотоп ҡараны - тәне йылы һымаҡ ине. Туңған, бөрөшкән бер нисә емеше лә бар, тик бейектә, буй ерлек түгел. Йәй уның башына үрмәләп, ботаҡтарын һындыра ла торғайны. Әле аҫтараҡтарын өҙөп, ауыҙына ҡапты ла шытырҙатып сәйнәне - емештән йәй еҫе килде. Унан бер нисә бөртөк әлморон тапты, ҡарағат. Бөтәһе лә йәйгесә булһа икән ул, йәки Аллаһы Тәғәлә беҙҙе йәйләп, ботаҡтарға ҡоймаҡтар һәм eләк бәлештәре элеп сыҡһа икән ул...

Ҡоро ерек ағастарын ҡырҡып-һындырып, санаһына тейәп алып ҡайтты малай. Уйы менән үҙе өйҙә: бына ул ҡайтып инә, атаһы ла ҡайтҡан...

Бер көндән йәнә йылға баша сығып, теге көндә туктаған урынынан эскәрәк, шырлыҡ араһына инде. Һәм шунда йәйенке тажлы бейек ҡамышты күрҙе. Ҡурай! Унда көйҙәр уйнап була. Ауылдарында күпселектә гармунда уйнайҙар. Туйҙарҙа, байрамдарҙа Шәйәхмәт кенә скрипкала уйнай. Ҡурайҙа уйнай белгән берҙән-бер кеше лә Шәйәхмәт.

Рифат ҡурайҙы ҡырҡып алды ла өйөнә алып ҡайтты.

- Атайың иҫән булһа, һиңә гармун һатып алыр ине, - тине әсәһе.

- Ул иҫән, ул иҫән! - тип ҡысҡырҙы Рифат.

- Һин иҫән тигәс, тимәк, иҫәндер, ысынлап та, - тип яуапланы әсәһе тәрән көрһөнөп.

Шәйәхмәт йылға яҡлап тыҡрыҡтан өсөнсө өйҙә йәшәй. Ҡурайын тотоп, Рифат уға китте. Ҡатыны, Сәкинә апай, унан әсәһенең хәлен һораны.

- Ята, мейес башында, ауырый, - тип яуапланы малай һәм скрипачҡа өндәште. - Шәйәхмәт ағай, мине ҡурайҙа уйнарға өйрәт әле.

Шәйәхмәт кипкән ҡамышты әйләндереп-әйләндереп ҡараны ла:

- Был уйнамаясаҡ, - тине.

Рифаттың кәйефе төшөп, ишеккә боролғайны, "Туҡта, китмәй тор, - тигәнен ишетте. - Сәкинә, ҡурайҙы алып бир әле..."

- Бына был ысын ҡурай, - тине Шәйәхмәт. - Өфөлә госпиталдә ятҡанда Сибайҙан бер башҡорт бүләк иткәйне. Эсендәге яраһы ҡаты ине, бер ҙә бөтәшмәне. Ҡатыны уға өйөнән ошо ҡурайҙы алып килде һәм ул яралылар өсөн уйнай башланы. Яралы башҡорттар уны тыңлап илай торғайны... Мине лә өйрәтте. Сыҡҡанда: "Шәйәхмәт, мин һиңә үҙемдең яратҡан ҡурайымды бүләк итәм, бәлки, терелеп тә булмаҫ. Ә һин беҙҙең яратҡан оҙон көйҙәрҙе уйнарһың", - тине.

- Ә һин?

-Мин ҡурайсы түгел, скрипкасы. Скрипкала ҡурайға ҡарағанда яҡшыраҡ килеп сыға һымаҡ.

Шәйәхмәт ҡурайҙы тәмәкенән һарғайған тештәренә терәне лә уйнап та ебәрҙе. Рифат үҙен бейек тау түбәһенән ергә ҡараған кеүек тойҙо. Ер матур, әммә һағышлы һымаҡ һәм горизонт ягына киңәйгәндән-киңәйә барғандай...

- Хәҙер һин уйнап ҡара, - тине Шәйәхмәт оҙон көйҙө уйнап бөткәндән һуң. Ҡурайҙы еңе менән һөрттө, шунан Рифатҡа бирҙе. - Һул ҡулың менән аҫҡы яҡтан тот, бына шулай, бармағың менән бынау тишегеН ҡапла. Өҫкө тешәрең теүәлме? - Һәм ҡурайҙың өҫкө яғын нисек итеп тештәргә терәргә, бармаҡтар, ирендәр ярҙамында моңло көйҙө нисек сығарырға кәрәклеген аңлатты. - Һин башлы малай, килеп сығыр.

Ҡайтҡас, тупһанан уҡ:

- Әсәй, Шәйәхмәт ағай миңә ҡурайын бирҙе, уйнарға ла өйрәтте! - тип ҡысҡырҙы. - Ҡурай әлегә уйнамай. Мин өйрәнәм, әсәй. Шәйәхмәт ағай кеүек уйнаясаҡмын!

- Өйрән, улым, өйрән. Мин булмағанда атайың менән минең йырҙарҙы һинең ҡурайың йырлар...

- Мин булмаһам, тимә! - тип асыуланды Рифат. - Һин дә, атайым да була!

- Булабыҙ, улым, эйе, булабыҙ. Бергәләп бесәнгә йөрөрбөҙ, беҙ атайың менән йырларбыҙ, һин ҡурайында уйнарһың...

Көндөҙҙәрен Миңзифа мейес башынан төшә, картуф бешерә, яйлап йөрөп булһа ла өй эсендәге ваҡ-төйәк эштәрҙе башҡара. Картуфты икмәкһеҙ, ҡатыҡһыҙ ғына ашайҙар. Һыйырҙары һауҙыра, ләкин һөтө - сөйҙе агартырлыҡ ҡына. Көтөүгә йөрөтмәгәнлектән, ҡыҫыр ҡалды. Күршеләренеке кеүек, иткә ҡыуып алып китерҙәр, тип ҡурҡып ҡырға сығармағайнылар. Йылға аръяғында тегенән-бынан сапҡылаған ҡул арбаһы менән ташыған үләнде ашаттылар.

Әмир ӘМИНЕВ тәржемәһе.

(Дауамы бар).

ӘЙҘӘГЕҘ...

# РУБРИКАЛАРЫБЫҘ МЕНӘН ТАНЫШАЙЫҠ!



**Яңы йылға аяҡ баҫҡанда үткәндәрҙе иҫкә төшөрөү, мәғлүмәттәрҙе яңыртыу фарыҙ. Шулай тип уйлап, баҫмабыҙҙағы иң популяр рубрикаларыбыҙҙы барлап сыҡмаҡсы булдыҡ. Шулай итеп:**

***"Диалог", "Монолог"*** рубрикаларында зыялыларыбыҙ донъяуи хәлдәр, әҙәбиәт, мәҙәниәт, сәйәсәт, әҙәмиәт ҡанундары, ҡыҫҡаһы, төрлө темалар буйынса фекер алыша, бәхәс ҡора.

***"Заман башҡорто"*** тигән рубрика милләтебеҙҙең эшлекле, алдынғы ҡараштары менән айырылып торған сағыу ул һәм ҡыҙҙары, уларҙың йәшәйеш һәм хеҙмәт өлгөһө тураһында һөйләй.

Гәзиттең ***"Әйт, тиһәгеҙ..."*** рубрикаһы - гәзиттең йөҙө ул. Унда төрлө көнүҙәк темаларға гәзит уҡыусылар үҙ фекерен белдерә.

***"Тарихнамә", "Тарихи хәҡиҡәт", "Тарихыңды таныт", "Тарих ярсыҡтары", "Башҡорт ҡамусы"*** халҡыбыҙҙың тарихына бәйле рубрикалар.

Ил-йорт, халыҡ өсөн файҙалы эш эшләгән шәхестәрҙе маҡтағанда, ғәҙәттә, уны тәрбиәләгән, лайыҡлы итеп үҫтергән ата-әсәһен дә ҙурлап телгә алалар. ***"Кем балаһы, тиеп һорарҙар"*** рубрикаһында улар менән таныша һәм үҙегеҙ ҙә улар тураһында һөйләй алаһығыҙ.

***"Күңел мөһөрө", "Хәтеркитап"*** рубрикаларында бөйөк шәхестәребеҙ, яҡын кешеләребеҙ хаҡында күңелебеҙҙә генә йөрөгән матур хәтирәләр менән уртаҡлашыу мөмкинлеге бар.

Милләттең киләсәге - яҡшы атай һәм әсәй ҡулында. Ошо ябай ғына хәҡиҡәтте раҫлай ***"Ғаилә ҡоро"*** рубрикаһы. Унда Өфөлә генә түгел, республикабыҙҙа йәшәүсе һәм милләтебеҙгә бынамын тигән балалар үҫтереүсе ғаиләләр сығыш яһай.

Хәҙерге заманда телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе, йолаларыбыҙҙы һаҡлап ҡалыуҙың иң ҡулайлы юлы дәүләттең кесерәйтелгән варианты - ғаиләлә икәненә инанғанбыҙ инде. Ғаилә - ул айырым дәүләт, һәм унда бер кем дә туған телдә һөйләшеүҙе, халыҡ педагогикаһы нигеҙендә балаларҙы тәрбиәләүҙе тыймай. ***"Дәүләт - беҙ ул"*** тигән рубрикалағы әңгәмәләр ошоно дәлилләй ҙә инде.

***"Ир-азамат"*** рубрикаһына ир-ат өсөн фәһемле, файҙалы һәм ҡыҙыҡлы булған хәл-ваҡиғалар, кәңәштәр, ғибрәттәр һәм башҡалар хаҡында яҙып ебәрә алаһығыҙ.

***"Аһ, ҡыҙ-ҡатын"*** рубрикаһында милләт әсәләре гүзәл заттарға хас темалар - матурлыҡ, ғаиләлә ҡатын-ҡыҙҙың бурыстары һәм вазифалары хаҡында ғына түгел, ә көнүҙәк проблемалар хаҡында ла фекер алыша.

Йолалар менән бер рәттән, әҙәбиәт, мәҙәниәт менән сәнғәт тә милләтте һаҡлай. ***"Әҙип һүҙе", "Яҙыусыға өс һорау"*** рубрикаларында хәҙерге заман яҙыусылары сығыш яһаһа, театр һәм кино артистары, режиссерҙар, рәссамдар менән әңгәмәләр ***"Ижадхана"*** рубрикаһында баҫыла.

***"Ҡушамат"*** - һәр кемдең исеме менән йәнәш ниндәйҙер ҡушаматы ла бар. Исемде боҙоп әйтеүҙән тыш, тотош ғаиләгә, тоҡомға ҡушылған ҡушаматтар ҙа була, улары иһә ниндәйҙер тарихҡа бәйле булыусан. Күптән түгел асылған был рубриканы ла гәзит уҡыусылар үҙ итер һәм хаттар яҙып ебәрер, тип ышанабыҙ.

Тормошта төрлө ҡыҙыҡ хәлдәр булып тора. ***"Ҡыҙыҡ мәлдәр"*** рубрикаһында ошондай ваҡиғалар менән уртаҡлаша ала уҡыусылар.

Ә ***"Алдар менән Ерәнсә"*** рубрикаһы иһә башҡорт юморы ниндәй булырға тейешлеген күрһәтеп тора. Йор һүҙле Алдар менән Ерәнсәләр бөгөн дә арабыҙҙа йәшәй һәм, әйҙәгеҙ, уларҙың халыҡ араһында лаҡапҡа әйләнеп бөткән шаярыуҙары, ҡылыҡтары менән уртаҡлашайыҡ.

Халҡыбыҙ ҡул эшенә бик маһир. Боронғо кәсептәрҙе тергеҙеүселәр ҙә күп бөгөн. Ағасҡа һырлап, семәрләп эшләйһегеҙме, баҡсасылыҡ менән шөғөлләнәһегеҙме, шәл бәйләйһегеҙме - ***"Көн күргән шөғөл"*** рубрикаһында үҙ ғилем-тәжрибәгеҙҙе башҡаларға ла өйрәтегеҙ.

***"Тереклек мәктәбе"*** - көтөлмәгән шарттарҙа, әйтәйек, урманда аҙашҡанда, нисек тереклек итергә һәм үҙеңде һаҡлап ҡалырға өйрәтә.

Шундай милләтбеҙ: ҡысҡырып әрләшеүҙе, етешһеҙлектәрҙе төртөп күрһәтеүҙе, бит йыртыуҙы ғәҙәт итмәгәнбеҙ, шөкөр. Хатта өлкәндәр ҙә кинәйәләп, ишаралап ҡына тәрбиәләй йәштәрҙе. Әммә тормош булғас, ҡайһы берҙә ниндәйҙер ғәҙелһеҙлектәргә, милләтебеҙҙе биҙәмәгән күренештәргә күҙ йомоп ҡарап та булмай. ***"Ишара", "Кинәйә", "Килешмәйем", "Тураһын әйткәндә"*** рубрикаларында үҙебеҙсә ишаралап ҡына күрһәтә алаһығыҙ улар тураһында һеҙ ҙә.

Өфө - һәр башҡорт өсөн баш йорт. Өфө хәлдәре, унда барған ваҡиғалар, яңылыҡтар ауылдарҙа йәшәүсе милләттәштәребеҙ өсөн дә ҡыҙыҡ. ***"Өфө ғәҙәттәре күркәм"*** һәм ***"Өфө ғәҙәттәре сәйер"*** рубрикаларында Өфөнөң күркәм һәм унын өсөн килешеп бөтмәгән күренештәр сағылыш таба. ***"Баш ҡала ҡунаҡтары"***нда Өфөгә ситтән килгән ҡунаҡтар уның тураһында һүҙ йөрөтә. ***"Баш ҡалам"*** рубрикаһында һәр кем үҙенең Өфөһө тураһында һөйләй ала.

"Киске Өфө" гәзите донъя күрә башлағандан алып бөгөнгәсә уға тоғро булған дуҫтарыбыҙ ҙа бихисап. Йылдан-йыл гәзиттең таралыу географияһы киңәйә, дуҫтарҙың яңылары өҫтәлә тора. Уларҙың гәзит тураһындағы фекерҙәре, теләктәре, иҫкәрмәләре ***"Уҡыусы фекере", "Беҙ "Киске Өфө"нө уҡыйбыҙ"*** рубрикаларында баҫыла.

***"Әсәйем лөғәте", "Атың кем?", "Ағинәй һүҙе", "Халыҡ дауаһы"*** рубрикаларына ла уҡыусыларыбыҙ әүҙем яҙыша. Үҙегеҙҙең төбәккә хас һөйләшеүҙәрҙе, өләсәй-әсәйҙәрегеҙ ҡулланған дауаланыу ысулдарын башҡалар менән дә уртаҡлашһағыҙсы?

***"Йөҙ башҡорт китабы"*** акцияһы, ***"Әҙәбиәт һәм әҙиптәр"*** викторинаһы һәм, әлбиттә, сканворд, башватҡыстар ҙа күптән уҡыусы һөйөүен яулаған.

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ЕҢЕҮСЕ БУЛАЙЫҠ!

Яратам мин ошо 30-40 градуслыҡ ҡышҡы һалҡындарҙы! Быныһын да Тәбиғәттең бер һынауы итеп ҡабул итәм һәм... был һынауҙа ла үҙемде еңеүсе итеп хис итергә тырышам. Ә бит шул һынауҙы ҡабул итергә әҙер булмағандар йылы мөйөшөндә телейәшниккә текләп ултыра. Урамға үҙ йомошо менән сыҡҡандар иһә бөрөшөп ҡатып, йүгерә-атлай үтеп китә. Ә мин улар йөҙөнә, йылмайып, тантаналы кәйеф менән бағам. Эш минең йылы итеп кейенеүемдә генә түгел. Эш ошо Һалҡын батыр алдында үҙемде Еңеүсе итеп тойоуымда!

Әҙәм балаһы, эйе, һәр саҡ еңеүсе булырға ынтыла. Ә Тәбиғәт беҙгә ошо тойғоно яулап алыр һынауҙарын ебәреп кенә тора. Һалҡындар ҙа шул уҡ һынау. Һине еңел генә еңеүгә өлгәштерер һынау. Һәр хәлдә, әллә ни көс һалырға ла кәрәкмәй уны үтер өсөн: сынығырға, донъяға яратып бағырға, кейем яғаһы аҫтына боҫорға түгел, ә башты юғары тоторға һәм, әлбиттә, тейешенсә кейенергә! Бына бит, Һалҡын батыр минең ул килтергән сафлыҡҡа, аҡлыҡҡа һоҡланыуымды, тантана итеүемде һиҙеп, сигенде. Ул инде хәҙер бөршәйеп ҡатҡандар тирәһендә йүгергеләй башланы...

Һәр аҙымда, һәр осраҡта, һәр ваҡиғала үҙеңде Еңеүсе итеп тойорға кәрәк шул. Хатта ҡайһылыр осраҡта, еңеүгә өлгәшә алмағанда ла, һине еңеүселәр рухы ташламаһын! Еңеүсе булайыҡ, еңеүселәр буйһонмай, еңеүселәр башҡаларҙы үҙе менән иҫәпләшергә мәжбүр итә.

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# КИТАП ТОТҠАНДЫҢ - КҮҢЕЛЕ ЯҠШЫ

**Уҡыу - һәр заманда ла кешенең төп рухи ихтыяждарының иң мөһиме булды һәм булып ҡала, тип иҫәпләйем. Әҙәби әҫәрме, тарихи мемуарҙар, иҫтәлектәрме, фәнни-популяр хеҙмәттәрме, йә булмаһа, беҙгә көндәлек яңылыҡтар килтереүсе матбуғат баҫмалары булһынмы - уларҙы уҡыусы һәр хәлдә буш күңел, битараф әҙәм түгел, тимәк.**

Шуға ла мин, күп йылдар инде китапхանала эшләгән кеше булараҡ, китап йортона килеп ингән һәр кемде - өлкән кешеме ул, бала-сағамы - айырыуса иғтибар менән ҡаршылайым, бында юл һәм ваҡыт тапҡандары өсөн ысын күңелдән ҡыуанам, ҡулымдан килгәнсә ярҙам итергә әҙер торам. Китап уҡырға килгән икән, тимәк, ул шундай ихтирамға лайыҡ кеше, минеңсә. Был йәһәттән кемдәндер, ҡасандыр ишеткән бер хәл иҫкә төшә. Шулай бер кеше театрҙанмы, ҡунаҡтанмылыр һуңлап ҡына төн уртаһында ҡурҡа-ҡурҡа ҡайтып килә икән. Бер ҡараңғы урамдан үтергә йөрьәт итмәйерәк аптыранып торғанда, ҡултығына гәзит менән китап ҡыҫтырып алған бер ирҙе шәйләп ҡала ла, йүгерә-атлай уның артынан эйәрә. "Гәзит-китап тотҡан кеше, тимәк, ҡурҡыныс әҙәм түгел, уға ышанырға мөмкиндер", - тигән уй була башында. Шуның кеүек, уҡыған кешегә эйәрәйек беҙ ҙә тормош юлыбыҙҙа - аҙашмабыҙ, улар күңелендә мотлаҡ изгелек шытымдары була.

Беҙҙең Сибай ҡалаһында унлаған китапхана булып, шуларҙың береһе тыуған яҡты өйрәнеү буйынса йүнәлеш алған. Әйтеп китеүемсә, ниндәй генә заман булмаһын, беҙҙә китапханалар буш тормай, шуныһы ҡыуаныслы. Әлбиттә, уҡыу залдары элекке замандарҙағы кеүек шығырым тулы булмаһа ла, балалар ҙа, ололар ҙа беҙгә юлды һыуытмай. Махсуслаштырылған тематика буйынса эшләһәк тә, китапханала бөтә төр әҙәбиәт һәм мәғлүмәт булырға тейеш, тигән ҡараштабыҙ. Уҡыусыларыбыҙ ҙа быны яҡшы белә. Өлкән быуын вәкилдәре нигеҙҙә башҡорт классикаһын тәшкил иткән әҫәрҙәрҙе ҡайта-ҡайта һорап ала: Зәйнәб Биишева, Һәҙиә Дәүләтшина, Ғәли Ибраһимов, Ноғман Мусин, Мостай Кәрим, Рәми Ғарипов һәм башҡа шундай билдәле яҙыусыларыбыҙ китаптарын уҡыйҙар. Беҙҙең китапхана янында матур ғына сквер урынлашҡан. Унда йыш ҡына йәш әсәйҙәр сабыйҙары менән йөрөргә килә. Шул саҡ улар беҙгә инеп, кескәйҙәренә уҡырға башҡортса балалар китаптары һорай. Үкенескә, беҙҙә тәнәйҙәр өсөн матур, сағыу итеп биҙәлгән, ҡаты тышлы башҡорт халыҡ әкиәттәре, яҙыусылар әҫәрҙәре юҡ кимәлендә - шуныһы эсте бошора. Был турала бер мин генә түгел, күптәрҙең әйткәне бар, тик хәл һис үҙгәрмәй... Дөрөҫ, хәҙер күптәр, бигерәк тә уҡыусы балалар, интернеттан айырыла алмай, ләкин ҡыҙыҡһына ҡалһаң, улар бер ҙә генә әҙәби әҫәр уҡып ултырмай икән шул компьютерҙарынан. Видеороликтар, клип һәм сериалдар ҡарай, уйындар уйнай һ.б. Күп әҙәбиәт, шул иҫәптән Башҡортостан тарихы, мәҙәниәте һәм әҙәбиәте буйынса электрон варианттар интернетҡа инеп тә бөтмәгән. Шуға ла уҡыусылар олимпиадаларға, имтиханға әҙерләнгәндә, инша, курс эштәре, докладтар яҙғанда ярҙам һорап, беҙгә килә лә инде. Өҫтәүенә, республикабыҙҙа сыҡҡан бөтөн матбуғат баҫмаларын алдырабыҙ. Уларҙан да бик күп өҫтәмә мәғлүмәт тупларға була. Мәҫәлән, "Киске Өфө", "Йәшлек", "Башҡортостан" гәзиттәрендә, "Ағиҙел", "Ватандаш", "Шоңҡар" журналдарында халҡыбыҙ тарихы, мәҙәниәте, йолалары буйынса ҡиммәтле материалдар баҫыла. Китапхана ишектәре һәр кем өсөн асыҡ - күңелдәрегеҙ ҙә белемгә, рухи хазиналарыбыҙға, әҙәби мираҫыбыҙға асыҡ булһын ине. Әйҙәгеҙ, уҡыйыҡ, туғандар -уҡыған кеше хур булмаҫ. Бая әйткәнемсә, ҡулына китап тотҡан әҙәмдә яҡшылыҡҡа өмөт бар!

**Рәйсә ҠУНАЕВА,**
**Сибай ҡалаһының тыуған яҡты өйрәнеү буйынса модель китапханаһы мөдире.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙОҠО - ЯҠШЫ ДАУА

■ Ҡыш тире нык кибә, шуға ла өҫтәмә иғтибар талап итә. Дөрөҫ туҡланыу был миҙгелдә айырыуса кәрәк. Кишер С, А витаминына бай. А витамины һырҙар барлыҡҡа килеүҙе кисектереп тора. Әфлисун да составында С витаминын күп булыу менән дан тота, ул тирене һаҡлай. Авокадо - иң файҙары ризыҡ иҫәпләнә. Унда Е витамины бар, ә был витамин тире матурлығы өсөн бик кәрәк. Майлы балыҡ омега-3 майлы кислоталары өсөн файҙалы. Был файҙалы майҙар тирене кибеүҙән һаҡлай. Йәшел сәй яратыусыларҙың тиреһе йәш килеш ҡала, сөнки ул йәшәртеү һәләтенә эйә.

■ Ә бына күҙҙәрҙең сәләмәтлеге өсөн йышыраҡ, хатта көн һайын брокколи ашағыҙ, тип кәңәш итә Америка ғалимдары. Был йәшелсәләге индол-3-карбинол берләшмәһе организмды токсиндарҙан таҙарта. Йәш өлкәнәйә барыу менән арилуглеводород рецепторы эше һүлпәнәйә, күҙҙәр насарыраҡ күрә башлай, төрлө специфик ауырыуҙар барлыҡҡа килә. Брокколи составындағы берләшмә ошо рецепторҙарҙы әүҙемләштереп ебәрә лә инде. Брокколи составына аҡһымдар, майҙар, күҙәнәклек, селен, магний, калий, кальций, фосфор, тимер, цинк кеүек төрлө минераль берләшмәләр, С, РР, Е, К, U, бета-каротин витаминдары инә. С витамины әфлисунға ҡарағанда ике тапҡыр күберәк. U витамины сей яралрҙа булдырмай. Был витамин тағы ла спаржала бар.

■ "Әсәһенең улы", "атаһының ҡыҙы" тигәнде йыш ишеткәнебеҙ бар. Шуға ла ғалимдар бала кемдең генын күберәк үҙләштереүен асыҡларға булған. Беҙ барыбыҙ ҙа гендарҙы атайҙан да, әсәйҙән дә тигеҙ күләмдә алабыҙ, әммә атайҙың ДНК-ларын күберәк ҡулланабыҙ, имеш. Әгәр ҙә "сәләмәт булмаған" ген әсәйҙән күсә икән, ул үҙен әүҙем күрһәтмәүе лә ихтимал. Ә бына атай яғынан күскән төрлө сирҙәр өҫкә ҡалҡып сығыуы бар.

■ Ҡытайҙа ҡыҙыҡлы тикшеренеү үткәргәндәр. Унда 120 ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан. Уларҙы тәҙрәһе булмаған бүлмәгә бикләгәндәр. Һынау мәлендә тәүҙә бүлмәнең утын һүндергәндәр, аҙаҡтан яндырғандар. Шулай уҡ уларға ҡурҡыныс һүрәттәр күрһәткәндәр һәм төрлө тауыштар тыңлатҡандар. Гүзәл заттарҙың ҡайһы осраҡта нығыраҡ ҡурҡыуын пульс йышлығы һәм тир бүленеү менән билдәләгәндәр. Асыҡланыуынса, ҡатын-ҡыҙҙар төндә бүлмәлә хатта ут янып торғанда ла нығыраҡ ҡурҡа икән. Төндә кеше хәүефле мәл тип ҡабул итә һәм шуға ла һиҙгерлек һәм реакция көсәйә.

■ Көслө стресс кисергәндән һуң, кеше шунда уҡ ятып йоҡлаһа, ул уны еңелерәк кисерәсәк. АҠШ-ның Массачусетс университетында үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, бындай ваҡытта иң яҡшы һәм тәьҫирле дарыу булып йоҡо тора. Әгәр ҙә кеше юлда берәй хәл-ваҡиғаның шаһиты булған йәки үҙе аварияға эләккән икән, йоҡлап алғандан һуң уның эмоциональ торошо күпкә яҡшырасаҡ.

■ Калифорния университеты ғалимдары асыҡлауынса, көнөнә өс сынаяҡ сәй эсеү оло йәштә лә хәтерҙе яҡшы һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итәсәк. Улар тиҫтә йылдар буйына алып барылған 6 төрлө тикшеренеүҙәрҙе берләштереп, ошондай фекергә килгән. Сәйҙең файҙаһы шунда - уның составындағы тиамин ҡартайған кешеләрҙе Альцгеймер ауырыуҙарынан һаҡлай. Көн һайын сәй эсеүселәр аҡыл ҡеүәһен дә һаҡлап ҡала ала, хәтер менән бәйле проблемалар уларҙа өс тапҡырға һирәгерәк осрай.

*ЙӘНӘШӘБЕҘҘӘ*

# ҺАҢҒЫРАУҒА СӘЛӘМ БИРҺӘҢ...



**Арабыҙҙа ҡолаҡтары насар ишеткән кешеләр йыш ҡына осрай. Һаңғырауҙарҙың күпселеге, әлбиттә, оло йәштәге кешеләр араһында. Пенсия йәшендәге, хатта унан да алдараҡ ишетеү һәләте насарайған атай-әсәйҙәребеҙ, инәй-олатайҙарыбыҙҙың уй-кисерештәре хаҡында уйланғанығыҙ бармы икән? Тыумыштан тома һаңғырау булған, тауыштың ни икәнен бер ҡасан да тойоп ҡарамаған (һөйләшә лә белмәгән) кешеләрҙең психологияһын өйрәнеүселәр, әлбиттә, бар. Улар өсөн махсус уҡыу йорттары эшләп килә, уларҙы үҙҙәренсә һөйләшергә лә өйрәтәләр. Әммә ҡасандыр яҡшы ишетеп йөрөгән кеше лә кинәт һаңғыраулана һәм ул кешенең үҙенә хас һәр төрлө кисерештәре булыуын үҙемдә татып беләм хәҙер. Элекке һөнәрем - ЛОР табип булыуҙан да файҙаланып, һаңғырау кешеләрҙең бәғзе бер "каприз"дарын дөрөҫ аңлаһындар өсөн, үҙемдең уйҙарым менән бүлешергә ниәтем.**

Һүҙҙе башлыса мәжлес, йыйын тирәһендә йөрөтәсәкмен, сөнки, кеше үҙенең һаңғыраулығын тап ана шул мәлдә, йәғни, башҡалар менән аралашыу ваҡытында айырыуса нык тойоусан. Тап шул саҡта кеше үҙен бөтәндәр араһында бер аҙ камил булмаған һымаҡ итеп кисерә башлай. Ҡунаҡ-мәжлестәрҙә, йәиһә башҡа йыйындарҙа, кешеләрҙең үҙ-ара ниҙер һөйләшеп, көлөшөүҙәрен ҡарап ултырған күп кенә һаңғырауҙарҙың "мине һөйләйҙәр", тип уйлауы, хатта шуның өсөн башҡаларға үпкәләүе хаҡында ла ишеткәләйем. Әммә мин, үҙем нык ҡына һаңғырау булыуыма ҡарамаҫтан, ошондай хәлгә объектив күҙлектән сығып баҡырға һәм тирә-йүндәгеләрҙең нисек һәм кемгә ҡарап көлөшөүҙәренә әллә ни иғтибар итмәҫкә тырышам. Тик бөтә кешеләр ҙә нәҡ минең һымаҡ уйламай бит әле. Һаңғырау кешегә, ысынлап та, тап ана шулай тойола. Шунлыҡтан, иң тәүге кәңәшемде һаңғырауҙарға бирмәк булам. Арабыҙҙа һаңғырау кеше бар бит, тип кенә башҡаларҙың һөйләшмәй һәм көлөшмәй ултырыуы мөмкин түгел. Шуға күрә, нисек кенә көлөшмәһендәр, кешеләр бер ваҡытта ла һине һөйләмәй, уларҙың - үҙ хәстәре, тип уйлау кәрәк һәм быға һис тә иғтибар итеү ярамай. Һинең һаңғыраулаһыуыңда башҡалар ғәйепле түгел бит, шуның өсөн дә бөтәндәргә үпкәләү - ғәҙел түгел.

Әммә, ҡәҙерле яҡташтарым, бына шундай хәлгә тарыған яҡындарыбыҙҙы, атай-әсәйҙәребеҙҙе, олатайҙарыбыҙҙы дөрөҫ аңларға тырышырға тейешбеҙ. "Һаңғырауға сәләм бирһәң - "атаң башы!" тип әйтер", тигән уйынлы-ысынлы бер әйтем дә йөрөй халыҡта. Хәс тә ялҡау, алдаҡсы, маҡтансыҡ, ҡурҡаҡ, йәиһә тағы ниндәйҙер бәғзе бер кешеләр хаҡында һүҙ йөрөткән кеүек үк, ҡолаҡҡа зәғиф кешенән мыҫҡыл иткән һымағыраҡ яңғырай был әйтем. "Һуҡыр күп күрер, сатан күп йөрөр" тигән әйтем дә бар. Быны ла сатан һәм һуҡыр кешләрҙең әллә ни оҡшатып етмәүҙәре мөмкин. Минең бөгөнгө һүҙем фәҡәт һаңғырауҙар хаҡында ғына. Шулай итеп, ҡайһы бер кешеләрҙең үҙҙәренә булған мөнәсәбәтен һаңғырауҙар бик үк адекват формала ҡабул итмәүе мөмкин. Был, бер яҡтан, һаңғырау кешенең субъектив тойолаңына бәйле булһа, икенсе яҡтан, бәғзе берәүҙәрҙең, ысынлап та, һаңғырауҙарға ҡарата уларҙы һанға һуҡмаған һымағыраҡ мөғәмәләлә булыуы мөмкин. Мәсәлән, кешеләрҙең ниҙер һөйләшеп көлөшөп алғанын күреп, башҡалар араһында ултырған һаңғырау кеше янындағы берәйһенән нимә тураһында һүҙ барғанын һораша башлай (был - тәбиғи). Бына ошо саҡта, уның күршеһе ҡул һелтәп кенә ҡуя, иң яҡшы осраҡта ла "Һиңә әйтмәйҙәр", тип кенә ебәрә. Бындай яуап һинең һаңғырау яҡыныңды ниндәйҙер кимәлдә рәнйетеүе мөмкин. Ҡасандыр башҡалар кеүек үк тулыһынса ишетеп йөрөгән, үҙен әле лә нормаль тип һанаған был кешене ундай яуап, әлбиттә, мөрхәтһендермәй. Һаңғырау кеше, ғәҙәттә, һәр нәмәгә ҡыҫылып ултырыусан да булмай, әммә янында ултырған күршеһе уның һорауына бер-ике һүҙ менән генә булһа ла әҙәмсә яуап биргән хәлдә ул ифрат та ҡәнәғәт булып ҡалыр.

Хәҙер барыбыҙ ҙа урыҫсаға шәп. Әйтәйек, ун-ун бишләгән башҡорт араһына башҡортса бөтөнләй аңламаған бер урыҫ килеп эләкте, ти. Шул саҡ, ана шул икенсе милләт кешеһенә ҡарата оло хөрмәт тойоһонан, барыбыҙ ҙа урыҫса һөйләшә башлайбыҙ (хатта йырҙарыбыҙ һәм таҡмаҡтарыбыҙ ҙа урыҫсаға әйләнә). Арабыҙҙа урыҫ телен насарыраҡ белгәндәр булып, кемдер берәү "яңылыш" башҡортса әйтеп ебәрҙе икән, урыҫ кешеһенең янында ултырған берәү, һис кисекмәҫтән, уның тәржемәсеһе булып китә. Был, әлбиттә, насар түгел. Туғандаш халыҡтарҙы барыбыҙ ҙа хөрмәт итергә бурыслыбыҙ. Әммә күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ: һеҙҙең һаңғырау яҡынығыҙ тап ана шул башҡортса белмәгән урыҫ кешеһе хәлендә! Тик уның янында тәржемәсеһе юҡ һәм бөтә кешенең дә ул ишетерлек итеп һөйләшеүе мөмкин түгел...

Ишетеүсе кешеләргә тағы бер кәңәшем бар. Йыйындарҙа ултырғанда һаңғырау яҡынығыҙға берике мәртәбә булһа ла һөйләргә һүҙ бирегеҙ. "Йә әле, фәлән ағай (олатай, апай, инәй), ана шул хаҡта беҙгә һөйләп ебәр", тип, берәй нәмә әйтеүегеҙ уны ҡыйыҡһытмаҫ, киреһенсә, һеҙҙең уға ҡарата иғтибарығыҙҙы, яҡшы ҡарашығыҙҙы, хөрмәтегеҙҙе генә сағылдырыр.

Ситтән ҡарағанда, һаңғырау кеше, ысынлап та, аңра һымаҡ тойола. Уларҙың ҡабат-ҡабат һорашыуы бәғзеләрҙең йәненә лә тейә башлай... Шунлыҡтан, ҡайһы берәүҙәр һаңғырау кешегә саманан тыш ҡысҡырып, йәиһә, һантый кешегә өндәшкән һымағыраҡ тонда яуап биреүе мөмкин. Йыш ҡына һаңғырау кеше, берәй нәмәне икенсе төрлө ишетеп, "әҙәм көлкөһөнә" лә ҡалғылай. Шул саҡта уның ҡабатлап һорауы ни тиклем көлкөлө тойолһа ла, оло сабырлыҡ менән, етди тонда уға тейешенсә нәмәне аңлатып бирергә тырышырға кәрәк. Сөнки, яңылыш ишеткән кешенең: "Шулай-шулай, тинеңме?"- тигән һорауына бәғзеләрҙең, уны төҙәтеп әйтергә йыбанып, "эйе, эйе, шулай", тип, уны һанламағанраҡ тонда яуап биреүе тағы башҡаларҙың сыр-сыу килеп көлөүенә сәбәп була. Ә шул мәл һеҙҙең был яҡынығыҙҙың, йомшаҡ ҡына итеп әйткәндә, нишләптер, бер ҙә көлкөһө килмәй... Шундай саҡта, әгәр һеҙ уның йөҙөнә иғтибар итһәгеҙ, һеҙгә бер ни ҙә өндәшмәгән хәлдә лә, уның ауыҙы бер аҙ йылмайған да һымаҡ итер, әммә күҙҙәре бер ни ҙә аңламаған, нимәгәлер рәнйегән бала кешенең ҡарашын хәтерләткәндәй булыр...

Һаңғырау кеше бер әйткәндә ишетмәне икән, икенсегә ҡабатлағанда, шул һүҙегеҙҙе башҡасараҡ итеп, ауыҙығыҙҙы театр артистары һымағыраҡ асып, асығыраҡ әйтергә тырышырға (тик ҡысҡырып түгел). Һаңғырау, ғәҙәттә, аңғәмәсеһенең ауыҙына ҡараусан. Сөнки уға ирендәргә ҡарап һүҙҙәрҙе асыҡлауы еңелерәк. Әйткәндәй, актерҙар һәм педагогтарҙы һаңғырау кеше яҡшыраҡ ишетә. Йә булмаһа, шул уҡ һүҙҙе урыҫ теленә әйләндереп ҡабатлап әйтеп ебәрергә була. Шуға ҡағылышлы минең менән мәҙәк хәл дә булғылай ҡайһы берҙә. Ейәнем менән телефондан һөйләшеп торғанда уның ҡайһы бер һүҙҙәрен, йәиһә, һөйләмен ишетмәһәм: "Улым, шул һүҙенде урыҫса әйтеп ҡара әле", - тигән булам, аптырағас. "Картатай, мин былай ҙа урыҫса әйтеп торам да баһа!" "Әй, улай булғас, башҡортса әйт..." - бына шулай формала һөйләшеп, бер-беребеҙҙе аңлап та алабыҙ бәғзе ваҡыт.

Ҡайһы бер һаңғырауҙар берәй йыйынға барһа, үҙҙәренең ана шул етешһеҙлегенән оялып, мәжлестең башынан аҙағына тиклем һис бер һүҙ һөйләшмәй генә ашап-эсә һәм өйөнә ҡайтып китә. Ҡолаҡтары насар ишетеүгә ҡарамаҫтан, аҡылдары әлегә камил булған бындай кешеләргә иғтибар бүлеүҙе һис онотоу ярамай. Тыштан белгертергә тырышмаһалар ҙа, кешеләрҙең бындай категорияны, ысынлап та, бик үпкәләүсән булып китә.

Йылдар буйы һәр төрлө яңы мәғлүмәт ала алмау сәбәпле, һаңғырау кеше, ғәҙәттә, бер нәмәне ҡабат-ҡабат һөйләүсән. Шул саҡта ла ундай кешегә "Һин быны миңә мәртәбә һөйләнең

***✓ Был идея күңелегеҙгә ятмаймы? Әгәр ыңғай яуап бирһәгеҙ, был бары тик үҙгәрештәрҙән ҡурҡыуығыҙҙы ғына күрһәтә. Үҙгәрештәрҙән ҡурҡһағыҙ икән, тимәк, үҙгәрештәр тәү сираттағы ихтыяж булырға тейеш!***



бит", тип бүлдереү ярамай. Оло кеше быңдай нәмәләргә ифрат та ныҡ рәнйей һәм әкренләп үҙенә йомола бара. Туғандар, йәиһә таныштар йыйылышҡан һәр төрлө сараларға ла йөрөүҙән баш тарта башлай күп һаңғырауҙар. Сөнки быңдай йыйындарҙы ул ысынлап та бик ауыр кисереүсән.

Ҡайсаҡ мәжлестә ултырған һаңғырау кешегә башҡалар ҙа уның кеүек һөйләшмәй генә, тик ашап ултырған һымаҡ тойола. Ниндәйҙер бер мөһим нәмә иҫенә төшөп, ундай кеше кинәт кенә һүҙ башлауы мөмкин. Әммә шул саҡ уға барыһы ла ауыҙ тирәһенә бармаҡтарын ҡуйып, "Тс-с-с!" тип ишара яһай... "Әй, әттәгенәһе!" Арала нормаль кешеләрҙең береһе ниҙер һөйләп йәки йырлап ултырған икән дә баһа!.. Һаңғырау тағы бер һүҙ ҙә әйтә алманы, хатта үҙе уңайһыҙ хәлдә ҡалды. Быңа шундай осраҡтарҙа теге кешенең "важный" телмәре бөтөү менән һаңғырау кешегә лә һүҙ биреү кәрәк шулай ҙа. "Йә, фәлән ағай, нимә әйтергә иткәйнең?" тигән һымағыраҡ итеп. Ул кеше, әгәр онотоп ҡуймаған булһа, әлбиттә, һеҙгә үҙенең бая әйтергә теләгән һүҙҙәрен әйтер.

Һаңғырау кешеләр үҙҙәре саманан тыш ҡысҡырып һөйләшеүсән дә була. Был да уларҙың әҙәпһеҙлеге арҡаһында түгел. Ундай кеше хатта үҙенең тауышын да бик насар ишетә, шунлыҡтан, ҡысҡырып һөйләүе уның үҙ ихтыярынан тыш килеп сыға. Быңа шул хаҡта ла башҡаларҙың белеүе зарур. Яңылыш ишетеү сәбәпле берәй көлкөлө хәл килеп тыуһа, уға күрһәтмәй генә көлөү, әлбиттә, мөмкин түгел. Әммә шул ваҡытта уның янына яҡын ғына килеп, йыбанмай ғына уға ошо хәлдең айышына төшөндөрөп биреү кәрәк. "Нишләп көлөшәһегеҙ?" тигән һорауын яуапһыҙ ҡалдырыуҙы һаңғырау кеше үҙен кәмһетеп ҡарайҙар тиеп ҡабул итә.

Үҙ туғандарым араһында булған саҡта, юғарыла һанап кителгән проблемалар менән мин үҙем, шәхсән, әллә ни осрашҡаным юҡ, әлхәмдүлиллаһ. Сөнки мин һәр мәжлес башында иң тәүҙә үҙем уларға телмәр һөйләп алам. Шунда уҡ үҙемдең һаңғырау икәнлегемде тағы бер мәртәбә иҫтәренә төшөрәм һәм үтенестәремде алдан уҡ әйтеп ҡуям. "...Ә хәҙер инде, ҡәҙерле туғандар, һеҙ, яҡшы ишеткән кешеләр, үҙ-ара һөйләшегеҙ, көлөшөгөҙ, миңә әллә ни иғтибар итмәһәгеҙ ҙә була. Бик тә бик миңә әйтер һүҙегеҙ булһа, минең "тәржемәсем" - хәләл ефетем аша өндәшегеҙ..." Туғандарым минең быңа ошо үҙенсәлегемә әллә ҡасан уҡ күнегеп бөткән.

Ҡолаҡтарҙың насар ишетеүен ике төргә бүлеү мөмкин. Беренсеһе - ишетеү һәләтлегенең ваҡытлыса насарайыуы. Уның сәбәптәре бихисап. Сайыр пробкаһы, евстахиит (тымау ваҡытында), урта отит, ишетеү нервыларының зарарланыуы (кохлеарный неврит) һәм башҡалар. Ваҡытында табип-отоларинголог тейешле дауалау саралары үткәрһә, быңдай сирҙәрҙән һуң, ғәҙәттә, ҡолаҡ ҡабаттан ишетә башлай. Шуның өсөн дә ошондай осраҡтарҙа табипҡа барыуҙы һис кисектермәҫкә кәрәк! Айырыуса, "кохлеарный неврит" тип аталған бик етди сирҙе уның иң башында, йәғни тәүге сәғәттәрендә үк дауалап өлгөрөп ҡалыу - мотлаҡ (ғәҙәттә, ниндәйҙер берәй вирус инфекцияһы мәлендә бер, йә ике ҡолаҡтың да кинәт кенә ишетмәй һәм сыңлай башлауы был сирҙең тәүге билдәһе).

Һаңғыраулаңыуҙың икенсе төрө - ишетеү нервыларының атрофияһы, йәғни, кире ҡайтарып булмаҫлыҡ үҙгәрештәре сәбәпле, кешенең бер, йәки ике ҡолаҡҡа ла аҙмы-күпме кимәлдә ғүмерлеккә ишетеү һәләте насарайыуы. Ишетеү нервыларының һүнеүе - башлыса юғарыла әйтелгән кохлеарный неврит, йәиһә хроник отит, Меньер ауырыуы арҡаһында була. Шулай уҡ ҡайһы бер антибиотиктарҙы самаһыҙ ҡулланыуҙан, йәиһә оҙаҡ йылдар көслө тауышлы зыянлы производствола эшләү арҡаһында ла булыуы мөмкин. Әгәр ҙә табип-отоларинголог һеҙгә быңа ошо хаҡта белгертә, ҡолаҡ аппараттары тураһында һүҙ сығара икән, быны ниндәйҙер бер ауыр трагедия итеп ҡабул итеү ярамай. Тәҡдирең менән килешергә генә кәрәк. Бәғзеләр һис бер өмөт булмаған һаңғыраулығынан ҡотолоу ниәте менән әллә күпме аҡса сарыф итеп, әллә ҡайҙарға сәфәр ҡылыусан. Ҡайһы берәүҙәр хатта ниндәйҙер экстрасенстарға, күрәҙәселәргә мөрәжәғәт итә башлай. Быңдай осраҡта иң яҡшы кәңәш: ҡолаҡ аппараты һайлап алыу. Әммә ҡолаҡ аппараты ла күп кенә осраҡтарҙа ярҙам итмәй. Эш тауыш ишетеүҙә генә тормай, ә һүҙҙәрҙе аңлау һәләте лә сафтан сыға күпселек ваҡытта. Шунлыҡтан, күп кенә кешеләрҙең ҡолаҡ аппараттары, ғәҙәттә, өйҙә ята бирә. "Уны кейһәм, башым ҡаңғыра", ти ҡайсаҡ оло кешеләр. Был, ысынлап та шулай.

Минең әлеге һаңғырау кешеләргә һәм уларҙың яҡындарына әйтелгән һүҙҙәрем башлыса ана шул ишетеү аппараты ярҙам итмәгән осраҡтарға ҡағыла. Әгәр ҙә быңа шул хәлгә тарыныҡ икән, күҙ алдына ике аяғын да юғалтҡан кешене килтереү хәйерлерәк. Ундай кеше "аяҡтарымды үҫтер", тип, һәр төрлө табиптарға ла, сихырсыларға ла мөрәжәғәт итеп йөрөмәй, ә кешеләр араһында артабан да нормаль рәүештә йәшәү ысулын табырға тырыша, протез йә иһә инвалид коляскаһы хәстәрләй башлай. Әгәр кемгәлер шундай көнгә төшөргә яҙған икән, яҙмышың менән ризалашыу кәрәк һәм бер ваҡытта ла төшөнкөлөккә бирелергә ярамай. Урыҫтар әйтмешләй, оптимист булыу - бик яҡшы сифат! Һәр бер нәмәнең ыңғай яғын күрергә тырышыу кәрәк.

Ә бит оло кешегә һаңғыраулаңыу, ысынлап та, бик файҙалы, бер яҡтан уйлаһаң! Миңә бер мәл Сибай мәсете имамы Әғләмитдин хәҙрәт былай тип әйткәйне: "Һәр төрлө кәрәкмәгән мәғлүмәт, ғәйбәт-маҙарҙы ишетеүҙең кире яҡтарын иҫәпкә алғанда, һаңғыраулаңыу бер ҙә насар нәмә түгел бит ул". Ифрат та дөрөҫ һүҙҙәр. Оло кешеләрҙең насар ишетеүҙәрен, ысынлап та, беҙгә Аллаһ Тәғәлә биргән һанһыҙ ниғмәттәрҙең береһе, тип ҡабул итергә кәрәктер. Әйткәндәй, ниндәйҙер бер хәбәрҙе (яҡшымы ул, насармы) кешенең һәр саҡ ишеткеһе килә, ә ишетһә - һөйләгеһе килә... Теләһә нимәне ишетеү ҙә, уны башҡаларға һөйләү ҙә шәриғәттә хупланмай, хатта йыш ҡына гонаһ, тип һанала. Быңа шуның өсөн дә Аллаһы Тәғәлә тәҡдиреңә яҙғанға сабырлыҡ ҡылып, бары өсөн Уға шөкөр итеп, артабан һис бер бошоноу белмәй йәшәргә тырышыу кәрәк. Раббыбыҙ имандан айырмаһын, аҡылдан, күҙҙән яҙҙырмаһын, аяҡ-ҡулдарҙы һәм башҡа ағзаларҙы хәрәкәтһеҙ ҡалдырмаһын, амин, тип доға ҡылайыҡ.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы хәрби табип.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

Әгәр көндәлек мәшәҡәттәр ялҡыта икән, уларҙы үҙгәртегеҙ. Үҙгәрештәр башҡаларға ихтирамһыҙлыҡты йәки уларҙан өҫтөн булыуҙы аңлатмай. Улар үҙ бәхетең өсөн теләгән һүҙеңде әйтеү һәм үҙ аллы ғәмәлдәр ҡылыу хоҡуғын аңлата. Конфуций был турала шундай һығымта яһаған: "Мәңгелек бәхеткә ынтылыусылар һәр саҡ үҙгәрергә тейеш".

Тәү сиратта, үҙгәрештәргә ҡаршылашыуҙы туҡтатығыҙ. Улар менән йәшәргә һәм уларҙан ҡәнәғәтлек алырға өйрәнегеҙ. Үҙгәрештәр һәр саҡ булып торор. Компанияғыҙ үҙгәреш кисерер, хөкүмәттә лә үҙгәрештәр булыр. Урап алған кешеләрегеҙ алмашыныр. Һәр саҡ нимәлер үҙгәрә икән, ниңә уға ҡаршылашырға? Ниңә: "Тормошомдо яҡшыраҡ итеү өсөн мин нимә эшләй алам?" - тиеүселәрҙең береһе булмаҫҡа?

Дөрөҫ үҙгәрештәр эшләгеҙ. Дөрөҫ үҙгәрештәр һәр саҡ ыңғай. Башта һәр көн, ул көндәлек ғәҙәтегеҙгә әйләнгәнсе, ниндәйҙер ваҡ нәмәләрҙе үҙгәртегеҙ. Бер тормош стиленә генә йәбешеп ятмағыҙ. Мебелегеҙҙе, имиджығыҙҙы, кейем стилен үҙгәртегеҙ. Бүлмәләге предметтарҙы күсереп ҡуйығыҙ. Бер төрлө итеп ҡалдырмағыҙ. Даими рәүештә ниндәйҙер үҙгәрештәр яһап тороғоҙ. Был тормошто ҡыҙыҡлыраҡ итә.

Был идея күңелегеҙгә ятмаймы? Әгәр ыңғай яуап бирһәгеҙ, был бары тик үҙгәрештәрҙән ҡурҡыуығыҙҙы ғына күрһәтә. Ә ҡурҡыуҙы еңер өсөн, нимәнән ҡурҡһағыҙ, шуны эшләү зарур. Үҙгәрештәрҙән ҡурҡһағыҙ икән, тимәк, үҙгәрештәр тәү сираттағы ихтыяж булырға тейеш!

Прическағыҙҙы йәки сәсегеҙҙең төҫөн үҙгәртегеҙ. Яңы мебель алығыҙ, яңы ризыҡтар бешерегеҙ. Әгәр ҡиәфәтегеҙ менән ҡәнәғәт түгелһегеҙ икән, имиджығыҙҙы үҙгәртегеҙ. Яңы ҡиәфәтегеҙ һеҙҙең менән мөғжизә эшләүе мөмкин. Үҙегеҙҙе лә, башҡаларҙы ла яңы үҙегеҙ менән аптыратығыҙ.

Үҙгәреүҙәр - ул ғәҙәт. Тормош нигеҙендә ғәҙәттәр ята. Бала саҡтан уҡ әле теге йәки был хәлгә ниндәй мөнәсәбәт белдерәһегеҙ, шул ҡанығыҙға һеңгән. Тормошто үҙгәртеү, тимәк, ғәҙәттәрҙе үҙгәртеү. Ҡайһы берҙә был процесс күңелегеҙгә ятмауы ла бар, әммә уның ваҡытлыса икәнен онотмағыҙ.

Күңелһеҙ хәүефтән азат булыр өсөн, үҙгәреү процесының файҙаһы тураһында иҫегеҙҙән сығармағыҙ. Элекке һәм фантазия ярҙамында тыуҙырылған ҡатмарлыҡтар урынына файҙа һәм өҫтөнлөктәргә нығыраҡ иғтибар туплағыҙ. Барлыҡ мөмкин булған өҫтөнлөктәрҙе яҙығыҙ. Уларҙы көн һайын ҡысҡырып уҡығыҙ һәм тормошоғоҙға үҙгәрештәр ниндәй ыңғай нәмә килтергәнен күҙәтегеҙ.

Үҙегеҙ менән булған бар ваҡиғаны тормошоғоҙҙо яҡшы яҡҡа үҙгәртеү тип ҡарағыҙ. Әгәр бер эштән икенсеһенә күсәһегеҙ йәки офисығыҙ, бүлегегеҙ ябыла, яратҡан кешегеҙ ташлай, яңы урынға күсенәһегеҙ, машинағыҙ ватыла икән, был күңелһеҙлектәрҙә туҡталып ҡалмағыҙ, уларҙан ниндәй файҙа алып була икәнлеген уйлағыҙ. Үҙгәрештәргә ҡаршылашыуҙан туҡтаһағыҙ, уларҙы ҡабул итһәгеҙ һәм ҡарашығыҙҙы алға, яҡтыға төбәһәгеҙ, мотлаҡ яҡшы нәмәлер табырһығыҙ. Әгәр үҙгәрештәргә әҙер булһағыҙ, алда һеҙҙе бик күп яҡшы сюрприздар көтә.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# ЯҠШЫҒА ӨМӨТЛӘНӘЙЕК!

Яңы йыл хужаһы Әтәс менән бәйле матур хәтирәләр күп ул күңелдә. Бала саҡтың иң яҡты иҫтәлеге - ҡышҡы оҙон төндәрҙә атайҙың беҙгә китап уҡыуы. Оҙон, киң урындыҡта мейескә һөйәлеп әсәйем шәл бәйләй, ә атайым аяғын бөкләп ултырып, беҙгә китап уҡый. Беҙ уның ике тубығына йәбешеп ултырып, мөкиббән китеп тыңлайбыҙ. Атайым ауыр эштән ярғыланып бөткән ҡытыршы ҡулдары менән йә беҙҙе һөйөп ала, йә тулҡынланып торған ҡара сәстәрен бармаҡ аша үткәреп, әсәйемә күҙ һирпә лә, артабан уҡый. Эй, ул бәхетле мәлдәр... Бер саҡ беҙгә атайым беҙгә Динис Исламовтың "Мәскәү юлы" романын ҡысҡырып уҡыны. Шунда төп геройҙың күршеләр кетәгенә инеп йонсотҡан, шул арҡала ғауға сығарған әтәсенең аяғына сабата бәйләп ебәреүе шул тиклем хәтерҙә уйылып ҡалған. Ғөмүмән, Динис Исламовтың әҫәрҙәрен һәр саҡ һоҡланып уҡыйым. Уның геройҙары шундай ихлас, яҡты күңелленәр. Геройҙарының характерын асыр өсөн уларҙы үҙенсәлекле ситуацияларға ҡуя автор. Киң күңелле ауыл бабайы ла, ана, әтәсен һуйырға ҡыҙғана (ауыл йәме булып йөрөй бит ул), шул уҡ ваҡытта күрше күңелен дә уйлай...

Әтәс, тигәндә, әлбиттә, минең ауылдаштарҙың барыһы ла бер ағайҙың мажараларын иҫенә төшөрә. Ул ағайҙың сәйер ғәҙәте бар ине: эсеп алһа, иртә-төн тип ҡарап тормай, күрше-күләндең кетәгенә инеп, тауыҡтар һанай башлай. Ауыл ирҙәре бер нисә тапҡыр биргесләп тә ҡараны, ҡатын-ҡыҙҙар иһә ауыл участковыйына ғариза яҙып, тикшертеп тә йөрөнө. Тик был ағай ғәҙәтен ташламаны. Кетәктә тауыҡтар пырылдап оса башлаһа, "Тағы теге эскән икән" тип баш сайҡауҙан үтмәне ауылдаштар. Был тамашаға беҙҙең күршеләрҙең әтәсе нөктә ҡуйҙы. Үҙҙәренең әтәсе ҡартайғас, күршеләр баҙарҙан йәш әтәс һатып алып ҡайтты. Шпорлы, йөнтәҫ аяҡлы дәү генә әтәс ине ул. Беҙ унан шөрләңкерәй инек, сөнки, абайламай ҡалһаң, баҫтыра башлай ине. Теге ағайыбыҙ "һалмыш" булып, күршебеҙҙең кетәгенә барып ингән икән, әлеге әтәс уның өҫтөнә ташланған. "Ундай әтәсте ғүмеремдә лә күргәнем юҡ ине. Яурыныма ҡунып суҡый башлағайны, ҡурҡыштан айнып киттем..."- тип һөйләгән аҙаҡтан. Шунан һуң кетәклеккә сәйәхәтен туҡтатты ул ағай...

Быйылғы Әтәс йылына ниндәй генә күҙаллауҙар, юрауҙар булмаһын, тыныс күңел менән ҡаршылайым уны. Кешеләргә бер яманлығы ла теймәҫ, тип уйлайым. Үҙебеҙҙең ауыл ҡошо бит әле, әллә ҡайҙағы маймыл, аждаһа, юлбарыҫ түгел. Һәр беребеҙ әтәс кеүек үҙ ҡәлғәһен һаҡлаһа, йоҡлап ятмаһа," тибенһә", үҙ яйын, үҙ ризығын хәстәрләһә, шөйлә насар булмаҫ тормошобоҙ.Таңдарыбыҙ ғына тыныс булһын!

**Нурия ҠУНЫСБАЕВА.**
**Ейәнсура районы.**




Башҡорт ҡатын-ҡыҙы биҙәүестәре:
ҡашмау һәм селтәр
(Авторы Илдар Ғатауллин)

**ҒИНУАР - ҺЫУЫҒАЙ**

| дш | шш | шр | кс | йм | шб | йш |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | | 1 |
| 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 |
| 9 | 10 | 11 | 12 | 13 | 14 | 15 |
| 16 | 17 | 18 | 19 | 20 | 21 | 22 |
| 23 | 24 | 25 | 26 | 27 | 28 | 29 |
| 30 | 31 | | | | | |

**ФЕВРАЛЬ - ШАҠАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | 1 | 2 | 3 | 4 | 5 |
| 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | 11 | 12 |
| 13 | 14 | 15 | 16 | 17 | 18 | 19 |
| 20 | 21 | 22 | 23 | 24 | 25 | 26 |
| 27 | 28 | | | | | |

**МАРТ - БУРАНАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | 1 | 2 | 3 | 4 | 5 |
| 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | 11 | 12 |
| 13 | 14 | 15 | 16 | 17 | 18 | 19 |
| 20 | 21 | 22 | 23 | 24 | 25 | 26 |
| 27 | 28 | 29 | 30 | 31 | | |

**АПРЕЛЬ - АЛАҒАРАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | 1 | 2 |
| 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
| 10 | 11 | 12 | 13 | 14 | 15 | 16 |
| 17 | 18 | 19 | 20 | 21 | 22 | 23 |
| 24 | 25 | 26 | 27 | 28 | 29 | 30 |

**МАЙ - ҺАБАНАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 |
| 8 | 9 | 10 | 11 | 12 | 13 | 14 |
| 15 | 16 | 17 | 18 | 19 | 20 | 21 |
| 22 | 23 | 24 | 25 | 26 | 27 | 28 |
| 29 | 30 | 31 | | | | |

**ИЮНЬ - ҺӨТАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | 1 | 2 | 3 | 4 |
| 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | 11 |
| 12 | 13 | 14 | 15 | 16 | 17 | 18 |
| 19 | 20 | 21 | 22 | 23 | 24 | 25 |
| 26 | 27 | 28 | 29 | 30 | | |

**ИЮЛЬ - МАЙАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | 1 | 2 |
| 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
| 10 | 11 | 12 | 13 | 14 | 15 | 16 |
| 17 | 18 | 19 | 20 | 21 | 22 | 23 |
| 24 | 25 | 26 | 27 | 28 | 29 | 30 |
| 31 | | | | | | |

**АВГУСТ - УРАҒАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 |
| 7 | 8 | 9 | 10 | 11 | 12 | 13 |
| 14 | 15 | 16 | 17 | 18 | 19 | 20 |
| 21 | 22 | 23 | 24 | 25 | 26 | 27 |
| 28 | 29 | 30 | 31 | | | |

**СЕНТЯБРЬ - ҺАРЫСАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | 1 | 2 | 3 |
| 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 |
| 11 | 12 | 13 | 14 | 15 | 16 | 17 |
| 18 | 19 | 20 | 21 | 22 | 23 | 24 |
| 25 | 26 | 27 | 28 | 29 | 30 | |

**ОКТЯБРЬ - ҠАРАСАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | | 1 |
| 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 |
| 9 | 10 | 11 | 12 | 13 | 14 | 15 |
| 16 | 17 | 18 | 19 | 20 | 21 | 22 |
| 23 | 24 | 25 | 26 | 27 | 28 | 29 |
| 30 | 31 | | | | | |

**НОЯБРЬ - ҠЫРПАҒАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | 1 | 2 | 3 | 4 | 5 |
| 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | 11 | 12 |
| 13 | 14 | 15 | 16 | 17 | 18 | 19 |
| 20 | 21 | 22 | 23 | 24 | 25 | 26 |
| 27 | 28 | 29 | 30 | | | |

**ДЕКАБРЬ - АҠЪЮЛАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | 1 | 2 | 3 |
| 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 |
| 11 | 12 | 13 | 14 | 15 | 16 | 17 |
| 18 | 19 | 20 | 21 | 22 | 23 | 24 |
| 25 | 26 | 27 | 28 | 29 | 30 | 31 |
| дш | шш | шр | кс | йм | шб | йш |

ЙОНДОҘНАМӘ

**2017 йыл символы Әтәс, белеүебеҙсә, бер ҡасан да бошмаҫ, теләһә ниндәй хәлдәрҙән дә үҙенә файҙа эҙләүсе йән эйәһе, уның өсөн бер ниндәй ауыр мәсьәлә юҡ, аяҡтарында ныҡ баҫып тора һәм иркен йәшәй. Үҙенә хас йомартлыҡ менән ул шәп кәйефен, энергияһын һәм ыңғайға көйләнешен йондоҙнамә билдәләренә йәлләмәй таратасаҡ, ти йондоҙҙар буйынса юраусы Тамара ханым Глоба. Әтәс йылы бик ҙур файҙа һәм ыңғай тойғолар ғына килтерәсәк эшлекле осрашыуҙар вәғәҙәләй. Был осрашыуҙар артабанғы тормош үсешенә йоғонто яһаясаҡ. Ә бына бер төрлө һәм ялҡытҡыс эш менән мәшғүл булғандарҙан бер ҙә көнләшерлек түгел. Улар үҙ-үҙҙәренән ҡәнәғәтһеҙлек кисерә һәм иреккә, үҙаллылыҡҡа ынтыла. Эшмәкәрлеген алыштырырға ниәтләнеүселәргә кәңәш: бер төрлөлөктән ҡотолоу өсөн әүҙем ял төрҙәре һайлағыҙ, оторһоғоҙ. Әтәстең ярайһы мәкерле мәхлүк икәнен дә онотмағыҙ. Был йыл өсөн ул байтаҡ ҡына көтөлмәгән "бүләктәр" әҙерләгән. Иреккә, мажараларға тартылыу эштә генә түгел, ғаилә, мөхәббәт өлкәләрендә лә күҙәтеләсәк. Ғаилә парҙарына артабанғы яҙмыштары хаҡында етди һөйләшеүҙәргә әҙер булырға кәрәк. Һәр хәлдә, йыл башынан алып уның бөтә 365 көнөндә лә һаҡ, тотанаҡлы булырға, уйлап эш итергә кәңәш бирелә. Бушҡа акса туҙҙырыуҙан, отош уйындарынан ситтә йөрөгөҙ. Иң мөһиме - һаулыҡты ҡайғыртыу. Үҙегеҙгә мәғлүм: Әтәс тыйып тотҡоһоҙ холоҡло булараҡ, һаулыҡҡа зыян килтерерҙәй күңелһеҙ ваҡиғаларға тартылыусан булып сығыр. Уның ҡотҡоһона бирелмәгеҙ, юлдарҙа, ял иткәндә - һәр ерҙә йыйнаҡ, ипле, һаҡ булығыҙ.**

# ӘТӘС МЕНӘН ЙОҠОНАН УЯН...



**Ҡуҙыларҙы** эше, шәхси мөнәсәбәттәренә ҡағылышлы күп үҙгәрештәр көтә. Ижад менән нығып шөғөлләнеү, иң ҡыйыу проекттарығыҙҙың да бойомға ашыр мәле. Уңышты тулыһынса ҡулығыҙға алыр өсөн бәхәстән тыйылыбыраҡ торорға, еңмешлекте маҡсатҡа ынтылыш менән бутамаҫҡа кәңәш ителә.

**Бығаларға** был йылда алһыу күҙлектәрен һалып, тормошҡа реаль күҙлектән ҡарарға тура киләсәк. Һөкландырғыс һөҙөмтәләргә өлгәшеү өсөн төп сифатығыҙ - тыныс холҡоғоҙҙо юғары әүҙемлек менән берләштерергә кәрәк булыр.

**Игеҙәктәргә** үҙҙәренең эске тормош принциптарын ҡайтанан ҡарап сығырға тура килер. Ситтән ҡарағанда, уларҙың тормошо һаман да элеккесә бара һымаҡ тойола, йәғни был билдә вәкилдәре алдарына ҡуйылған мәсьәләләрҙе хәл итеүгә бөтөн көсөн биреп тырыша, ләкин шул уҡ ваҡытта улар: "Ә мин дөрөҫ эшләйемме? Дөрөҫ юлдамынмы?" тигән һорауҙарҙы үҙ-үҙҙәренә бик йыш бирә.

**Ҡысала** үҙенең даими борсолоуҙарын һәм икеләнеүҙәрен тырыш хеҙмәте һәм таныштары араһынан яҡлау эҙләүҙәре менән "шымартырға" тырыша. Тик күңел торошондо кеше ярҙамында ғына көйләп булмаясаҡ. Быйндай мәсьәләләрҙең һәр айырым осраҡтарын ентекле анализлап, борсолоу сәбәптәрен асыҡларға һәм уларҙан ҡотолорға кәрәк буласаҡ.

**Арыҫландарға** Әтәс йылы бик уңай килгәнлектән, уларға уңыш баҫҡысының иң юғары нөктәһенә күтәрелергә һәм теләһә ниндәй мәсьәләне лә хәл итеү мөмкинлеге тыуа. Шул уҡ ваҡытта элекке хаталарҙы төҙәтеү юлдары ла хасил була. Алдына ҡуйылған ниәттәрҙе бойомға ашырыу өсөн тыумыштан килгән ғорурлығыңды еңеп, кешеләр менән дуҫтарса мөнәсәбәттәр булдырыу фарыз икәнен аңларһың.

Йүнсел **Ҡыҙҙарға** йондоҙҙар рухи үсешен үҫтереүгә иғтибар биреүгә һәм бар көсөн үҙ һәләттәрен асыуға йүнәлтергә ҡушыр. Донъяға ҡарашындың нығынып өлгөргән өҫтөнлөктәрен үҙгәртмәйенсә тороп, алдыңа ҡуйылған мәсьәләләрҙе еңеп сығыуы еңелдән булмаясаҡ. Ҡыҙҙар өсөн был йылдағы үҙгәрештәр нигеҙҙә ыңғай булһа ла, уны көтөлмәгәнлек тетрәтер.

**Үлсәүҙәргә** төп маҡсатты һайлау фәнен үҙләштерергә һәм үҙ проекттарына иғтибарҙы туплarға тура килер. Бер аҙ көс һалғанда, теләһә ниндәй пландарығыҙ ҙа уңышлы тормошҡа ашырылыр. Ихтимал, ҡайһы бер ваҡиғалар һеҙҙе бер аҙ сығырығыҙҙан сығарыр, ләкин аҙаҡ ул ваҡиғаларҙың осраҡлы түгеллеген, шулай тейеш булғанлығын төшөнөрһөгөҙ.

**Саяндарҙы** тормоштарының бөтөн өлкәләрендә лә тамырынан үҙгәрештәр көтә һәм был ҡыуанысҡа ғына, сөнки үткән йылғы ваҡиғалар теңкәгә тейеп, ялҡытып бөткән. Енеү түбәһенә тәүге аҙымды һеҙ ғинуарҙа уҡ яһарһығыҙ. Тап шул саҡта был билдәне көтөлмәгән көс-ҡеүәт солғап алыр һәм уның ҡайһы бер идеялары ысынбарлыҡҡа әүерелер.

**Уҡсыларға** Әтәс йылында үҙ тормошон тамырынан үҙгәртеү өсөн бер нисә тапҡыр мөмкинлек тыуыр, ләкин тормош ығы-зығыһында яҙмыш бүләген таный белеү һәм уны ваҡытында файҙаланып ҡалыу - үҙе бер һәләт. Барыһы ла ыңғай барһа, һөҙөмтәлә эске донъяңды үҙгәртеп ҡороп, яңы шәхес кимәленә сығырға буласаҡ.

**Ылаҡтарҙың** фәҡәт тырыштарына һәм яҙмыш һынауҙарына философтарса аҡыл менән ҡарай белгәндәренә генә уңыш йылмайыр. Айырыуса йәйге айҙар еңелдән булмаҫҡа оҡшай, сөнки хатта законды һанлап өйрәнгән билдәләрҙең дә тормошонда хоҡуҡи сетереклектәр булып алыр. Ләкин уларҙың ваҡытлыса ғына икәнен онотмағыҙ.

**Һыуғоярҙар** өсөн 2017 йыл, үтеп киткәне кеүек үк, бик уңышлы һәм емешле булмаҡсы. Әтәс йылы улар өсөн тәүге айҙарҙан уҡ бик яҡшы башланып китер.

**Балыҡтарға** был йылды тормоштарын яҡшы яҡҡа үҙгәртеү мөмкинлеге тыуыр. Бының өсөн уларға әйләнә-тирәләге ваҡиғаларға иғтибарлыраҡ булырға һәм үҙен уратып алған донъяға ҡыҙыҡһыныуын юғалтмаҫҡа ҡушыла.

**Фирүзә ИШБИРҘИНА әҙерләне.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Ғинуар (Рабиғел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ақшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 9 (11) дүшәмбе | 8:08 | 9:38 | 13:30 | 15:38 | 17:08 | 18:38 |
| 10 (12) шишәмбе | 8:07 | 9:37 | 13:30 | 15:40 | 17:10 | 18:40 |
| 11 (13) шаршамбы | 8:06 | 9:36 | 13:30 | 15:41 | 17:11 | 18:41 |
| 12 (14) кесе йома | 8:05 | 9:35 | 13:30 | 15:43 | 17:13 | 18:43 |
| 13 (15) йома | 8:04 | 9:34 | 13:30 | 15:45 | 17:15 | 18:45 |
| 14 (16) шәмбе | 8:03 | 9:33 | 13:30 | 15:46 | 17:16 | 18:46 |
| 15 (17) йәкшәмбе | 8:02 | 9:32 | 13:30 | 15:48 | 17:18 | 18:48 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## ҠОТЛАЙБЫҘ!



Баймаҡ районы Ишбирҙе ауылында йәшәүсе ҡәҙерле атайыбыҙ, ҡартатайыбыҙ, ҡайныбыҙ - һуғыш һәм хеҙмәт ветераны

**Миңнехәт Ғариф улы ИҘЕЛБАЕВты**

оло юбилейы менән ҡайнар ҡотлайбыҙ!

...Үсмер генә йәштә етем ҡалып, береһенән-береһе бәләкәй дүрт ҡустыһына ағай ҙа, атай ҙа булырға тура килә уға. Һөйөклө әсәйебеҙ Мәрзиә Низам ҡыҙы менән икеһе ана шул малайҙарҙы егет ҡорона еткереп, башлы-күҙле итеүгә, үҙ балалары хәстәрлектәре көтә. Һуғыштан һуңғы наҡыҫ йылдар... Күмәк булһаҡ та, кәм-хур булманыҡ, киреһенсә, өҫтөбөҙ бөтөн, тамағыбыҙ туҡ ине. Атайыбыҙ элекке Баймаҡ леспромхозының столяр цехында маҡтаулы, даны тирә-йүнгә таралған балта оҫтаһы булды. Ул етештергән төҙөлөш-ағас продукцияһы - иҙән-түшәм таҡталары, ишек-тәҙрә яҡтары, рамдар, ат саналары, дуға; өҫтәл, ултырғыс, ҡатлы кәштә кеүек өй йыһаздарын ситтән килеп, заказсы предприятиелар йөк-йөк тейәп алып китерҙәр ине. Кеселекле, кеше күңелле, уйы-ғәмәле изгелекле атайыбыҙға ғүмер буйы ала килгән сауап-рәхмәттәре көс-ҡеүәт булып, ғүмеренә артабан да бәрәкәт бирһен Хоҙай, тип теләйбеҙ. Һине яратабыҙ, һин беҙгә кәрәкһең - барсабыҙға терәк-таяныс булып, барлыҡта, һаулыҡта, ҡыуаныста ғына тағы ла оҙон-оҙаҡ йәшә, атай!

**Балалары, килен-кейәүҙәре, ейән-ейәнсәрҙәре исеменән Фәүзиә һәм Гөлфиә МӨХӘМӘТШИНАЛАР.**

* * *

Ҡыш миҙгеленең матур көндәренең береһендә Бөрйән районы Ҡолғона ауылында йәшәүсе әсәйебеҙ, өләсәйебеҙ, ҡәйнәбеҙ

**Зәйтүнә Шәһит ҡыҙы АЙЫТБАЕВАға**

60 йәш тула. Ҡәҙерлебеҙҙе ихлас күңелдән юбилейы менән яраткан гәзитебеҙ аша ҡотлайбыҙ. Әсәйебеҙ ауылыбыҙҙа өлгөлө ағинәйҙәрҙең береһе. "Тамъян гәүһәрҙәре" ансамбле менән һәр байрамда, һәр сарала сығыш яһайҙар, халыҡ уларҙы көтөп ала. Өлкәнәйгәс тә кешеләргә дәрт, матур кәйеф бүләк итеп, йырлап-бейеп, күңел төшөнкөлөгө тигәнде белмәй, беҙҙе һоҡландырып йәшәйҙәр. Әсәйем сабыр холоҡло, тырыш, уңған, тормоштоң ҡәҙерен белеп йәшәгән кешеләрҙең береһе. Үкенескә күрә, атайыбыҙ ғына беҙҙең аранан иртә китте. Әсәйебеҙ ауырлыҡтарға бирешмәй, 5 балаһын да тормош юлына баҫтырҙы, хәҙер һәр беребеҙҙең үҙ ғаиләһе, балалары бар. Ул бай өләсәй ҙә - 17 ейән-ейәнсәре ул тип өҙөлөп тора. Әсәйебеҙгә беҙгә яҡшы тәрбиә биргәне, йәшәү өсөн көс өҫтөп торғаны, аҡыллы кәңәштәре, ҡылған изгелектәре өсөн ҙур рәхмәтебеҙҙе белдереп, уның алдында баш эйәбеҙ! Артабан да беҙҙе ҡыуандырып, оҙаҡ йәшә, һин ҡәҙер-хөрмәткә, тыныс, бәхетле тормошҡа лайыҡлыһың! Көндәрең тик шатлыҡтарҙан, ҡыуанйслы яңылыҡтарҙан торһон. Аллаһы Тәғәлә һиңә ныҡлы һаулыҡ, тыныс тормош, оҙон ғүмер бирһен.

*Юл ҡуймайса һағышҡа,*
*Йәшә, әсәй, шатлыҡта.*
*Бирешмәйсә ҡартлыҡҡа,*
*Уңыш өҫтәп уңышҡа,*
*Ҡал һин мәңге йәшлектә,*
*Алтмышта ла, етмештә...*

**Ҡотлау менән, бөтә балаларың, ейән-ейәнсәрҙәрең.**

Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялаловтың атаһы

**Ялалов Ишмөхәмәт Ғиззәт улының**

вафаты айҡанлы, уның һәм туғандарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ.

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмдең.**

**"Киске Өфө"ләр.**

✓ *Беҙҙең Ғүмәр ауылынан да Әхмәтов Зиннур, Хөсәйенов Шәрип, Ғәббәсов Йосоп исемле абзыйҙар, башҡорт кейеме кейеп, Салауаттың яугирҙары сафына баҫты.*

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# КИНО ЙЫЛЫН ОҘАТЫП...



**2016 йылды, Кино йылын оҙатҡан был көндәрҙә барыбыҙға ла киң билдәле "Салауат Юлаев" фильмына ҡағылышлы хәтирәләремде байҡап үтергә булдым әле.**

Беҙҙең Ишембай районы Маҡар (ул ваҡытта район үҙәге ине) ауылында 1939-1940 йылдарҙа төшөрөлгәйне был кинофильм. Һәр ауылдан бик күп ир-егет, шулай уҡ эйәрле-йүгәнле аттар бер ергә тупланып, төрлө этюдтарҙы төшөрөүҙә ҡатнашты. Беҙҙең Ғүмәр ауылынан да Әхмәтов Зиннур, Хөсәйенов Шәрип, Ғәббәсов Йосоп исемле абзыйҙар, башҡорт кейеме кейеп, Салауаттың яугирҙары сафына баҫты. Ә инде тағы ла бер нисә ир-уҙаман, шул иҫәптән Ҡайғолов Бәхтегәрәй, Мәҡсүтов Хызыр һ.б. батша һалдаттары булып уйнаны.

Фильмдың 5 өлөшө йәй айҙарында төшөрөлдө, унда бик күп халыҡ йәлеп ителде, айырыуса Маҡар ауылы халҡы әүҙем ҡатнашты. Кадрҙарҙың береһендә ҡул тирмәне менән иген тартып ултырған апайҙарҙың Маҡарҙыҡы икәне хәтеремдә ҡалған, шул иҫәптән улар араһында беҙгә туған тейешле Вахитова Вәхиҙә апай ҙа бар ине.

Бер ваҡыт беҙ, фильм төшөрөлгән яландан 5 саҡрым алыҫлыҡта ятҡан Ғүмәр ауылының ыбыр-сыбыр малайҙары, 5 йәшлек мин, 6 йәшлек Рәжәп Кәримов, Вәхитов Әүхәҙи, олораҡ абзыйҙарға эйәреп, яланаяҡ йәйәү йүгереп, саптырып кино төшөрөү мөғжизәһен ҡарарға барҙыҡ. Бәхеткә күрә, таҡтанан эшләнгән майҙансыҡ буш булып сыҡты һәм беҙ шунда менеп ултырып, киноның иң ҡыҙыҡ өлөшөн - аттарҙа яуға сапҡан мәлде күҙәттек. Яҡын итеп күреп, кемдер беҙҙе аҡ икмәк менән һыйланы, бик тәмле булып хәтеремдә ҡалған. Тағы икмәктең иң күп өлөшө Ишбулды абзыйға эләккәне хәтерҙә, ни тиһәң дә, беҙҙең арала иң алдан башлап йөрөүсе ул ине бит.

Бер нисә көндән һуң ауыл урамында Йосоп ағайҙы башҡорт милли кейемендә күреп, һоҡланып, артынан эйәреп йөрөнөк, ә күрше Зиннур ағайҙы бөтөнләй танырлыҡ түгел ине, кино кейемендә Салауат менән йәнәш йөрөгән ысын яугир, мөһабәт батыр булып үҙгәргәйне. Һуңынан, арыу ғына йылдар үткәс, уның шул саҡтағы хәтирәләрҙе тулҡынланып һөйләгәне хәтерҙә ҡалған:

- Арыҫлан Мөбәрәков Салауат булып яуға сапҡанда райсоветтың саптарын менгәйне, бик матур, ярһыу, шәп айғыр ине. Ә мин үҙебеҙҙең колхоз рәйесенең һары айғырын менгәйнем, яуға йәнәш саптыҡ. Тәүге мәлдә минең һары айғыр саптарҙы үтә лә китә, үтә лә китә, һыуға барып етһәк, ул бөтөнләй туҡтап ҡала ла, аша сыҡмай боршаңлай башлай. Шуға күрә Арыҫлан миңә: "Аттарҙы алмашып менәйек, давай", - тип әйтте. Аттарҙы алмаштырырға тура килде...

Ысынлап та, 2016 йылдың 9 октябрендә БСТ каналында А. Мөбәрәковҡа арналған тапшырыуҙа фильмдан өҙөктәр күрһәттеләр, иғтибарлап ҡараһам, яуға сапҡанда Салауат һары айғыр менгәйне, ә инде икенсе кадрҙа саптарҙы ағасҡа бәйләп тора! Шул саҡта Зиннур ағайҙың һөйләгәндәрен иҫкә төшөрөп ултырҙым. "Түбән ос Шәрип ҡарт ябыҡ ҡына, еңел һөйәкле кеше, мулла ролен бик йәтеш итеп башҡарҙы", - тип тә һөйләгәйне ул... Ябай ауыл кешеләре шундай сағыу образдар булып тарихҡа инеп ҡалған, был бит бәләкәй генә ауыл өсөн иҫ киткес ваҡиға.

Тағы ла бер ҡыҙыҡлы хәтирә. Юл буйындағы оло ялан аша үткән телефон бағаналарына ағас ботаҡтары ҡаҙаҡларға мәжбүр булғайнылар, был тарихи дөрөҫлөк өсөн эшләнгән, әлбиттә. Яу сапҡан мәлдәрҙе иғтибарлап ҡараһаң, был бағаналарҙы сырамытырға була.

Маҡар ауылы эргәһендәге Салауатты тотҡан эпизодты төшөргән мәмерйә хәҙер "Салауат мәмерйәһе" тип йөрөтөлә, бик күп туристар, ҡыҙыҡһыныусан юлсылар туҡтап, ҡарап китәләр был тәбиғәт һәм мәҙәниәт ҡомартҡыһын.

Кино, бигерәк тә совет киноһы минең тормошомда бик ҙур урын биләне - мин 1962 йылдан 1993 йылға тиклем Ғүмәр ауылында киномеханик булып эшләнем, ауыл халҡына үҙ ғүмеремдә нисә мең километр оҙонлоғонда кинолента күрһәткәнемде самалап иҫәпләп ҡараһам, иҫ-аҡылым китә: бер тапҡыр ер шарын уратып алырлыҡ фильм әйләндергәнмен икән! Бөтә эштәрҙе планлаштырырға кәрәк ине ул ваҡытта, миңә ололар өсөн айына - 24 сеанс, балалар өсөн 12 сеанс кино ҡуйырға план бирелә. Был планды һәр ваҡыт арттырып үтәнем, шуға күрә иң һәйбәт фильмдарҙы беҙҙең ауылға тәүҙә бирә торғайнылар, бөтә күңелемде биреп, эшемде яратып башҡарҙым, бик күп тапҡыр "Социалистик ярыш еңеүсеһе" булдым, 52 "Почет грамотаһы" менән бүләкләндем...

Бәлки, үҙемде киномеханик һөнәренә бағышлауыма бала саҡтағы "Салауат Юлаев" фильмын төшөргән ергә сәйәхәтем этәргес булғандыр, ә инде эш дәүеремдә был фильмды өс тапҡыр ауылым халҡына күрһәттем. Был фильм ысын мәғәнәһендә милли геройыбыҙҙың тормошобоҙға кире ҡайтыуына башланғыс булды. Үткән быуаттың 40-сы йылдарынан башлап, хәҙерге көндәрҙә лә ошо фильмдағы батыр Салауат образы бик күп быуындарҙа батырлыҡ, тәүәккәллек, саялык өлгөһө тәрбиәләй.

**Ғафир ӘХМӘҘИЕВ,**
**хеҙмәт ветераны.**
**Ишембай районы Ғүмәр ауылы.**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**7 ғинуар "Диңгеҙ. Утрау. Хазина"** (Д. Сәлимйәнов), пираттар мажараһы. Башлана 10.30, 13.00 6+
**7 ғинуар "Бер мәл санаторийҙа..."** (Н. Ғәйетбаев), комедия 16+
**8 ғинуар "Диңгеҙ. Утрау. Хазина"** (Д. Сәлимйәнов), пираттар мажараһы. Башлана 10.30, 13.00 6+
**8 ғинуар "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия 12+
**12 ғинуар "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+
**13 ғинуар "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури, А. Абушахманов, Ш. Ғилманова инц.) 16+
**14 ғинуар "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия 12+
**15 ғинуар "Мулла"** (Т. Миңнуллин), драматик хикәйә 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**7 ғинуар "Тылсымлы тирмән"** (М. Кәрим), әкиәт. Башлана 11.00, 13.30 0+
**7 ғинуар "Ханума"** (А. Цигарели), музыкаль комедия 12+
**8 ғинуар "Тылсымлы тирмән"** (М. Кәрим), әкиәт. Башлана 12.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**6 ғинуар "Әйҙә, әтәс ҡунаҡҡа, йәки Яңы йыл менән!"**, музыкаль-юмористик тамаша башҡорт эстрадаһының сағыу йондоҙҙары ҡатнаша 12+
**7 ғинуар "Пушкинлендта Яңы йыл!"**, интерактив дискотека, мюзикл. Башлана 14.00, 16.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**7 ғинуар "Маленькая история о Маленьком Муке"** (С. Астраханцев), Яңы йыл тамашаһы. Башлана 12.00 0+
**12 ғинуар "Ҡоҙағый"** (Р. Назарғолова), мелодрама 12+
**13 ғинуар "Аҙашҡан ҡунаҡ"** (Н. Птушкина), комедия 12+
**14 ғинуар "Һөйәрҙәргә ҡапҡан"** (И. Йомағолов), комедия 12+

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯҠШЫ ӘҘӘМ АШ АШАЙ,
## яман әҙәм баш ашай

Һине аңламаҫтар тип ҡурҡма, башҡаларҙы аңламауҙан ҡурҡ.

**(Боронғо аҡыл эйәһе).**

Кешеләр үҙ аҡылындағы бушлыҡты йыш ҡына асыу менән тултыра.

**(У. Олджер).**

Өлгөргән еләкте ҡунаҡҡа ике төрлө биреп була: бысраҡ ҡулдарҙа йә ялтырап торған тәрилкәлә - уларҙың тәме төрлөсә буласаҡ.

**(Леонид Сухоруков).**

Ахмаҡҡа уның ахмаҡ икәнен хатта аҡыллы ла иҫбат итә алмаясаҡ.

**(Л. Гаврилов).**

Хәл-ваҡиға менән көрәшеүсе уның ҡолона әүерелә.

**(Сенека).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер крәҫтиән көн һайын бер алмағас янынан үтә икән. Ундағы бер алманы булһа ла өҙөп ашарға теләй, ти, ләкин һорамайынса кешенекен алырға ярамай икәнен дә нык үҙләштергән булғас, ҡыйыулығы етмәй, ти. Ләкин хәйләкәр кеше һәр саҡ юлын таба. Был крәҫтиән дә, сираттағы тапҡыр алмағас алдында туҡтап, шулай ти икән:**

**- Алмағас, алмағас, миңә бер-ике емешеңде генә өҙөп ашарға рөхсәт ит әле!**

**Шунан:**

**- Биш-алтыны ал! - тип үҙ-үҙенә яуап та ҡайтара, ти.**

**Татлы ризыҡты ауыҙ итеү был кешегә шул тиклем оҡшап китә, хатта ул көн һайын алмағастан һыйланырға керешә. Тиҙҙән баҡса хужаһы алмаларҙы кемдер урлап ашағанын шәйләп ҡала. Бер ваҡыт ҡарауыллап ултырып, ул бурҙы тота:**

**- Кеше алмаһын урларға нисек баҙнат иттең? - тип һорай ул, ярһып.**

**- Асыуланма, асыуланма инде миңә, - тип һүҙ башлай крәҫтиән. - Мин урламаным, мин гел һорап алдым!**

**- Шулаймы ни? Ә кемдән һораның?**

**- Алмағастан! - тип яуап бирә крәҫтиән. Һәм шундуҡ алмағастан нисек рөхсәт алғанын һорап күрһәтә. Баҡса хужаһы, күп тә уйлап тормаған, быны ҡоҙоҡҡа елтерәтеп алып барған һәм:**

**- Ҡоҙоҡ, ҡоҙоҡ, ошо ахмаҡты һиндә берике тапҡыр сумдырырға рөхсәт ит әле! - тип ҡысҡырған. Үҙ-үҙенә шундуҡ яуап та бирә икән:**

**- Биш-алты мәртәбә сумдыр һин уны!**

**Шулай итеп, баҡса хужаһы крәҫтиәнде ҡоҙоҡҡа бер нисә тапҡыр сумдырып сығарып, урлау теләге мәңгегә онотолорлоҡ итеп һабаҡ биргән".**


1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 30 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5007
Заказ - 3412/12